ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

18-24 ғинуар (һыуығай)

2020

№3 (889)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Исем эҙләп...**

Европа-Азияны гиҙмә



3

**Ҡол Ғәли тигән шағирыбыҙ...**

үҙ башҡортона ҡайтты



8-9

**Үҙебеҙ һаҡлайыҡ!**



12-13

**Айыуҙмы?**

Ул Госстрах инструкцияһын белмәгән бит



12-13

**ТВ-программа** 14

***Хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ! 2020 йылдың тәүге яртыһы өсөн "Киске Өфө"гә яҙылырға һуңлаған таныштарығыҙға хәбәр итегеҙсе: улар республиканың һәр ауылында, ҡалаһында 17 февралгә тиклем яҙылып, гәзитебеҙҙе марттан алдыра башлай ала. ПР905 индекслы "Киске Өфө" дүрт айға 450 һум 68 тингә төшәсәк. Бергә булайыҡ!***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Быйылғы Тораҡ биләмәләре эстетикаһы йылына ниндәй ниәттәр менән аяҡ баҫтығыҙ?

***Борис БЕЛЯЕВ, БР Торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры:*** Иң тәүҙә шуны әйтергә кәрәк, республикабыҙҙың күп кенә тораҡ биләмәләре күңелдә күңелһеҙ тойғолар ҡалдыра: ҡыйшайып, ауып барған ҡоймалар, бысраҡ күләүектәр, тирә-яҡты сүп-сар, ҡый үләндәре баҫҡан, газон тигәнден ишараты ла юҡ хатта... Республика Башлығы Радий Фәрит улы был мәсьәләне бик урынлы күтәрҙе. Ҡала һәм ауылдарыбыҙ күренешен ипкә килтереү, йәмләндереү һәм йәнләндереү, йәшәгән еребеҙҙе төҙөкләндереү, таҙартыу өсөн был бурысҡа комплекслы ҡараштан сығып эш итергә кәрәк, тип иҫәпләйем. Аныҡ итеп әйткәндә, республиканың муниципаль берәмектәренә, ҡала һәм ауылдар халҡына беҙ нимә тәҡдим итәбеҙ һуң?

Был йәһәттән республика Башлығы аныҡ бурыстар ҡуйҙы. Шуға нигеҙләнеп, Тораҡ биләмәләре эстетикаһы йылын ғәмәлгә ашырыу дүрт йүнәлештә алып барыласаҡ: газондар, тротуарҙар, кәртәләүҙәр һәм яҡтылыҡ менән тәьмин итеү. Тәүге йүнәлешкә килгәндә, Өфө һәм Стәрлетамаҡ ҡалаларынан башҡа газон мәҙәниәте тигән нәмә беҙҙә юҡҡа иҫәп. Шуға күрә, һәр муниципалитет был юҫыҡта үҙ пландарын төҙөп, газон, сәскә түтәлдәре, клумбаларҙы урынлаштырыу схемаһын, тәртибен билдәләп сығырға һәм быны өсөн ер участкалары бүлеп, сәскә орлоҡтары, башҡа кәрәк-яраҡ әҙерләргә һәм эш башларға тейеш. Һөҙөмтәлә ҡалалар һәм ҙур тораҡ биләмәләрендә газон майҙандарын 4-5 тапҡырға арттырырға иҫәп тотабыҙ.

Икенсе йүнәлеш - тротуарҙар. Йөрөгән юлдарыбыҙҙа заманса тротуарҙар һалырға күптән ваҡыт. Юл ситтәрендәге бетон бордюрҙарҙы оҙаҡҡа сыҙарлыҡ гранитҡа алмаштырыу ҙа бар хыялыбыҙҙа. Юлдарҙа мөмкинлеге сикләнгән граждандар өсөн унайлыҡтар булдырыу хаҡында ла онотмайыҡ. Ҡоймалар һәм кәртәләүҙәр мәсьәләһе айырыуса үҙәк урамдарға ҡағыла. Уларҙы берҙәм форматҡа килтереү яйын ҡарарға кәрәк. Был эшкә уларҙың хужалары, арендаторҙар йәлеп ителергә тейеш. Был үҙенә күрә ҙур ғына эш. Ул муниципалитеттарҙың урындағы халыҡ, предприятие һәм учреждениелар, баҡсасылыҡ ойошмалары менән әүҙем ойоштороу эштәре талап итә. Башҡортостанда урамдарҙы яҡтыртыу системаһын яңыртыу буйынса эш алып барыла инде һәм ул быйыл да дауам иттереләсәк. Биләмәләрҙе төҙөкләндереү, таҙартыу, йыйыштырыу эштәренә өмәләр иғлан итеп, халыҡты эшкә әүҙем йәлеп итеү, урамдар һәм йорттар араһында конкурстар ойоштороу ҙа бик мөһим бер бурыс булып тора беҙҙен алда.

**(Аҙағы 2-се биттә).**

АФАРИН!

# ТЕЛҺӨЙӘРҘӘР...

## бәйге тотто




**Ошо көндәрҙә баш ҡалала Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатында башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса регион-ара олимпиада уҙҙы. Утыҙ дүртенсе тапҡыр үткәрелгән сарала йәмғеһе 408 бала үҙ көсөн һынаны, Башҡортостандан 18 уҡыусы, Ырымбур һәм Силәбе өлкәләренән 5 уҡыусы олимпиаданың еңеүселәре тип танылды, бик күптәр призерҙар исемлегенә инде. Беренсе урын алыусыларҙың береһе Ишембай ҡалаһының Ә. Вәлиди исемендәге 2-се Башҡорт гимназия-интернатының 11-се синыф уҡыусыһы Гөлсәсәк Шәрипова һәм уның уҡытыусыһы Фаягөл Әмирханова менән ярыш тураһында әңгәмәләштек.**

**Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса регион-ара олимпиадала йыл да ҡатнашаһығыҙ, быйылғыһынан ниндәй тәьҫораттар менән ҡайттығыҙ?**

**Ф. Әмирханова:** Йыл да олимпиаданың шарттарына төрлө ҡыҙыҡлы үҙгәрештәр индерелеп тороуын барыһы ла белә, мин уларҙы тик ыңғай баһалайым. Ғәҙәттә, ярыштың уҡыусыларҙың һөйләү телмәрен, фекерләү кимәлен һәм белем даирәһен һынар өсөн ойошторолған өсөнсө туры төрлө форматта үткәрелә. Элегерәк яттан һөйләү, төрлө темаларға текст төҙөү, тексҡа комплекслы анализ эшләү кеүек эш төрҙәре булһа, быйыл уҡыусылар тиҫтерҙәре менән диалог ҡорҙо, быйыл иһә "Башҡорт телен үҫтереү" темаһына проект әҙерләп алып барҙылар. Олимпиаданы ойоштороу йәһәтенән тағы ла бер яҡшы яңылыҡ - һәр турҙан һуң баһалар 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты сайтына ҡуйылды һәм уҡыусы үҙенә бирелгән шифр буйынса ниндәй балл йыйыуын белеп барҙы. Бына ошондай ыңғай тәьҫораттар ҡалдырҙы был ярыш. Тәҡдимем дә бар. Башҡа предмет олимпиадаларында уҡыусыларҙы йыйып, типик хаталарҙы анализлайҙар, дөрөҫ яуаптарҙы күрһәтәләр. Бәлки, беҙгә лә шулай эшләргәлер?

**(Дауамы 3-сө биттә).**

12+

**✓ Ауылыбыҙҙы матурлау буйынса өмәләргә халыҡ берҙәм сығып эшләй. Радий Фәрит улының, бындай эштәргә урындағы халыҡты әүҙем йәлеп итергә кәрәк, тигән һүҙҙәре бик дөрөҫ. Кеше үҙ ҡулдары менән эшләнгәндә һаҡлай ҙа беләсәк.**



БЫНАҒАЙЫШ!

# ХИСАПЛАРҒА ӨЙРӘНӘЙЕК



**Оҙайлы ялдарҙан һуң Ҡыш бабай почта йәшниктәребеҙгә йәшәйешебеҙҙә ҡабатланып торған күңелһеҙ гәзиттәрҙең береһе буйынса тағы көтөлмәгән "бүләк" һалып китте: ғинуарҙың тәүге көндәре үк былтырғы йылға йылылыҡ өсөн корректировка эшләнгән БашРТС квитанцияларын ҡулға алып, күптәребеҙ шаңҡыу хәлендә ҡалды.**

Һәр хәлдә, Сипайлово биҫтәһенең Маршал Жуков урамында йәшәүсе пенсионер С.Л. ханым БР Торлаҡ һәм төҙөлөш күҙәтеүе буйынса дәүләт комитетына яҙған хатында йылылыҡ өсөн 17 мең һум түләү һалынған квитанция алып, һуштан яҙыу хәлендә булыуы хаҡында яҙа. Һәм бындай хат-ялыуҙар берәү генә түгел, улар республика Башлығы Р. Хәбиров адресына ла, Торлаҡ күҙәтеүе дәүләт комитетына ла яуа ғына. Баҡтиһәң, йылылыҡ өсөн ана шулай 485 йортҡа өҫтәп хисапланған квитанциялар ебәрелгән. Эш ниҙә һуң? Ниңә был БашРТС тигәндәре йыл һайын шулай халыҡты "яғаһынан дер һелкетеп" алыуҙы ғәҙәт итте? Бындай тетрәнеүҙәргә ҡасан сик ҡуйылыр? Һанһыҙ мөрәжәғәт-ялыуҙарға БашРТС хеҙмәткәрҙәре туҡран тәүбәһеләй шул бер үк һүҙҙе ҡабатлай: "корректировка"... Йәл, был ойошманың халыҡ менән эш алымдарын ғына корректировкалаусы юҡ. Тағы бер әҙер яуап ҡалыбы былай: "Түләүҙәр ОДПУ (дөйөм йорт иҫәп приборы) күрһәткестәренән сығып хисапланды".

Бер яҡтан, ресурс хужаларын аңларға ла була: тәү сиратта улар өсөн - аҡса ҡайғыһы, ә кеше ҡайғыһы, кем әйтмешләй, төштән һуң. Шуға ла иҫәп приборҙары күрһәткестәрен уйлап та тормаҫтан ҡағыҙға төшөрөү улар өсөн бер ни тормай. Ә бына һөҙөмтәлә үҙҙәре үк хисаплап сығарған фантастик һандар уларҙы ғәжәпкә ҡалдырмай, бер ниндәй шик тыуҙырмай микән? Әлеге яңғыҙ йәшәгән пенсионер ҡатындың бер бүлмәле фатирында сауна эшләп торған хәлдә лә бит ул тиклем суммаға йылылыҡ сарыф ителмәҫ ине! Ә бит реаль, үҙҙәре яратҡанса, "корректлы" һандарға нигеҙләнеп, тикшерелгән, анализланған түләү һалыу уларҙың үҙ мәнфәғәтендә лә, сөнки "күҙ йомоп" яҙылған тиҫтәләгән мең һандарҙан килеп тыуасаҡ оло бола, ығы-зығы, күҙ йәштәре, ялыу тикшереүҙәр менән үҙҙәренә үк эште ҡатмарлаштыралар ғына.

Тағы бер ғибрәтле миҫал. Өфөнөң Комсомол урамындағы бер йортта йәшәүселәргә йылылыҡ өсөн генә 2,6 млн түләү килеп төшә. Асыҡланыуынса, күршеләге өс ҡатлы сауҙа үҙәге ошо йорттоң йылылыҡ системаһынан "туҡлана" икән! Ярай әле халыҡ зарына оператив ҡолаҡ һалып, сара күрергә әҙер торған Торлаҡ надзоры буйынса дәүләт комитеты бар. Махсус комиссия был йортҡа килеп, инженер селтәрҙәрен, эргәтирәләге торлаҡ булмаған биналарҙы тикшереп сыҡҡандан һуң, баяғы 2,6 млн түләүҙең "сере" асыҡлана. Законһыҙ хисапланған өҫтәмә түләүҙе фатир хужаларына кире ҡайтарып бирергә ҡушыла. Бына шулай, БашРТС хисапсыларына бер үк эште ҡат-ҡат башҡарырға, ысынлап та, үҙ хаталарын "корректировкаларға" тура килә.

Һүҙ аҙағында шул да мәғлүм булһын: ниһайәт, бындай аңлашылмаусылыҡҡа сик ҡуйылыр, бәлки, тигән өмөт бар. Әмәлгә ҡалғандай, тап ошо араларҙа РФ Хөкүмәте коммуналь хеҙмәттәргә түләүҙәрҙе күрәләтә арттырып иҫәпләүсе компанияларға ҡарата штраф санкцияһын ҡулланыу мәсьәләһен күтәрҙе. Республика Хөкүмәте ултырышында иһә ҙур түләүҙәр һалынған йорттарҙың иҫәп приборҙары төҙөклөгөнә тикшереү үткәреп сығырға ҡарар ителде һәм бының өсөн махсус комиссия төҙөлдө.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Быйылғы Торак биләмәләре эстетикаһы йылына ниндәй ниәттәр менән аяк баҫтығыҙ?

(Башы 1-се биттә).

***Зәһит ҠАШҠАРОВ, Баймаҡ районы Ишмырҙа ауыл хакимиәте башлығы:*** Уйлап ҡараһаң, күптән көн тәртибенә ҡуйылырға тейешле мәсьәлә инде ул бөгөнгө ауылдарыбыҙҙың йөҙө. Ни тиһәң дә, 21-се быуатҡа аяҡ баҫыуыбыҙға ла ике тиҫтә йыл үтеп тә китте, ә беҙҙең ауылдарҙа бөгөн ниндәйҙер үҫеш, үҙгәреш билдәләре һиҙелмәй, ауыл элекке инерция буйынса йәшәп килә, күп ауылдар сүгә бара, унда тороп ҡалған өлкән йәштәге кешеләре менән бергә ҡартая бара һымаҡ. Дөрөҫ, бындай күренеш бөтөн ауылдарға ла ҡағылмайҙыр ҙа, шулай ҙа республика Башлығы Радий Хәбировтың быйылғы йылды Тораҡ биләмәләре эстетикаһы йылы тип иғлан итеүе бик ваҡытлы һәм урынлы булды тип уйлайым.

Радий Фәрит улы Башҡортостан Башлығы булып эш башлағандан алып республикабыҙҙы иңләп-буйлап эш сәфәрҙәре менән күп йөрөй, тимәк, күпте күрә лә. Ауылдарыбыҙ йөҙөн төҙөгөрәк, күркәмерәк, замансараҡ итеп күргеһе килеүе тәбиғи һәм уның был тәҡдиме һис тә юҡтан бар булмағандыр. Республикабыҙ һәм районыбыҙҙың бик күп биләмәләре кеүек үк, беҙҙең ауыл халҡы ла хуплап, берҙәм ҡушылды был саҡырыуға. Хәйер, йәшәгән урын-еребеҙҙе төҙөкләндереү, йәшелләндереү, матурлау кеүек эштәр быға тиклем дә даими рәүештә алып барыла килә беҙҙә. Ауылыбыҙ оло юл эсендә бар ғаләмгә күренеп ятҡан өсөн генә лә түгел. Кеше, айырыуса ауыл халҡы, хәҙер ысынлап та матурлыҡҡа, таҙалыҡҡа, йыйнаҡлыҡҡа ынтыла, иң тәүҙә ул үҙенең шәхси биләмәһен, йорт-ҡура тирәһен төҙөкләндерә һәм матурлай, унан инде ауыл проблемаларына күсә. Быйыл, бөйөк Еңеүҙең 75 йыллығын ҡаршылағанда, был мәсьәлә айырыуса көнүҙәк. Әйткәндәй, Тораҡ биләмәләре эстетикаһы йылын беҙ тап ошо юҫыҡта башлап ебәрәсәкбеҙ ҙә: Бөйөк Ватан һуғышында баш һалған ауылдаштарыбыҙ иҫтәлегенә ҡуйылған обелискты һәм уның тирәһен төҙөкләндереп, тирә-яғына сәскә түтәлдәре ултыртып, кәртәләүен яңыртып ҡуйырға ниәтләйбеҙ.

Ауылыбыҙҙы матурлау буйынса өмәләргә халыҡ берҙәм сығып эшләй. Радий Фәрит улының, бындай эштәргә урындағы халыҡты әүҙем йәлеп итергә кәрәк, тигән һүҙҙәре бик дөрөҫ. Кеше үҙ ҡулдары менән эшләнгәндә һаҡлай ҙа беләсәк, тине ул. Былтыр бергәләшеп ауыл стадионын кәртәләп, буяп ҡуйғайныҡ, унан "Ағас ултырт - ғүмер бүләк ит" девизы менән үткәрелгән "Йәшел Башҡортостан" республика акцияһына ҡушылып, ауылда яңы аллеяға нигеҙ һалынды: билдәләнгән урынды һөрөп, кәртәләп алдыҡ һәм унда 700 төп ҡарағай ултырттыҡ. Былтыр ҡоролоҡ булғанлыҡтан, үҫентеләрҙе ҡарап, тәрбиәләп, һыу һибеп торорға тура килде. Быйыл иһә ошо матур традицияны дауам итеп, 100 төп йүкә ултыртырға уйлайбыҙ. Ни тиһәң дә, ауылыбыҙҙың икенсе исеме - Йүкә бит, әйҙә исеме есеменә тап килһен әле! Ә былай ауылыбыҙ төҙөк, йыйнаҡ. Ике ҡатлы мәктәп, ауыл мәҙәниәт йорто, мәсет һәм башҡа шундай биналар ауылға заманса төҫ биреп, тирә-яҡты йәмләп тора. Йыл да ситтән яҡташтарыбыҙ һабантуйға, ауылдаштар осрашыуҙарына ҡайта, улар алдында ла һынатҡы килмәй, тырышабыҙ.

***Рәшиҙә ИКСАНОВА, Өфө ҡалаһы һөнәрселек колледжы хеҙмәткәре:*** Беҙҙең колледжда уҡыусылар төрлө эшсе һөнәрҙәренә эйә булып сыға. Шулар иҫәбендә ташсы-төҙөүселәр ҙә бар. Улар менән ҡайһы саҡ уҡыған, өйрәнеп йөрөгән һөнәрҙәренең үҙенсәлектәре хаҡында фекер алышырға тура килә. Ҡайһы берәүҙәре үҙҙәре төҙөйәсәк йорт һәм биналарҙы элеккесә "шырпы ҡабылай" бер иш, дүрт мөйөшлө коробкалар итеп күргеләре килмәй бер ҙә. Заманса архитектура өлгөләре буйынса матур, һоҡланғыс биналар төҙөү хыялдары. Ләкин эш төҙөүселә генә тормай шул. Ҡаланың заманға ярашлы йөҙө күп йәһәттән архитекторҙарға, туранан-тура ҡала төҙөлөшө менән шөғөлләнгән чиновниктарға бәйле. Шул уҡ ваҡытта баш ҡалабыҙ йөҙөнә заманса мегаполис сифаттары биреү өсөн ошо хаҡта уйланған, фекер иткән ижад эйәләре, ябай ҡала граждандары, йәмәғәтселек тә күҙ йоморға тейеш түгелдер.

Үҙемә ҡалһа, мине ҡалабыҙҙың милли йөҙө булмауы бик борсой. Ысынлап та, Башҡортостандың баш ҡалаһы тип әйтерлек, уның үҙенә генә хас милли колориты менән күҙгә бәрелеп, балҡып торорға тейеш бит Өфөбөҙ! Был йәһәттән Ҡаҙағстандың баш ҡалаһы Нурсолтанды (элек Астана) миҫал итеп килтерергә булыр ине. Унда милли ҡаҙаҡ колориты заманса архитектура өлгөләре менән бик урынлы яраштырып хәл ителә. Беҙҙең ҡалаға бына ошондай архитектура табыштары етмәй, минеңсә. Әлбиттә, милли үҙенсәлекле ҡайһы бер айырым урындар, һәйкәлдәр бар ҙа ул, тик был ғына аҙ. Күпме һөйләйбеҙ, яҙабыҙ инде Урал батырҙың героик һынын, Аҡбуҙатыбыҙҙы кәүҙәләндереү хаҡында ғына ла. Әйткәндәй, эпос геройҙарын, башҡа халыҡ әкиәттәре персонаждарын ваҡлап, арт-объекттар рәүешендә түгел, ә мөһабәт итеп, кеше күрерҙәй урындарға ҡуйыу яғын ҡарарға кәрәк. Милли колорит, тигәндән, исмаһам, баш ҡалабыҙға килеп ингән урындарҙы булһа ла матур итеп төҙөкләндерергә, биналарҙы башҡорт орнаменттары менән биҙәкләп сығырға ине. Ҡала йорттары фасадтарын башҡарыу-биҙәкләүҙә милли һәм этник мотивтарҙы ҡыйыуыраҡ файҙаланырға кәрәк, тигән тәҡдимдәр ишетелеп тора ул. Үкенескә, был йүнәлештә бер ниндәй ҙә үҙгәрештәр күренмәй. Исмаһам, быйыл, Тораҡ биләмәләре эстетикаһы йылы иғлан ителеү менән бәйле үрҙә әйтеп кителгән ҡайһы бер эштәрҙе башҡарырға форсат тыуыр, бәлки?..



**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров яңы йыл каникулдарында хәмер һатыуҙы ваҡытлыса тыйыуҙың йомғаҡтарын ыңғай баһаланы һәм бындай тәжрибә дауам ителер тип белдерҙе. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, 3 ғинуарҙа магазиндарҙа иҫерткес эсемлектәр, шул иҫәптән һыра һатыу тыйылды. Бынан тыш, 4, 5 һәм 6 ғинуарҙа ла алкоголь һатыу сикләнде. Башҡортостан Башлығы муниципалитеттарға күркәм шыршылар, матур итеп биҙәлгән боҙ ҡаласыҡтары, "халыҡ ҡыуанһын" өсөн байтаҡ эштәр башҡарған өсөн рәхмәт әйтте.

✓"Юғары ос!" республика проекты сиктәрендә Үрге Тәтешле ауылының 1-се мәктәбендә 2019 йылдың декабрендә стоматология бүлмәһен капиталь ремонтлау тамамланды. "Был - мин ҡараған тәүге әҙер стоматология бүлмәһе. Башҡортостандың стоматология бүлмәләрен тергеҙеү тәжрибәһе Рәсәйҙә иң яҡшыларының береһе тип танылған, бөтәһе ошондай 61 бүлмә буласаҡ. Хәҙер беҙ 700-ҙән ашыу уҡыусы белем алған мәктәптәрҙә стоматология бүлмәләрен асабыҙ, шунан һуң 500 уҡыусылыҡ мәктәптәрҙе йыһазландыра башлайбыҙ", - тине Тәтешлегә сәфәре барышында Радий Хәбиров.

✓Ғәзиз Манапов Бөрйән районы башлығы итеп тәғәйенләнде. Был турала республика Хөкүмәтендәге оператив кәңәшмәлә Радий Хәбиров хәбәр итте. Муниципалитеттың элекке башлығы Рөстәм Шәрипов уҙған йылдың декабренән Хәйбулла районы хакимиәтен етәкләй. Тәғәйенләнгәнгә тиклем Ғәзиз Манапов Бөрйән районы башлығының иҡтисади мәсьәләләр буйынса урынбаҫары булып эшләне.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың бойороғо менән Диана Ихсанова республика етәксеһенең матбуғат секретары итеп тәғәйенләнде. Быға тиклем ошо вазифала эшләгән Фәнүр Йәғәфәров уҙған йылдың октябренән вице-премьер вазифаһында республика Мәғариф һәм фән министрлығы, Мәҙәниәт министрлығы, Мәғариф өлкәһендә контроль һәм күҙәтеү идаралығы, Матбуғат һәм киң мәғлүмәт саралары агентлығы эшмәкәрлеге өсөн яуап бирә.

✓2020 йылдың 31 декабренә тиклем Башҡортостанда йәшәүселәр муниципалитеттарҙың, шулай уҡ халыҡҡа хеҙмәт күрһәткән дәүләт һәм муниципаль ойошмаларҙың эшен баһалай ала. Һорауҙарҙы "Голос Республики Башкортостан" порталында бирергә була. Халыҡтың фекере менән ҡыҙыҡһыныуҙың төп маҡсаты - урындағы үҙидара органдары эшмәкәрлегенең һөҙөмтәлелеген арттырыу, тип өҫтәнеләр Хөкүмәттә.

УЙЛЫҒА - УЙ

# ИСЕМ ЭҘЛӘП...

## Европа-Азияны гиҙмә



**Бала тыуа... Кескәй йән эйәһе ғаиләгә шатлыҡ-ҡыуаныстар алып килә. Өйҙә йәм, ырыҫ, ҡот арта. Йәш сабый үҙе менән бергә ғаиләгә яңы хәстәрҙәр ҙә килтерә. Уларҙың иң тәүгеһе - балаға исем ҡушыу.**

Эйе, был бик ҙур, изге һәм яуаплы бурыс, сөнки исем атаәсәнең үҙ сабыйына биргән иң беренсе, иң ҡиммәтле, ғүмер буйы йөрөтә торған ҡәҙерле бүләге. Ә бала үҙе - Аллаһы Тәғәлә тарафынан бирелгән бүләк. Ата-әсә балаһының бәхетле, тәүфиҡлы, һөймәлекле, эшһөйәр булыуын теләй. Ошо теләк сабыйға ҡушҡан исемдәрҙә сағылырға тейеш. Исем иң элек кешегә мөрәжәғәт итеү, өндәшеү өсөн кәрәк.

Башҡорттар борон-борондан балаға ғәрәп, фарсы сығанаҡлы исемдәр ҡушҡан. Һәр исем матур яңғырашлы һәм мәғәнәле булған. Тыуған Ҡәҙер (Дыуан районы) ауылында күршебеҙҙә Ахун бабай менән Мәрзиә әбейҙең ғаиләһендә 9 бала үҫте. Уларҙың исемдәре ошондай мәғәнәле булды: Рәкифә (теләк, хыял), Вәриҡа (йәшел япраҡ), Хужа (баш кеше), Фатима (Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең ҡыҙы), Ғәлиәскәр (оло, ҙур), Самат (мәңгелек), Әхтәмйән (йомарт), Әнисә (яҡын дуҫ), Рәйсә (башлыҡ).

Беҙ ғаиләлә өс бала үҫтек. Беҙгә Мөслимә (мосолман ҡыҙы), Әбүбәкер (саф, тоғро, намыҫлы), Зөлхизә (ай атамаһы) тип ҡушҡандар. Арҡауылда Хужа бабай уландарына Рәшит (тура юлдан барыусы), Сәғит (бәхетле), Сабит (һүҙендә тороусы), Мәжит (данлы, маҡтаулы), Ғәбит (хеҙмәт һөйөүсе) тигән исемдәр ҡушҡан. Был исемдәрҙә беҙҙең милләтебеҙ, телебеҙ, йәшәү рәүешебеҙ, тарихыбыҙ сағыла. Исемдәрҙе есемдәренә тап килеп тора. Хатта исемгә ҡарап милләтте лә билдәләп була. Юғарылағы исемдәр шәхестең башҡортлоғона ишара яһай. Исеме мәғәнәле булһа, бала оялып, уңайһыҙланып йөрөмәй, ә үҙен-үҙе ғорур тота. Төрлө йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр милли булған кеүек, исем дә милли күренеш.

Балаға исем ҡушыу йәһәтенән беҙ рус иптәштәрҙән фәһем алырға тейешбеҙ. Улар балаһына сит-иттәрҙың исемен ҡушмай. Ата-бабалары ҡуша килгән исемдәргә тоғролар. Мәҫәлән, Михаил, Сергей, Евгений, Юрий, Полина, Ксения, Татьяна, Любовь, Антонина.

Мосолман ғаиләһендә ир бала тыуһа, Аллаһы Тәғәләнең күркәм, уны ололай торған 99 исеменең береһен ҡуша ала, мәҫәлән, Рәхим, Ғәзим, Шәкүр, Жәлил, Кәрим, Вәкил, Хәмит һ.б. Беҙ, уҡытыусылар, бала исеменә битараф түгелбеҙ. Дәрестә балаға һәр саҡ исеме менән өндәшәбеҙ. Милли исемдәребеҙ балаға иркәләп, яратып өндәшеү өсөн дә ҡулай. Бөгөн милләтен хөрмәт иткән ата-әсәләр балаға милли яңғырашлы исемдәр ҡуша киләләр. Мәҫәлән, Арҡауыл мәктәбе уҡыусылары араһында борон-борондан ата-бабалар ҡуша килгән исемдәр күп. Хантимер, Арыҫлан, Данияр, Таһир, Самат, Ильяс, Мораҙым, Әлфиә, Миләүшә, Лилиә, Зөлфиә, Илһөйәр, Батыр, Наҙгөл. Рәхмәт уларҙың ата-әсәләренә, милләткә хыянат итмәй, күркәм исемдәр ҡушҡандар. Милләтенә балалар тыуҙырып, матур исемдәр ҡушыу - һөйөнөслө хәл. Һуңғы ваҡытта Версал, Ванцет, Славик, Юрик, Эдгар, Дунай, Аэлита, Элеонора, Амалия, Снежана, Ральвина, Королиналардың ишеүеп китеүе эсте бошора, миллилекте юғалта.

Бала тыуғас та йәш әсәгә ололар исем һайлауҙа кәңәш бирергә тейеш. Йәш әсә сабыйына "яңыса исем" ҡушам тип хаталанып ҡуймаһын ине. Исем эҙләп Европа-Азияны гиҙергә ярамай, урыҫлашыу ҙа милләтте күркәм итмәй. Һәр милләт үҙ исеме менән матур. Замана үҙгәрә, асылыбыҙға ҡайтабыҙ, йолаларыбыҙҙы тергеҙәбеҙ. Йәш ғаиләләргә исемдәрҙе халыҡ ижадынан, әҙәби әҫәрҙәрҙән һайларға мөмкин. Алтынай, Шәүрә, Нәркәс, Зөһрә, Таһир, Юлай, Зөләйха, Салауат, Сәлимә, Мәрйәм... Ниндәй аһәңле, матур яңғырашлы исемдәр! Баланы иркәләү өсөн дә ягымлы.

Мосолман балаһына исемде мулла аҙанлап ҡуша. Балаға милли исем ҡушырға кәңәш бирергә хоҡуҡлы улар. Мәғрифәтле муллалар сит-ят исемдәрҙе аҙанламай, хаҡ хөкөм итә.

ЗАГС бүлегендә тыуыу тураһында таныҡлыҡ бирәләр. Уларҙа "Башҡорт исемдәре" китабы булырға тейеш. Таныҡлыҡ биреүсе үҙенең кәңәшен дә бирә бара. Мәҫәлән, Рухтин ауыл советы (Дыуан) Ҡәҙер ауылының башҡорт балаларына тик үҙ исемдәрен яҙып ҡына метрика бирә. Анжеликаны Әминә тип тәҙәтәләр, афарин, шәп эшләйҙәр. Фекерлегә фәһем бар уйланырға. Бала үҫә, шәхес булып формалаша. Уҡырға, эшкә сығып китә. Анжелика исемле башҡорттан һораясаҡтар: "Ҡайһы яҡтанһың, атайың менән әсәйең кемдәр?" Ошондай һорауҙарҙы күп ишеткән бар. Халыҡ был тәңгәлдә бик яңылыша, һаташа тиер инем мин. Кеше ологая, ҡартая ла бит әле. Фердинант, Робинзон, Рональд, Фрунзе исемле башҡорт бабайҙарының исемен ишетеү ҡолаҡҡа ятмай, аяныс хәл.

Милләтебеҙгә лайыҡлы балалар үҫтерәйек, йәмәғәт! Бала үҙенә үҙе исем ҡуша алмай, балаларыбыҙҙы матур милли исемдәр ҡушып һөйөндөрөгөҙ, ата-әсәләр!

**Мөслимә МӨҒТӘБӘРОВА, педагогия хеҙмәте ветераны. Салауат районы.**

АФАРИН!

# ТЕЛҺӨЙӘРҘӘР...

## бәйге тотто



**(Башы 1-се биттә).**

**Г. Шәрипова:** Был олимпиадала 3-сө тапҡыр ҡатнашам, ике йыл рәттән беренсе урын яулайым. Ярыш йылдағыса үтте, шулай ҙа һәр уҡыусыға проект эшен күрһәтеү мөмкинлеге бирелеүе ҡыҙыҡлы булды. Мин башҡорт телен интернет селтәрендә үҫтереү һәм популярлаштырыуға арналған проект тәҡдим иттем. Уның сиктәрендә "Youtube" каналында, "Инстаграм", "Бәйләнештә", "Телеграм" һәм башҡа социаль селтәрҙәрҙә сифатлы башҡортса контент булдырыу, быны өсөн нимә эшләү мөһимлеге тураһында һөйләнем. Уҡыусыларға психологик ярҙам, тематик тәржемәләр, уйынға ҡоролған телде өйрәнеү ҡушымталары, башҡортса әҙәби әҫәрҙәрҙең руссаға тәржемәләре тупланған төркөм, әҫәрҙәрҙең йөкмәткеһе буйынса мауыҡтырғыс видеояҙмалар сығарыу кәрәк. Йәштәрҙе башҡорт телен белергә һәм әҙәбиәтебеҙҙе уҡырға йәлеп итеү өсөн уларға яҡын һәм ҡыҙыҡлы эш йүнәлештәренә мөрәжәғәт итеү мөһим. Олимпиадала ҡатнашҡан башҡа уҡыусыларҙың проекттарынан башҡортса яҙыулы кейемдәрҙе күберәк етештереү һәм йылҡы малына ҡағылышлы терминологияны киң ҡулланылышҡа ҡайтарыу өсөн төрлө календарҙар, башҡа материалдар сығарыу тәҡдим итеүҙәре иҫтә ҡалды.

▸ **Быйылдан республика юғары уҡыу йорттарына ингәндә Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиадала еңгән 11-се синыф уҡыусыларының БДИ һөҙөмтәләренә өҫтәмә балл биреләсәк. Был яңылыҡты нисек ҡабул иттегеҙ?**

**Ф. Әмирханова:** Башҡорт телен ғаиләбеҙҙә һаҡлап ҡала алабыҙ, тиһәләр ҙә, дәүләт теле булған туған телебеҙ дәүләт яҡлауына мохтаж. Өҫтәмә балл да, бүтән предмет еңеүселәре кеүек үк, был олимпиада еңеүселәрҙең дә БР Башлығының һәләтле балалар өсөн булдырылған грантына дәғүә итә алыуы ла шатландырҙы! Юғиһә, былтыр башҡа предметтар буйынса олимпиада еңеүселәрен ҡотлағанда телһөйәр балаларыбыҙҙың күңеле кителмәгән тип уйлайһығыҙмы! Уҡыусыларҙың ғына түгел, үҙебеҙҙең күңелдә лә рәнйеү уяна торғайны. Ә быйыл был бәйгегә әҙерләнгәндә өмөт-дәрт тыуҙы: башҡорт теле башҡа фәндәр кимәленә күтәрелде!

▸ **Кем ул телһөйәр?**

**Г. Шәрипова:** Телһөйәр - ул туған телен белеп, туған телендә аралашҡан ғына түгел, ә тәрбиәле, әҙәпле, намыҫлы, рухлы һәм туған теленә, моңона мөхәббәтле кеше. Һәм беҙ тик үҙ телебеҙ аша ғына быуаттар артылышында йәшәгән әләсәй-олатайҙарыбыҙҙың аҡылын, моңон туплай алабыҙ. Тиҫтерҙәремә мин һәр сәғәтте, минутты дөрөҫ файҙаланып, төплө белем алып, тәрбиәле, әҙәпле, рухлы илһөйәр һәм телһөйәрҙәр булып үҫеүҙәрен теләр инем. Башҡорт теле һәм әҙәбиәте буйынса төбәк-ара олимпиада ошо маҡсатҡа өлгәшергә, туған телемде белеү кимәлен үҫтерергә, белемемде камиллаштырырға булышлыҡ итеүе менән дә ҡәҙерле миңә.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Быйыл республикабыҙҙың дәүләт телдәренең береһе булған башҡорт теленә һәр яҡлап та иғтибар артыуы бына ниндәй ыңғай һөҙөмтәләргә килтергән: уҡыусыларға артабан да тырышып тел нескәлектәрен өйрәнергә, ә уҡытыусыларға ең һыҙғанып эшләргә дәрт-дарман биргән. Киләсәктә лә был олимпиада башҡорт телен туған теле һәм дәүләт теле булараҡ яратып уҡыған йәш быуындың тырышлығына лайыҡлы баһа бирерлек абруйлы бәйге булып ҡалыр, тип ышанабыҙ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓2020 йылдан Башҡортостанда дөйөм суммаһы 20 миллион һумға "белем биреү эшмәкәрлегендә юғары һөҙөмтәләргә өлгәшкән өсөн" 1 миллион һумлыҡ 20 грант булдырыла. Улар һәр уҡыу йылы аҙағында республиканың иң яҡшы 10 ҡала һәм 10 ауыл белем биреү ойошмаһына тапшырыла. Радий Хәбиров Башҡортостан етәксеһенең ошо өлкәләге гранттары тураһында указға ҡул ҡуйҙы.

✓"Ҡара куб" социаль инновациялар үҙәге Instagram, Facebook, "Бәйләнештә", Twitter һәм "Класташтар" социаль селтәрҙәрендә Рәсәй Федерацияһы субъекттары етәкселәренең аккаунттарын анализланы. Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың аккаунты "лайктар" һәм комментарийҙар һаны буйынса Рәсәй төбәктәре етәкселәренең иң "йәнле" аккаунттары иҫәбенә инде.

✓Башҡортостан Республикаһы буйынса Ғәҙәттән тыш хәлдәр министрлығының матбуғат хеҙмәте 15 ғинуарҙа иртән Өфө ҡалаһының Пекин урамындағы 16-сы йортта стена емерелеүе тураһында хәбәр итте. Көнкүреш газы шартлауы арҡаһында икенсе ҡатта түшәм емерелгәне асыҡланған. 30 кеше үҙ аллы эвакуацияланған, өс кеше йәрәхәтләнгән, уларҙың береһе - бала. Конструкцияларҙы һүтеү эштәре бара.

✓Башҡортостанда Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығы, Мәғариф һәм фән министрлығы һәм Башҡортостан Республикаһының спорт көрәше федерацияһы "Спорт көрәше - Башҡортостан Республикаһы мәктәптәренә" проектын ғәмәлгә ашырыуҙа уҙара эш итеү тураһында килешеү төҙөнө. Яҡтар мәктәптәрҙә физкультура-спорт һәм һауыҡтырыу эше барышында спорт көрәше дәрестәрен ойоштороу өсөн шарттарҙы үҫтереү буйынса үҙ-ара эш итергә һөйләшеп килеште.

✓1 ғинуарҙан үҙ көсөнә ингән үҙгәрештәргә ярашлы, әсәлек капиталы күләме 466 мең 617 һумға тиклем арттырылды, тип хәбәр итә Пенсия фондының матбуғат хеҙмәте. Былтырғы менән сағыштырғанда уның суммаһы 13,6 мең һумға йәки 3 процентҡа артты. Индексация уҙған йылдың аҙағына сертификатта тулы йә иһә өлөшләтә күләмдә аҡсаһы булған барлыҡ ғаиләләргә ҡағылды. Рәсәйҙең Пенсия фонды мәғлүмәттәре буйынса, улар бөтәһе - 3,4 миллион ғаилә.

*✓ Моғайын, Президенттың аҙ килемле ғаиләләргә, балаларҙы һәм әсәлекте ҡурсалауға йүнәлтелгән тәкдимдәре иң ҡыуаныслы вәҡиғаларҙың береһе булғандыр. Был - беренсе бала өсөн әсәлек капиталын булдырыу, күләмен арттырыу.*



*ПРЕЗИДЕНТ ӘЙТТЕ!*

# ҒАИЛӘЛӘР ИШӘЙҺЕН



**Башҡортостан Республикаһы Башлығы Радий Хәбиров Рәсәй Президенты Владимир Путиндың Федераль Йыйылышҡа Мөрәжәғәтнамәһен иғлан итеү церемонияһында ҡатнашты.**

Ошо йылдың 15 ғинуарында Мәскәү ҡалаһының "Манеж" үҙәк күргәҙмә залында үткән сәйәси сарала Федерация Советы ағзалары, Дәүләт Думаһы депутаттары, РФ Хөкүмәте ағзалары, Рәсәйҙең Конституцион һәм Юғары судтары рәйестәре, Рәсәй субъекттары башлыҡтары һәм урындарҙағы парламент рәйестәре, төп конфессияларҙың башлыҡтары һәм йәмәғәтселек вәкилдәре ҡатнашты. Әйтергә кәрәк, был юлы В.В. Путин үҙенең Мөрәжәғәтнамәһе сиктәрендә Рәсәй дәүләтендә яҡын киләсәктә ғәмәлгә ашырыласаҡ ижтимағи-сәйәси үҙгәрештәр хаҡында асыҡтан-асыҡ белдереү менән сығыш яһаны. Ил етәксеһе бындай үҙгәрештәрҙең заман талабына һәм киң халыҡ массалары ихтыяжына ярашлы башҡарыласағына баҫым яһаны. Иғлан ителгән үҙгәрештәр планын ғәмәлгә ашырыу Рәсәйҙең яңыртылған Хөкүмәтенә йөкмәтеләсәк, шуға күрә премьер-министр Дмитрий Медведев етәкләгән кабинет отставкаға ебәрелде.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров ошо хаҡта киң матбуғат сараларына биргән комментарийҙарында былай тине:

- Моғайын, Президенттың аҙ килемле ғаиләләргә, балаларҙы һәм әсәлекте ҡурсалауға йүнәлтелгән тәкдимдәре иң ҡыуаныслы вәҡиғаларҙың береһе булғандыр. Был - беренсе бала өсөн әсәлек капиталын булдырыу, ошо капиталдың күләмен арттырыу. Әлегә беҙҙең хыялыбыҙҙа ла булмаған, иҫ киткес норма - ул 3 йәштән 7 йәшкә тиклемге балаларға пособие булдырыу. Был абсолют кимәлдәге яңылыҡ, һәм ул балалы ғаиләләргә һиҙелерлек ярҙам буласаҡ. Сөнки балалар - шатлыҡ, йәм дә бирә, шул уҡ ваҡытта ғаиләнән байтаҡ сығымдар ҙа талап итә.

Балаларҙы туҡландырыу, мәктәптәрҙә ашатыу проблемаһы ла беҙ республикала алып барған эшкә тап килеп тора. Дөрөҫөн әйткәндә, беренсе кластан алып дүртенсегә тиклем барса уҡыусыларҙы ла ҡайнар аш менән тәьмин итеүгә күсеү хаҡында бер генә тапҡыр уйламаныҡ беҙ. Тик аҡса проблемаһы булды. Хәҙер ошондай ҡарарҙы Президент ҡабул итте. Был ысынлап та бик кәрәкле бурыс. Был - беренсе блок. Икенсе блок та бик мөһим. Президент илебеҙҙә үҫтереүҙә төбәктәрҙең һәм губернаторҙарҙың ролен нығытыу хаҡында асыҡ сигнал бирҙе. Был Конституцияны үҙгәртеү сиктәренә лә инә. Госсовет губернаторҙарҙың федераль структуралар менән бәйләнешендәге ролен нығытыусы конституцион орган буласаҡ. Бюджет заказын, вуздарҙың маҡсатлы заказын формалаштырыу йәһәтенән беҙгә билдәле бер хоҡуҡтар биреләсәк. Был төбәк вуздарын үҫтереү мөмкинлектәрен киңәйтәсәк. Был да беҙҙең өсөн үтә мөһим тема. Дөйөм алғанда, беләһегеҙме, беҙ хәҙер өйҙәребеҙгә ғәжәп күтәренке кәйеф менән ҡайтабыҙ. Мөрәжәғәтнамәне һәр хәрефенә тиклем ентекләп ҡарап, Президенттан тейешле күрһәтмәләр көтәбеҙ. Ҡабатлап әйтәм: мине һиҫкәндергән, иң төп акцент - балалы ғаиләләребеҙҙең һиҙелерлек етди финанс ярҙамы алыуында. Был республикабыҙҙа алып барған төп эшебеҙгә тап килә, әммә федераль бюджеттан башҡа, федераль ярҙамдан тыш беҙ бындай мәсьәләне хәл итә алмаҫ инек.

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

## АУЫЛҒА - ТРЕНЕРҘАР!




**Башҡортостан Хөкүмәте президиумы ултырышында республика биләмәһендә урынлашҡан ауылдарҙа, эшсе ҡасабаларҙа, ҡала тибындағы ҡасабаларҙа һәм 50 меңгә тиклем кеше йәшәгән ҡалаларҙа спорт әҙерлеге программаларын тормошҡа ашырыуҙа ҡатнашҡан тренерҙарға 600 мең һумлыҡ бер тапҡыр бирелә торған компенсация түләү тәртибе раҫланды. Ул йыл һайын Башҡортостандың 100 ауыл тренерына торлаҡ һатып алыу, тәҙәү йәки ер участкаһы алыу өсөн тапшырыласаҡ.**

"Ауыл тренеры" программаһы буйынса һәр йылғы финанслау күләме 60 миллион һум тәшкил итә, - тип хәбәр итте йәштәр сәйәсәте һәм спорт министры Руслан Хәбибов. - Был документты беҙ Рәсәйҙең Спорт министрлығы менән әҙерләнек. Хәҙер ул беҙҙең проектты нигеҙ итеп алып, федераль кимәлдәге ошондай документ әҙерләй башлай. Бөгөнгө көндә Рәсәйҙә тап ауыл тренеры буйынса бындай тәжрибә юҡ. Беҙ беренсе булып башлайбыҙ". Руслан Хәбибов әйтеүенсә, тренер "район хакимиәте менән ошондай бер тапҡыр бирелә торған түләү тураһында килешеү төҙөгәндән һуң 5 йыл буйына" үҙенең бурыстарын башҡарырға бурыслы.

Башҡортостан Спорт министрлығының һуңғы мәғлүмәттәренә ярашлы, хәҙер ауылда эшләү өсөн 131 тренер кәрәк. Ауыл райондарында талап ителгән спорт төрҙәре иҫәбендә - йөҙөү, спорт көрәше һәм көрәш. Әлеге ваҡытта спорт әҙерлеге республиканың ете районында уҙғарыла. Улар араһында - Бәләбәй, Белорет, Бишбүләк, Бөрө, Ишембай, Өфө һәм Туймазы. Тағы һигеҙ муниципалитет: Ағиҙел, шулай уҡ Бөрйән, Күгәрсен, Кушнаренко, Көйөргәҙе, Тәтешле, Учалы һәм Яңауыл райондары киләсәктә спорт әҙерлеге буйынса структур бүлектәр асыуҙары мөмкин. "Ауылда спортҡа булышлыҡ итеү - мөһим бурыс. Эштә беҙҙең төп йүнәлештәрҙең береһе тап ауыл биләмәләрен үҫтереү менән бәйле. Минеңсә, был дөрөҫ программа, уны дауам итергә һәм ауылдарға квалификациялы кадрҙар йәлеп итергә кәрәк", - тип белдерҙе Башҡортостан Хөкүмәтенең беренсе вице-премьеры Андрей Назаров.

## ВЕТЕРАНДАРҒА - ИҒТИБАР

**Быйыл уҡ Башҡортостанда Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары өсөн яңы дәүләт хеҙмәте - шәхси ҡараусы хеҙмәте индерелә. Республика Хөкүмәте президиумы ултырышында вице-премьер Ленара Иванова шул турала белдерҙе. Уның һүҙҙәренсә, әле республикала йәшәгән 69 Бөйөк Ватан һуғышы ҡатнашыусыһы ошондай хеҙмәткә мохтаж.**

Шулай уҡ вице-премьер белдереүенсә, тиҙҙән Башҡортостан ҡалаларында һәм райондарында Яндекс.Такси Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын һәм инвалидтарын, Ленинград блокадаһында ҡалғандарҙы һәм концлагерҙарҙың балиғ булмаған тотҡондарын бушлай йөрөтә башлаясаҡ. "Дөйөм алғанда, бөтәһе 1345 кеше. Һәр береһе айына дүрт тапҡыр Яндекс. Такси хеҙмәттәре менән бушлай файҙалана ала. Бер юл йөрөү хаҡы 250 һумдан артмаҫҡа тейеш", - тип һөйләне Ленара Иванова "Башинформ" агентлығына. Вице-премьер һүҙҙәренсә, таксиҙа йөрөүҙе алдан планлаштырырға кәрәк. Киләһе аҙнала Республика социаль хеҙмәтләндереү үҙәгенә бының өсөн махсус телефон номеры бүленә. Ветерандарға ошо номерға шылтыратып әйтеү генә талап ителә. Оператор был мәғлүмәтте Яндекс.Таксиға тапшыра.

## ӘЙҘӘ, ЭШҠЫУАРЛЫҠҠА!

**2020 йылда Башҡортостан Хөкүмәте ауыл биләмәләрендә бәләкәй эшҡыуарлыҡҡа дәүләт ярҙамы күләмен 1 миллиард һум кимәлендә һаҡлап ҡалырға планлаштыра, тип хәбәр иттеләр республика Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенән.**

"Милли проекттарҙы, грант программаларын һәм урындағы башланғыстарға ярҙам күрһәтеү программаһын тормошҡа ашырыу барышында ауылда бәләкәй эшҡыуарлыҡты үҫтереү өсөн беренсе тапҡыр 1 миллиард һум самаһы аҡса бүленде. Быйыл уларҙы финанслау элекке кимәлдә һаҡлана", - тип билдәләне Башҡортостан Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат секретары Алмаз Ғәлимов. Билдәләнеүенсә, дөйөм алғанда, 2019 йылда республикала 108 ауыл хужалығы ҡулланыусылар кооперативы, 129 фермер хужалығы ойошторолдо. Уларҙың ярҙамы менән ауылда 620 эш урыны булдырылды. Бынан тыш, республиканың 33 фермер хужалығы һәм кооперативы техникаһын яңыртты һәм ҡорамалдар һатып алды. "Башҡортостан 2018-2019 йылдарҙа ойошторолған ауыл хужалығы кооперативтары һаны буйынса төбәктәр рейтингында беренсе урынды биләй, - тине Алмаз Ғәлимов. - Ошо ваҡыт эсендә Рәсәйҙә булдырылған яңы кооперативтарҙың 16 проценты - Башҡортостан берләшмәләре".

## БАЛЫҠСЫ ҠУРҠМАЙМЫ?

**Быйыл ҡыш йылға-күлдәрҙә боҙҙоң ҡалынлығы хәүефле. Республиканың Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса дәүләт комитеты хеҙмәткәрҙәре шул хаҡта иҫкәртә һәм һыу яткылыктары буйлап рейдтарын дауам итә.**

Өфөлә Дуҫлыҡ монументы янындағы Ағиҙел йылғаһында ул 20 сантиметрға етә, ләкин йылға уртаһында ни бары 8 сантиметр. Боҙҙоң ҡалынлығы 10 сантиметрҙан кәм булмаған осраҡта ғына кеше өсөн хәүефһеҙ һанала. Ҡоткарыусылар һүҙҙәренсә, был балыҡсыларҙы ҡурҡытмай. Ныҡ тунмаған боҙҙан йөрөү өсөн берәҙ-бер хәүефһеҙ техника төрө - һауа мендәрендәге судно. Уның менән ҡыҫҡа ваҡыт эсендә ярҙамға мохтаждар янына барып етергә мөмкин. Бындай катерҙың максималь тиҙлеге - сәғәтенә 90 саҡрым. 2020 йылдың тәүге көндәрендә һыу яткылыктарында фажиғәләр теркәлмәгән.

## Б А Ш   Ҡ А Л А   Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓10 ғинуарҙа "Ауыл уҡытыусыһы" программаһының конкурс һайлап алыуында ҡатнашыу өсөн ғаризалар ҡабул итеү башланды. Ғаризаларҙы федераль программаның рәсми сәхифәһендә ҡалдырырға мөмкин. Ғаризаларҙы 2020 йылдың 10 ғинуарынан 15 апреленә тиклем ебәрергә кәрәк, тип хәбәр итә республика Мәғариф министрлығының матбуғат хеҙмәте.

✓1-2 февралдә Мостай Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры Мәскәүҙә "Модерн" драма театрында гастролдәр менән сығыш яһай. 1 февралдә киске сәғәт 6-ла - Мөхәмәтша Буранғоловтың "Башҡорт туйы" романтик драмаһы. 2 февралдә киске 6-ла Йәштәр театры коллективы Мостай Кәримдең "Беҙҙең өйҙең йәме" һәм "Өс таған" повестары буйынса спектакль күрһәтә.

✓Йәштәр эштәре буйынса федераль агентлыҡ һәм Федераль дәүләт статистика хеҙмәте тәүге тапҡыр 20 меңгә яҡын ирекмәндең 2020 йылда халыҡ иҫәбен алыуҙа ҡатнашыуын күҙ унында тотҡан килешеүгә ҡул ҡуйҙы. Ирекмәндәр халыҡҡа мәғлүмәт-аңлатыу эшендә, шулай уҡ яҙып алыусылар сифатында мәғлүмәттәр йыйыуҙа ҡатнаша. Ирекмәндәрҙе ирекмәнлекте үҫтереү буйынса төбәк үҙәктәре менән берлектә Федераль дәүләт статистика хеҙмәте һайлай һәм уҡыта.

✓Башҡортостан 2019 йылда шифахана-курорт ялы өсөн популяр биш төбәк иҫәбенә ингән. Рейтингты Санатории-России.рф сервисы белгестәре төҙөгән. Рейтинг авторҙары билдәләүенсә, һуңғы йылда республикала ялдың ошо төрөнә һорау 4 процентҡа артҡан. Беренсе урынды Краснодар крайы алған. Артабан Ставрополь, Ҡырым, Мәскәү өлкәһе, Башҡортостан, Алтай крайы, Һамар, Ленинград, Ярославль һәм Тула өлкәләре килә.

✓2020 йылдың 11 ғинуарынан 25 февраленә тиклем Өфөлә "Етегән-2020" асыҡ республика конкурсы уҙғарыла. Ул "Етегән" республика башҡорт байрамы - 1 мартта билдәләнгән ғаилә, мөхәббәт һәм тоғролоҡ көнө алдынан ойоштороla. Ҡатнашыусының ғаризаһы (ғариза формаһы - 1-се ҡушымта) менән конкурс материалдарын 25 февралгә тиклем etegan_2020@mail.ru электрон адресына ебәрергә кәрәк.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# БАЛАЛАР ҒЫНА ТҮГЕЛ...

## атай-әсәйҙәр ҙә күңелле ял иткән!

**Ҡала хакимиәтендә үткән сираттағы оператив кәңәшмә, нигеҙҙә, оҙайлы ҡышҡы каникулдарҙа балаларҙың ялына бағышланды, тиһәк тә хата булмаҫ, сөнки, белеүебеҙсә, уҡыусыларға өйгә эш бирелмәне һәм уларҙың ялын нисек тә файҙалы һәм күңелле итеп ойоштороу бурысы мәғариф учреждениелары хеҙмәткәрҙәренең генә түгел, ведомство-ара хеҙмәттәрҙең төп бурысына әүерелде.**



Баш ҡалала балаларҙың ижади һәм рухи-әхлаҡи үсешенә булышлыҡ иткән төрлө йүнәлештәге саралар үткән һәм уларҙа 67 меңдән ашыу бала, атай-әсәй ҡатнашҡан. Бигерәк тә 3-6 ғинуарҙа беренсе тапҡыр ойошторолған "Яңы йыл ғаилә уйындары - 2020" республика фестивале ҙур иғтибарға лайыҡ булған. Төрлө спорт уйындарын үҙ эсенә алған был ярышта 23 440 кеше ҡатнашыуы теркәлгән. Һәр район буйынса еңеү яулаусылар 18 ғинуарҙа үтәсәк республика фестивалендә ҡатнашыу хоҡуғын алған. Бынан тыш, төрлө башҡа спорт саралары, квестар, конкурстар, экскурсиялар, практик күнекмәләр ойошторолған, балалар һауыҡтырыу лагерҙарында һәм шифаханаларҙа ял иткән, Башҡортостан һәм Силәбе өлкәһенә походтарға, экскурсияларға барған. Иғтибарҙан "социаль хәүеф" төркөмөндәге балалар ҙа ситтә ҡалмаған, улар өсөн дә төрлө түңәрәктәр, секциялар ишеге һәр саҡ асыҡ булған.

Тағы ла шатлыҡлы ваҡиғаларҙан - Калинин районының Максимовка ҡасабаһында яңы "Мин үҫәм" 155-се балалар баҡсаһы асылған. Мәктәпкәсә балалар учреждениеһы заманса технологиялар буйынса төҙөлгән. Уға былтыр ғинуарҙа нигеҙ һалһалар, бер йылдан һуң ул балаларҙы ҡабул итергә әҙер ҙә булған. Хәҙер был матур баҡсаға 200 бала йөрөйәсәк. Бөгөнгә барлыҡ һигеҙ төркөм дә тулы. Балалар баҡсаһы мөдире Ландыш Алетдинова белдереүенсә, барлыҡ төркөмдәр ҙә рус халыҡ әкиәттәре исеме менән аталған, күрәһең, башҡорт халыҡ әкиәттәре араһында лайыҡлыһы табылмағандыр...

Яҡын киләсәктә тағы ла өс балалар баҡсаһы ишектәрен асасаҡ. Ләкин ҡала хакимиәте башлығы Өлфәт Мостафин белдереүенсә, ихтыяжды тулыһынса ҡәнәғәтләндереү өсөн барлығы 45 самаһы мәктәп һәм 38 балалар баҡсаһы төҙөргә кәрәк, шуға күрә алдағы йылдарҙа йыл һайын 5 мәктәп һәм 5-7 балалар баҡсаһын сафҡа индереү күҙаллана.

Яңы йыл кәйефе иҫкесә яңы йылға тиклем һуҙыла, сөнки балаларҙың каникулы ла ошоғаса дауам итә. Шуға ла 11 ғинуарҙа баш ҡалала тағы ла бер шыршы байрамы - Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрында "Аксаков шыршыһы - 2020" хәйриә сараһы үтеүе лә осраҡлы түгел. Был байрамға ауыр ғаилә шарттарында ҡалған, хәрби хәрәкәттәр ветерандары һәм башҡа 288 бала саҡырыла. Сарала республика, Өфө етәкселеге менән бер рәттән, "Донъяның балалар докторы", Милли медицина палатаһы президенты профессор Леонид Рошалдең ҡатнашыуы оло мәртәбә була. Балалар был көндө ысын әкиәт донъяһына сума һәм меценаттар әҙерләгән бүләктәрҙе, татлы тәмлекәстәрҙе алып ҡыуана.

Әммә сараларҙың күплеге менән бер рәттән, уны ойоштороусылар һәм үткәреүселәр өсөн тәү сираттағы бурыс булып балаларҙың хәүефһеҙлеге тора. Бының өсөн декабрҙә үк төрлө иҫкәртеү саралары үткәрелһә лә, каникулдар тамамланғансы махсус ойошмалар һәр саҡ поста һәм юғары әҙерлек режимында эшләй. Халыҡ иң күп йөрөгән 14 боҙ ҡаласығында 11 декабрҙән башлап дежурлыҡ ойошторола, бынан тыш, 15 ҡаласыҡта 55 видеокамера ярҙамында видеокүҙәтеү булдырыла. Махсус хеҙмәттәр көн һайын боҙ фигураларын һәм боҙ ҡаласығы территорияһы торошон тикшереп тора, етешһеҙлектәр күҙгә салыныу менән улар бөтөрөлә йәки объектты ҡулланыу тыйыла. Һәҙәмтәлә ял итеү һәм һырғалаҡтарҙан, тауҙарҙан шыуыу урындарында йәрәхәт алыу күренештәре кәмей. Үкенескә күрә, "Трамплин" туҡталышында рөхсәт ителмәгән урында тауҙан шыуғанда 1955 йылғы ир һәләк була.

Республика етәкселеге индергән алкоголһеҙ "коро көндәр" һөҙөмтәһендә янғын осраҡтары ла, унда һәләк булыусылар һаны ла кәмегән һәм бындай ыңғай күренеш ҡала буйынса ғына түгел, тотош республикала күҙәтелә.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

ИШЕТТЕГЕҘМЕ ӘЛЕ?

## ГРАНТ КЕМГӘ?

**Рәсәйҙең Ауыл хужалығы министрлығы ғаилә малсылыҡ фермаларына грант биреү шарттарын үҙгәртте. 2020 йылдан улар үҫемлекселек проекттарына грант алыу һәм ике йыл дауамында (элекке кеүек грантты алған йылда түгел) эш урындары булдырыу хоҡуғына эйә.**

Шулай уҡ ғаилә фермалары грант аҡсаһын льготалы инвестиция кредитының бер өлөшөн түләү өсөн файҙалана ала. Ошо механизмды индереү өсөн Ауыл хужалығы министрлығы банктар һәм тармаҡ ойошмалары менән бергә фермер хужалыҡтарын һәм кооперативтарын үҫтереүҙең типовой проекттарын әҙерләй, тип хәбәр иттеләр республика ведомствоһынан. Ғаилә малсылыҡ фермаларына дәүләт ярҙамы өсөн федераль бюджет 2019 йылда 4,58 миллиард һум бүлде - 2018 йылға ҡарағанда 2 процентҡа күберәк. Башҡортостандың Ауыл хужалығы министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, былтыр грант конкурсында 26 ғаилә малсылыҡ фермаһы еңеү яулаған. Дәүләт ярҙамының дөйөм суммаһы 219 миллион һум тәшкил иткән. 2019 йылда республикаға бүленгән гранттар күләме: яңы эш башлаған фермерҙарға - 56 миллион һум, ғаилә малсылыҡ фермаларына - 250,4 миллион, ауыл хужалығы ҡулланыусылар кооперативтарына - 100 миллион һум.

## БУРЫС ЙЫЙЫЛҺА...

**Дәүләт Думаһы өсөнсө уҡыуҙа Хеҙмәт кодексына төҙәтмәләр ҡабул итте, уларға ярашлы, хеҙмәт инспекторҙары эш биреүселәрҙән хеҙмәт хаҡы буйынса бурысты суд ҡарарынан тыш түләтеү хоҡуғын алды.**

Әгәр хеҙмәт инспекторының иҫәпләнгән эш хаҡын түләү тураһында бойороғо ваҡытында үтәлмәһә, ул башҡарыусы документ бирергә хоҡуҡлы. Ул саҡта хеҙмәткәр түгел, ә эш биреүсе судта үҙенең хаҡлы булыуын иҫбатларға тейеш. Инспекторҙың ҡарарына ялыу яҙыу өсөн 10 көн бирелә. Ҡарарға ялыу бирелмәгән һәм ул үтәлмәгән осраҡта, хеҙмәт инспекторы уны суд ҡарарын үтәүселәргә тапшыра һәм эш биреүсенең иҫәбенән аҡса мәжбүри рәүештә алына. Элек хеҙмәт инспекторҙарының эш биреүселәрҙә хеҙмәткәрҙәр алдындағы бурысты түләргә тигән бойороҡ ҡына бирергә хоҡуғы булды. Әгәр компания талаптарҙы үтәмәһә, хеҙмәткәргә судҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк ине. Дәүләт Думаһы рәйесе Вячеслав Володин "компанияларҙың күпселеге, судҡа һәм дәүләт пошлиналары түләүгә өҫтәмә аҡса түккәнсе, хеҙмәткәрҙәр менән шунда уҡ иҫәпләшеүгә һәм хеҙмәт инспекцияһының бойороғон үтәүгә өҫтөнлөк бирер" тип билдәләне.

## ЯҢЫСА КРЕДИТ

**2019 йылдың көҙөнән бөтә банктар һәм микрофинанс ойошмалары кредитты яңы ҡағыҙәләр буйынса бирә башланы.**

Хәҙер кешенең килеменән тыш, "бурыс йөкләмәһе күрһәткесе" - уның дөйөм килемендә барлыҡ кредиттары (шул иҫәптән ул дәүгә иткән) буйынса түләүҙәр өлөшө иҫәпкә алына. Әгәр килемдең яртыһынан ашыуы кредит һәм займ түләүгә китә икән, бурыс йөкләмәһе күрһәткесе юғары тип һанала. Был хәүефле, сөнки аҙ ғына финанс ауырлыҡтары килеп тыуһа, кешенен, түләй алмайынса, бурыс һаҙлығына батыуы ихтимал. Рәсәй банкы республика бүлексәһенең матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, йыл башынан банктар Башҡортостанда йәшәүселәргә 258,6 миллиард һумлыҡ кредит биргән. Был уҙған йылдың ошо осорона ҡарағанда 14 процентҡа күберәк. Тағы 463,8 миллиарды - элекке йылдарҙан ҡалған бурыс. Шул сумманың яртыһынан ашыуы - ҡулланыусылар кредиты. Аналитиктар билдәләүенсә, ваҡытында түләмәүселәр өлөшө кәмей. Йәғни халыҡ бурысҡа аҡса алыр алдынан ныҡлап уйлай башлаған.

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Ашҡаҙан аҫты биҙе

❖ Ашҡаҙан аҫты биҙе күҙәнәктәрен яңыртыу өсөн 14 көн дауамында һәр иртә ашарҙан ярты сәғәт алда 15 бөртөк финикты һыуға ҡушып ашарға кәрәк. Ашҡаҙан аҫты биҙе, бауыр һәм бөйөрҙө дауалағанда бер балғалаҡ киптерелгән юл япрағын 1 стакан ҡайнар һыуҙа бешереп, сәй эсеү ҙә ярҙам итә.

### Быуындар һыҙлағанда

❖ Ике ҡалаҡ киптерелгән әремде термосҡа һалып, бер стакан ҡайнар һыу өҫтәп, 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. Салфетканы ошо төнәтмәгә тығып сылатып, төнгөләккә быуындарға боҫлама ҡуйырға кәрәк. Был рәүешле һыҙланыу бөткәнсе дауаланырға.

❖ Быуындар һыҙлағанда йәш әрем үләнен дә дауаланыуҙа ҡулланырға була. Бының өсөн ҡалаҡ ярым үләнгә бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 1 сәғәт төнәтергә. Эҫе, бешекләнгән үләнде сепрәк муҡсаға тултырып, балауыҙланған ҡағыҙға төрөп, һыҙлаған быуынға баҫып, киҙе-мамыҡ яулыҡ менән бәйләп ҡуйырға. Был боҫламаны кистән эшләп, иртәнсәккә тиклем ҡалдырғанда нәтижәле була. Әрем урынына ҡомалаҡ йә йәш ҡайын япрағын ҡулланырға була.

### Колит

❖ Колиттан дауаланғанда 1 стакан ҡайнар һыуға берәр балғалаҡ шалфей, ромашка һәм һарығүҙ һалып бешереп, бер сәғәт төнәтеп, һөҙөргә. Төнәтмәне ашарҙан ярты сәғәт алда көнөнә 4 тапҡыр берәр ҡалаҡлап эсергә. Ауырыуҙың дөйөм хәле яҡшырыу менән бергә дауаны ҡулланыу арауығын оҙайтыу кәрәк.

### Бабасырҙан

❖ Уртаса ҙурлыҡтағы 2 алманы ваҡ ҡырғыстан үткәреп, уға ярты стакан ваҡланған ҡабаҡ орлоғо һәм 1 ҡалаҡ бал ҡушып болғарға. Бер сәғәт дауамында балғалаҡлап ашарға, яҡшы сәйнәп йоторға. 2 сәғәттән берәй эс йомшартҡыс дарыу эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!



# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

**Бер үк типтағы кейеҙ әйберҙәр араһынан Белорет районы Арышпар ауылында 1977 йылда фотоға төшөрөп алынған көләштең туй атына ябылған сергетышты айырып күрһәтергә була.**

Уны традицион ҡуш элмә техникаһында тығыҙ урынлаштырып ҡайылған орнаменттарҙан торған киң буй таҫмалар биҙәкләгән. Сергетыштың ике яҡ ситендәге биҙәк һыҙаттары туй тартҡыларын хәтерләтеп торған: ялғанған таҫмалар ҡара төҫө һәм ҡатмарлы биҙәге менән айырылған. Ҡайылған бер биҙәк тә ҡабатланып килмәгән. Ҡушып тегелгән һыҙаттың беренендә урталағы үҙәктән бер тигеҙ аралыҡта урынлаштырып һуҙылған фигуралар килгән; биҙәк үремдәрҙе (гирлянда) хәтерләткән. Композиция ҡыя шаҡмаҡ формаһындағы япраҡ-сулпылы ярым түңәрәк - ҡытай биҙәк (муйынсаҡ рәүешендә ҡайылған биҙәк) менән тамамланған. Сергетыштың икенсе ситендәге айырымланып торған орнаменттар араһында көкерсәкле әүернәләр өҫтөнлөк иткән; биҙәкле һыҙатты өс түңәрәк сулпылы, секторҙарға бүленгән түңәрәк рәүешендәге ҡояш йәнләндереп ебәргән.



*Ҡатын-ҡыҙҙың туй сергетышы (БР, Белорет районы, Арышпар ауылы). М.Г. Муллағолова. 1977*

Бик һирәк осраған ҡуш элмә техникаһына һәм килеп сығышы менән малсылыҡҡа бәйле әйберҙәр йыйылмаһына ҡараған көньяҡ-көнсығыштың ҡусҡарлы ҡайыуы ысын мәғәнәһендә уникаль күренеш. XIX-XX быуатта Башҡортостанда был оҫталыҡ сағыштырмаса ҙур булмаған территорияла үҫешә: Әбйәлил, Белорет районында һәм Учалы районының көньяғында. Үрҙә тасуирланған ҡайыу традициялары тәү сиратта тамъян, күбәләк ырыуы башҡорттарына һәм тау ҡатайҙарының көнсығыш төркөмдәренә хас булған. Өфө, Санкт-Петербург, Будапешт һәм башҡа ҡалаларҙың музейҙарында Абҙаҡ, Айыс, Аҙналы, Арышпар, Байым, Буранғол, Ташбулат, Тупаҡ, Рәхмәт, Үтәгән, Ярлыҡап, Шығай, Сәрмән, Усманғәле, Инйәр ауылдарынан алынған әйберҙәр бар. Тамъяндар йәшәгән ерҙә Ҡусҡар атамалы бер нисә ауыл булыуы ла юҡтан түгел (был антропоним булған хәлдә лә).



*Белорет районы ауылдарындағы матур итеп биҙәлгән тушкәтәр һәм балаҫтар (Аҙналы, Шығай). Автор фотоһы. 1976*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ИЛ-ЙӨРТ ХӘБӘРЕ

**Ауыл мәктәбенең бер быуатлыҡ юбилейына ҡайтҡанымда сараға килгән ауылдаштарым тегеләй ҙә тартҡыланы, былай ҙа. Һәр беренеһенең һорауы, хәстәре йыйылған. Бер ир-уҙаманының: "Әйле, һинә һөйләй торған хәбәрҙәр күбәйеп киткән, биш кенә минут ваҡытыңды бүл инде", - тигәс, күҙ ҡарашынан хәбәренең етди икәнен аңлап, ситкәрәк китеп, уға иғтибарымды йүнәлтәм.**

# МАЛДЫ ҮҪТЕРӘҺЕҢ ДӘ УЛ...



- "Киске Өфө"лә һинең йәрминкәләр тураһында яҙғаныңды уҡып (гәзиттең былтырғы 49-сы һаны), шул турала бәйән итмәксе инем. Эйе, һүҙ ҙә юҡ, ҡағыҙҙа, закондарҙа, башҡа хоҡуҡи акттарҙа барыһы ла матур итеп яҙыла, ә ғәмәлдә иһә хәлдәр бөтөнләй икенсе төрлө. Мәҫәлән, әлеге ваҡытта Лағыр ауыл советында мал һаны былтырғы ошо осорға ҡарағанда 100 башҡа кәмеһә лә, башҡа ауылдар менән сағыштырғанда, шөкөр, күп. Әле бына Нәсибашта тотош ауылға бер көтөү генә ҡалһа, беҙҙә малдар ялан тултырып йөрөй. Әммә ул малды тотоуҙың бер файҙаһы ла юҡ, сөнки уны һатып булмай. Йәрминкә көндәрендә Малаяҙға барһаҡ, унда күрше-тирә райондар сауҙагәрҙәре урынлаштырып алып бөткән була, үҙебеҙҙең районды электән сауҙа менән шөғөлләнеүселәренен дә үҙ урыны бар, әммә улар кеүек даими сауҙагәрлек, алыпһатарлыҡ, халыҡтан итен-майын йыйып һатып өйрәнмәгән ябай халыҡ үҙ тауарын үҙе алып барып һата алмай. "Янғантау" шифаханаһы тип бар донъяға маҡтанабыҙ, унда иһә ябай халыҡтан итте бөтөнләй алмайҙар. Шуға, эре мал итенең килоһын 220-250 менән һатырға мәжбүр булаһың.

Күрше тирә-яҡ районлар беҙгә килгәс, беҙ уларға барайыҡ әле тип барһаҡ, уларҙа беҙҙе баҙарға яҡын да ебәрмәйҙәр: район башлыҡтары "тәүҙә үҙебеҙҙең район халҡы етештергән тауарын һата, һуңынан ғына башҡалар", тип, ҡәтғи итеп әйтеп ҡуйған, тиҙәр. Башҡалар шулай үҙ район халҡын, үҙ етештереүсеһен хәстәрләгәндә, беҙҙә лә шулай эшләп булмаймы икән? - тип бер тынала теҙҙе ауылдашым.

Эйе, был проблема бер бөгөн генә килеп тыумаған һәм ул, моғайын да, бер генә районға хас түгелдер. Сөнки һуғым мәле етһә, туғандары, ата-әсәләре ауылда йәшәүселәр барыһы ла шундай аһ-зар ишетә. Өфөгә килгәс тә шул турала һүҙ ҡуҙғатҡас, таныштарымдың береһе: "Һеҙлем йәш ярымлыҡ ҙур үгеҙен 22 меңгә генә тоттороп ебәрҙе. Шулайтмаһаң, уны һуйып та нисек итеп һатаһың. Алыусыһы барҙа тип һатып ҡалырға тырышалар", - тине. Көньяҡ райондарҙа Татарстандан килеп, быҙауҙар, ҡышлауҙар йыйып алып китеүҙәре тураһындағы хәбәрҙәр бер бөгөн генә ишетелмәй инде. Осоҙға алып китәләр ҙә, һимертеп, ҙур хаҡҡа һата ундай алыпһатарҙар. Ә бахыр ауыл кешеһе һатып алыусыһы булғанға ҡыуанып ҡала инде, нишләһен.

Ахырҙа, совет заманын яманлаһаҡ та, шул ваҡыттағы күренештәр һағындырып иҫкә төшә: колхоз-совхоздар гөрләп торған ваҡытта хатта Министрҙар Кабинетынан, төрлө министрлыҡтарҙан ауылға килеп итен-майын, балын, картуфын, кәбеҫтәһен һатып алып китә торғайнылар. Әҙерләүҙәр конторалары гөрләп эшләй, шәхси хужалыҡтарҙан үҙҙәре йөрөп йыйып ала ине. Халыҡ та, хужалыҡтар ҙа артып ҡалған продукцияһын ҡайҙа илтергә, нишләтергә тип баш ватманы, әммә мал, баҡса тотоуҙың күләме генә сикле ине. Хәҙер иһә, киреһенсә, мал тотоуға, баҡса үҫтереүгә ирек бирелдә, әммә продукцияңды ҡайҙа илтеү, унан үҙеңә нисек файҙа алыу проблемаһы хәл ителмәнә, был мәсьәлә ауыл халҡының баш ауырыуына әйләндә. Ауылдарҙа йылына 100-әр баш мал кәмей икән, тиҙҙән, ирекһеҙҙән, ҡыҫҡа ваҡытта ғына мал һимертеүгә ҡулайлашҡан хужалыҡтарҙың продукцияһына көнөбөҙ ҡалмаҫмы? Әллә, һүҙҙә генә түгел, ғәмәлдә ауыл кешеһенә, ауыл хужалығына йөҙ борормо хөкүмәт?..

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

ШӘХЕСТӘРЕБЕҘ

# ҒАЛИМДАР ҠАТАРЫНА ИНГӘН ЯҠШЫ...



**Фәнни яҡтан нигеҙләнмәгән бер нәмә лә бөгөн дөрөҫлөккә дәғүә итә алмай, ни бары фараз булып ҡала. Шуға ла, хатта көн кеүек асыҡ булған фактты ла донъя кимәлендә таныһындар, кешеләр белһен һәм уға ышанһын өсөн ғалимдар тарафынан раҫланыуы шарт. Был айырыуса халыҡтарҙың тел, әҙәбиәт, тарих, мәҙәниәт өлкәләре үҫешенә ҡағыла.**

Ошо хәҡиҡәтте яҡшы аңлаған һәм башҡорт халҡының был донъяла йәшәүен фән ягынан нигеҙләп, һис бер шикkә урын ҡалдырмаҫҡа ашыҡҡан ғалимдарыбыҙ бихисап. Уларҙың һәр кеме үҙ урынында, үҙ өлкәһендә баһалап бөткөһөҙ әһәмиәткә эйә хеҙмәттәр яҙа. Шундай шәхестәребеҙҙең береһе, туған телебеҙҙең бөгөнгөһөн үткәнен бәйләүсе күренекле төркиәтсе, филология фәндәре докторы, Башҡорт дәүләт университеты профессоры Эрнст Ишбирҙин. Баймаҡ районында ишле ғаиләлә тыуып үҫкән Эрнст Фәйзрахман улының хеҙмәт юлы, тормошо, ғилми ҡаҙаныштары бөтә быуын кешеләре өсөн дә үрнәк булырҙай тарих. Тәү сиратта Эрнст Ишбирҙин башҡорт тел ғилменең бер өлкәһе менән генә шөғөлләнмәй, телде боронғо һәм хәҙерге кимәлендә тикшереүгә тос өлөш индерә. Ғалим боронғо төрки телен яҡшы белә һәм уның буйынса ла бик күп хеҙмәттәр яҙа, төрлө дәреслектәр, энциклопедиялар төҙөүҙә лә ҡатнаша, йәштәргә үҙ белемен тапшыра. Ә инде профессиональ кимәлдәге рәссам булыуы уға "Башҡортостан ҡоштары" тигән үҙенсәлекле хеҙмәтендә ҡош атамаларына башҡортса-русса белешмәнән тыш, рәсемдәрен дә төшөрөү мөмкинлеге бирә. Был турала ғалимдың энеһе, биология фәндәре докторы, БДУ профессоры Айрат Ишбирҙин былай ти: "Был уның яратҡан китабы ине һәм өс йөҙгә яҡын ҡошто ул иҫ киткес дөрөҫ итеп һүрәткә төшөрөүгә өлгәште. Һуңғы йылдарҙа "Башҡортостан бәшмәктәре" китабын төҙөгәйне, ләкин ул донъя күреп өлгөрмәне".

Бар ғүмерен фәнгә бағышлаған, үтә тыйнаҡ, һәр нәмәлә алтын урталыҡты һаҡлай белгән шәхес, тип белә Эрнст Ишбирҙинде замандаштары. Был турала уның тыуыуына 85 йыл тулыуға арналған халыҡ-ара фәнни-ғәмәли конференцияла Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы, шәрҡиәт һәм журналистика факультеты уҡытыусылары, Өфө ғилми үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ғилми хеҙмәткәрҙәре, ғалимдың яҡын туғандары ла телгә алды.

- Эрнст Фәйзрахман улының тура һүҙлелеген, ғилмиәт өлкәһендә әйткән фекерҙәрен, асыштарын шул тиклем юҡһынабыҙ, - ти факультеттың деканы Гөлфирә Абдуллина. - Уның кимәлендәге ғалимдар беҙгә ысын мәғәнәһендә етешмәй. Сөнки һуңғы йылдарҙа башҡорт тел ғилеме өлкәһендә кадрҙарға ҡытлыҡ күҙәтелә. Шуға, Эрнст Фәйзрахман улының уҡыусылары араһында уның юлын дауам итеүселәр булһын ине, тигән теләктә ойошторабыҙ бындай фәнни-ғәмәли конференцияны. Башҡорт теленең яҙмышы үҙебеҙҙең ҡулда, кемдер ситтән килеп был эштә ярҙам итмәҫ. Әле арабыҙҙа булған оло быуын ғалимдарының тәжрибәһен, аҡыллы фекерҙәрен аңыбыҙға һеңдереп ҡалырға өлгәрәйек һәм башҡорт тел ғилемен үҫтерәйек!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Башҡорт тел ғилеменең үҫешен хәстәрләү - халҡыбыҙҙың киләсәген ҡайғыртыу менән бер. Аҡмулла ла ваҡытында юҡҡа ғына "Хәл килһә, төрлө фәнде күргән яҡшы, Ғалимдар ҡатарына кергән яҡшы" тип иҫәпләмәгән. Бөгөн ғалим булып һаналыр өсөн генә түгел, ә заман мөмкинлектәрен файҙаланып туған телебеҙҙе фән кимәлендә өйрәнеүҙе маҡсат итеп ҡуйып, атаҡлы телсе-ғалимдарыбыҙ юлын дауам итеү зарур.**

**Камилә ҒӘЛИЕВА.**

✓ *Ғәйнә башҡорттары XVI быуаттың икенсе яртыһынан бирле Строганов кеүек рус промышленниктарының үҙҙәренең аҫаба ерҙәрен хаҡһыҙ баҫып алыуына ҡаршы көрәшкә ҡушыла.*



ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# БЕҘ ҮҘЕБЕҘ ҒӘЙНӘЛӘР!




Ғәйнә йорто территорияһы һәм уның сиктәре хаҡында ла Хөббихужа Түмәсев шәжәрәһендә мәғлүмәт бар. Унда ошолар теркәлгән: "Инсан бей Атчарға яҡын Кама үрендә йәшәгән. Уның улдары, аҡрынлап күсә барып, Тол йылғаһына, ә һуңынан Ағиҙел тамағына тиклем барып еткән. Иҙелдең ике ярын да үҙ милке иткән". Бында Иҙел исеме аҫтында Чулман-Иҙел, йәғни Кама йылғаһы, ә Очер йылғаһы Атчар, тип иҫкә алына.

Ғәйнәләрҙең үҙҙәренең тархандар тоҡомонан булыуы хаҡындағы мәғлүмәт уларҙың ата-бабаларының үҙ заманында Ҡаҙан хандарына хеҙмәт итеүе менән бәйле. Хәрби хеҙмәттәре өсөн уларға тарханлыҡ исеме бирелгән, ә был шулай уҡ хан ҡулы аҫтында булған территориянан ер биләмәһе алыу хоҡуғын да биргән. Был ер биләмәләре, башлыса, Ыҡ йылғаһы үҙәненә ҡараған ерҙәрҙән бирелгән. Уҫы даруғаһынан Ыҡ буйында Ирәкте һәм Ғәйнә олоҫтары булыуы хаҡында документаль сығанаҡтар бар.

Ғәйнә ырыуы башҡорттарының ҙур ғына бер төркөмөнөң төньяҡтағы Пермь крайы ерҙәренән аҡрынлап көньяҡҡа табан күсә барыуы хаҡында ла авторы билдәле булмаған бер документ бар, ул "Историческая записка о местности прежней Уфимской провинции, где был центр древней Башкирии", тип атала. Был документта ошондай юлдар бар: "...Пермь ерҙәре (Чердынь һәм Соликамский өйәҙҙәре) тип йөрөтөлгән ерҙәрҙе биләүселәр, төньяҡтан көньяҡҡа табан хәрәкәт итеп, Өфө башҡорттары биләмәләре сиктәренә яҡынайғандан-яҡыная барҙылар. Үҙҙәренә алған яңы ыҙандарға, күбеһенсә үҙҙәре урынына ҡасып килгән кешеләрҙе яҙҙыртып, төньяҡтағы Соликамский, Чердынь һәм Себер өйәҙҙәрендәге атамаларҙы ҡуштылар". Ошо документта Ғәйнә ырыуы башҡорттарының ҡасандыр Дим үҙәненә тиклем килеп етеүе бәйән ителә. Ил-күл-мең башҡорттары ерҙәрендә, хәҙерге Әлшәй һәм Миәкә райондарындағы ғәйнә ауылдары Ғәйниямаҡ, Тауҡай-Ғәйнә, Мәүлекәй-Ғәйнә ошо замандарҙа барлыҡҡа килгән. Соликамский өйәҙендә йәшәүсе башҡорттарҙың Өфө өйәҙенең Ғәйнә олоҫондағы ерҙәргә дәғүә итеүе хаҡындағы документ административ бүленеш арҡаһында ғәйнә ырыуының аҫаба ерҙәренең төрлө өйәҙҙәр составына инеп китеүен раҫлай.

1552 йылда Ҡаҙан ханлығы Иван Грозный тарафынан тар-мар ителгәндән һуң ғәйнә ырыуы башҡорттары ла Мәскәү батшаһын үҙ хакимы итеп танырға мәжбүр була. Быға тиклем улар нуғай хандарына яһаҡ түләп торған була. Ғәйнә шәжәрәһендә ошо хаҡта былай әйтелә: "Ураҡ бай Нуғай ханға буйһоноуҙан баш тартты, быға Нуғай хан начальниктарының яһаҡ йыйғандарында ҡатын-ҡыҙҙарҙы мәсхәрәләүе сәбәп булды. Ураҡ бай ҡыш көнө саңғы менән Иҙел буйлап үргә табан Чердынға, падишах Иван Васильевичҡа китте". Бында һүҙ Үрге һәм Түбән Мул йылғалары буйындағы ауылдарҙа көн иткән мулғәйнә башҡорттары хаҡында бара. Ураҡ бей Мәмәтҡоловтың тыуған йорто Үрге Мул йылғаһы буйындағы Ҡуян (Тасим) ауылы булһа, Түбән Мул буйындағы Ҡултай ауылы Ураҡ бейҙең энеһе Һөйөндөк бей нәҫеле Ҡултай исеме менән аталған. Байтаҡ ваҡыттарҙан һуң, 1632 йылда Ҡултай улы Шигир батша Михаил Федоровичтан үҙҙәренең аҫаба ерҙәренә оберегательный грамота алыуға өлгәшә: "Бил нам челом Уфимского уезда Гайнинской волости башкирец Шигирко Култаев" на приказчиков Строгановых, "а сказали вотчины за ними башкирцы старинные в Уфимском уезде речка Мулин, да речка Юг, да речка Нытва, да речка Отчер со всеми угодьями...".

Ғәйнә башҡорттары XVI быуаттың икенсе яртыһынан бирле Строганов кеүек рус промышленниктарының үҙҙәренең аҫаба ерҙәрен хаҡһыҙ баҫып алыуына, урындағы батша хакимиәтенең баш-баштаҡлығына һәм ҡыҫымына ҡаршы көрәшкә ҡушыла. Башҡорт ихтилалдарында ғәйнә ырыуы башҡорттары ла әүҙем ҡатнаша, улар араһынан сыҡҡан байтаҡ ҡына күренекле шәхестәрҙе билдәләп үтергә була.

Ғәйнәләрҙең крайҙың башҡа бер халыҡтары менән 1572 йылда баш күтәреүе хаҡында "Пермская летопись с 1263-1881гг. Второй период с 1613-1645 гг." тигән документта ошолай әйтелә: "... приходили наши изменники черемиса на Каму сорок человек, да с ними де остяки и башкирцы и буинцы войною, и побили де на Каме пермич, торговых людей и натащиков восемдесять семь человек".

Ғәйнә башҡорттары 1581 йылда манси кенәзе Кихеку ("князь Пелымский") бунтына ҡушылып, Строгановтарҙың Кама буйындағы биләмәләрен тар-мар итеүҙә, Соликамский ҡәлғәһен алыуҙа һәм яндырыуҙа ҡатнаша. Улар 1662-1664 йылдарҙа, Күсем хан бүләһе Көсөк (Кучюк) башҡорт ханы итеп иғлан ителгәс башланған Һары Мәргән етәкселегендәге ихтилалда ҙур роль уйнай. Өфө воеводаһы А.М. Волконский был хаҡта ошолай яҙа: "... башкирцы Таныпских волостей и Осинской дороги Гайнинских волостей, к ним же к айским башкирцам пристали, к Сютюку ж к Кучюку салтану поклонились, и приходили во многие места в Уфимской и в Казанской и Соликамской в уезды все вместе с Сибирской дорогою войною, многие села и деревни повоевали, людей побили, в полон поимали многих и к Сютюку отдали...". Баш күтәреүселәр Кунгур ҡалаһын баҫып алыуға өлгәшә.

Күп тә үтмәй, ғәйнәләр 1681-1684 йылдарҙағы Сәйет Йәғәфәр (Сайид Джафар) етәкселегендәге ихтилалда ҡатнаша. Сәбәбе бер - үҙ аҫаба ерҙәрен тартып алыуға ҡаршы сығыу.

XVIII быуат башында (1704-1711) Алдар батыр Иҫәкәев һәм халыҡ Солтан хажи тип исем биргән чингизид, Көсөк хан улы Морат етәкселегендә оҙайлы ихтилал башлана. Кама тарафтарында ғәйнә башҡорттары ошо ихтилалдың башында йөрөй. Ошо дәүергә ҡараған документтарҙың береһендә бына ниҙәр яҙыла: "... Осинской дороги башкирцы, мещеряки и черемиса и вотяки тысяча с три хотели притти в Кунгурский уезд разорять и под Кунгур. Они с башкирцы Сибирской дороги заодно... Будут воевать с двух сторон разными полками, а к бунту тех башкирцев возмутитель Сибирской дороги башкирец Менлигуза". Әйтергә кәрәк, ошо ихтилал һөҙөмтәһендә батша хакимиәтенең башҡорт ерҙәренә ҡарата барған экспансия сәйәсәте бер ни тиклем ваҡытҡа туҡталып ҡала.

Петр батша вафат булғандан һуң, XVIII быуаттың 30-сы йылдарында Рәсәйҙең Азия тарафтарына йүнәлтелгән сәйәсәте чиновник И.К. Кирилов экспедицияһын ойоштороу аша хәл ителергә тейеш була. Бында Рәсәйҙең Ҡаҙағстан менән сигендә Ырымбур ҡәлғәһен һалыу ҡарала. Был башҡорттарҙың 1735-1740 йылдарҙағы ҡанға батырылған, меңәрләгән ауылдары яндырылып юҡ ителгән оҙайлы ихтилалына сәбәп була. Ошо хаҡта рус тикшеренеүсеһе А.И. Добромыслов асылына тарихи хәҡиҡәт һалынған фекерен ҡағыҙға шул рәүешле төшөргән: "... башкиры во главе с Кильмяк-абызом ... пришли к заключению, что с постройкой города и крепости на устье Ори Башкирия постепенно будет окружена с восточной стороны и таким образом навсегда войдет в состав России, и, кроме того, не будет никакой возможности возвратить от киргиз те земли, которые они отняли у них...". Ысынлап та, был сәйәсәт ошо ихтилалды баҫтырыу менән ғәмәлгә ашырыла: Яйыҡ йылғаһы буйында ҡәлғәләр линияһы төҙөлөп, Башҡортостандың көнсығыш һәм көньяҡ тарафтарындағы ерҙәре ошо линия артында тороп ҡала, ә Яйыҡ аръяғындағы башҡорт биләмәләре ҡырғыҙ-ҡайсаҡ далаһы ерҙәре тип атала башлай.

**Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ әҙерләне.**
**(Дауамы. Башы 1-2-се һандарҙа).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Дивизияның тыуыуы

Ошо ҡыҙыу һәм үтә етди ситуацияла башҡарылған эштәр хаҡында 112-се атлы дивизияның буласаҡ 58-се гвардия кавалерия полкының (тәүҙә ул 1-се полк, тип йөрөтөлә) хәрби формулярына бына ниҙәр теркәлгән: "Полкка тәүге ғәскәриҙәр 1941 йылдың 4 декабрендә Бүздәк, Ҡандра, Күгәрсен районларынан килеп етте. Полк штабы Дим станцияһында урынлашҡан ине. 15 декабргә 1-се һәм 2-се эскадрондар тулыһынса комплектланды. Командалыҡ итеү һәм сәйәси состав фронттан һәм республика райондарынан килә торҙо. Полк менән командалыҡ итеүҙе Урал ХО-нан килгән капитан Манапов алды, ә был вазифаны ваҡытлыса башҡарған лейтенант Әминев 1-се эскадрон командиры итеп тәғәйенләнде. 2-се эскадрон командиры вазифаһына Баймаҡ районоһының элекке мөдире, запастан саҡырылған лейтенант Б.М. Мәмбәтҡолов тәғәйенләнде. 1-се һәм 2-се эскадрондар Дим станцияһынан ике саҡрым көньяҡ-көнбайыштараҡ булған 1 Май исемендәге совхозда урынлашҡайны. 1942 йылдың 1 ғинуарына Бalaново ауылында урынлашҡан 3-сө, 4-се эскадрондар һәм пулемет эскадроны комплектланып бөттө, ә 76-миллиметрлы орудиелар батареяһы Мармалево ауылында ине. 3 ғинуарҙа полкка 275-се номер бирелде. 1942 йылдың 20 ғинурында Халыҡ оборона комиссариаты күрһәтмәһе буйынса килгән майор Кусимов Т.Т полк командованиеһын үҙ өҫтөнә алды."

Дивизия комиссары итеп ВКП(б)-ның Баймаҡ райкомы секретары Мөбәрәк Йыһанша улы Назаров, дивизия штабы комиссары вазифаһына республиканың Осоавиахим комитеты рәйесе Дәүләт Шаһи улы Әритҡолов тәғәйенләнә. Башҡортостан комсомолы өлкә комитетының элекке беренсе секретары (1940 йылдың октябренән - Башҡортостандың Хеҙмәт резервтары идаралығы начальнигы) Абдуллин Әхмәт Ғатаулла улы дивизия политотделы начальнигы вазифаһына саҡырылһа, уның урынбаҫары итеп 1941 йылдың июленән декабрь айына тиклем 17-се запас уҡсылар бригадаһы (Алкино лагеры) политотделы инструкторы, батальон комиссары Ҡадиров Сабир Рәхим улы ҡуйыла. Шул уҡ бригадала уҡыу батальоны комиссары булып хеҙмәт иткән Әлибаев Сәғит Рәхмәт улы 112-се атлы дивизияның полк комиссары вазифаһына күсерелә (ул 1937-1938 йылдарҙа БАССР-ҙың мәғариф халыҡ комиссары булып эшләгән). Артабан шул героик һәм дәһшәтле дәүерҙең һулышын үҙе кисергән башҡорт яугиры, хәрби-сәйәси хеҙмәткәр вазифаһында һуғыш юлдарын үтеп ҡайтҡан арҙаҡлы милләттәшебеҙҙең "Көндәлек биттәренән (комиссар яҙмалары)" исемле хәтирәләр китабынан алынған мәғлүмәттәрҙе ошо тарихи хроникала биреүҙе урынлы булыр, тип иҫәпләйбеҙ.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

***✓ Мирғужа үҙе ошо ҡыҙға өйләнә һәм Боҙби 1172 йылда уға Мөхәммәтғәлиҙе табып бирә. Мирғужа үҙе Тамта иленең Әйле ырыуынан була, йәғни, бөгөнгөсә итеп әйткәндә, Ҡол Ғәли әйле башҡорто булып сыға.***

# ҠОЛ ҒӘЛИ ТИГӘН

## үҙ башҡортона

**Башҡорт халҡының арҙаҡлы улы Йәдкәр Әхәт улы Бәшәров уҡыусыларын тағы ла бер оло бүләк - "Ҡол Ғәли һәм башҡорт халыҡ мәҙәниәте тураһында" тигән китап менән һөйөндөрҙө. Әҙиптең быға саҡлы беҙ уҡыған "Бөйөк Башҡорт иле", "Башҡорт хан" китаптарының авторы икәнен дә иҫегеҙгә төшөрәбеҙ. Яңы баҫма "Болғар шағиры" тип өйрәнелгән Ҡол Ғәлиҙе үҙ милләтенә ҡайтарған һәм быны кире ҡаҡҡыһыҙ итеп дәлилләгән төплө документ та ул. Был хаҡта Йәдкәр Әхәт улының үҙе менән һөйләшәбеҙ.**



**▸ Йәдкәр Әхәт улы, билдәле ғалимыбыҙ Рәшит Шәкүр һеҙҙең китап туйында сығыш яһағанда "Әлегерәк, бер хеҙмәттә, Ҡол Ғәлиҙе "башҡорт һәм болғар шағиры" тип яҙғаным өсөн ярайһы ғына тауыш сыҡҡайны", тип хәтерләне. Был китабығыҙҙа һеҙ уны ҡыйыу рәүештә "башҡорт шағиры" тип дәлилләйһегеҙ. Һөйләп китегеҙ әле уның хаҡында?**

- Ҡол Ғәлиҙең мулла ҡушҡан исеме Мөхәммәтғәли. Уның атаһы Мирғужа исемле уҡымышлы мулла була. Мирғужаның Ҡол Ғәлиҙең әсәһе буласаҡ ҡыҙ - Боҙби менән танышыуы ла ҡыҙыҡ ҡына була. Әлеге мулла боронғо Иҙел-Урал ҡәбиләһе һабандарҙың Һабантуй байрамында ҡыҙҙарҙың егеттәр менән көс һынашыуын тыя. Ә был йола беҙҙең эраға тиклемге VI быуатҡа тура килә. Ислам диненә тиклемге дәүерҙә башҡорттарҙың боронғо ата-бабаларында ҡатын-ҡыҙҙар менән ир-егеттәр тиң хоҡуҡлы була һәм күп осраҡта ҡыҙға өйләнеү өсөн егет кеше үҙенең ниндәйҙер өҫтөнлөгөн күрһәтергә тейеш була. Һәм был өҫтөнлөк көрәштә, уҡ атышта, ат сабышта, алышта һынала. Мәҫәлән, Һамар-Һабан Әшнәне алыу өсөн уны көрәштә еңә, ун икенсе быуат әмире Шамғундың ҡыҙы Саина ҡыпсаҡ ханы менән алышып, уның ҡабырғаларын һындыра. Ҡол Ғәлиҙең яҙмалары буйынса, был хәлдәр Бөржән ырыуынан булған Буртас батша дәүерендә күп һүрәтләнә. Ул заманда ҡыҙҙар үҙенә ирҙе үҙҙәре һайлап ала ала. Буртас батша әлеге йоланы туҡтатырға тигән ҡанун сығара ла, әллә күпме ҡатын-ҡыҙ ирҙәр йәмғиәтенән айырылып, тауҙағы ҡәлғәгә йәшәргә китә. Ҡатындар менән ирҙәр араһында әленән-әле бәрелештәр булып тора. Буртас ғәскәре ҡатындарҙы еңеп кенә барғанда батшаның үҙ ҡатыны ла уны ташлап ҡатындар яғына сыға. Шул ваҡыт батша ла ҡылысын төшөрөргә һәм әлеге йоланы кире ҡайтарырға мәжбүр була.

Ә Һабантуй беҙҙең бөгөнгө һабан туйы менән тура килмәй. Боронғо халыҡтарҙа Һамар - уңыш, мал һәм үрсем эйәһе (дух) була. Һабан тип улар шул мал көтөүҙәрен көтөүсе изге эйәне атай. Иҙел-Урал ҡәбиләләре ошо мал үрсетеп йәшәү мөмкинлеген биргән яратҡан эйәләре Һамар-Һабан хөрмәтенә үҙҙәрен һабан тип йөрөтә. Яҙ башында малдар үрсей, ҡолон-бәрәстәр күпләп тыуып аяҡҡа баҫа башлай, был яңы циклды малға эйәреп йөрөп көн күргән халыҡ "туй" тип атай. Шулай итеп, был мәл тәбиғәттең яңы циклы тигәнде аңлата - һабантуй. Тап ошо мәлдә ырыуҙар йыйын яһай ҙа инде. Байрам апрель аҙағы май башына тура килеп, бер йоманан икенсе йомаға тиклем дауам иткән. Байрам малға, мал үрсеменә мәдхиә, йәғни ул һабан һәм ер эшкәртеү менән бер нисек тә бәйле түгел.

Һәм бына ошо байрамда ҡатын-ҡыҙҙың ирҙәр менән көс һынашыуын сираттағы берәү - Ҡол Ғәлиҙең атаһы була торған Мирғужа мулла тыйып маташа. Ул табын ырыуы башлығы Йомран-Табындың ҡыҙын бер егеткә ҡаршы көрәшкә сыҡҡанда туҡтата. Халыҡҡа был оҡшамай һәм мулланы туҡмалыуҙан бейҙәр саҡ алып ҡала. Был үҙенә күрә бер өҫтән төшөрөлгән күрһәтмә кеүек була. Ахырҙа, Мирғужа үҙе ошо ҡыҙға өйләнә һәм Боҙби 1172 йылда уға Мөхәммәтғәлиҙе табып бирә. Мирғужа үҙе Тамта иленең әйле ырыуынан була, йәғни, бөгөнгөсә итеп әйткәндә, Ҡол Ғәли әйле башҡорто булып сыға.

1174 йылда Ҡол Ғәлиҙең ата-әсәһе Бүләр ҡалаһына күсеп бара. Юлда әсәһе Боҙби ауырып китә һәм шул сиренән һауыға алмай ике йыл яфаланғас, вафат була. Атаһы Мирғужа баш ҡалала сәит итеп ҡуйыла. Яңы сәитте бүләрҙәр намаҙға саҡырған моңло тауышы өсөн Наҡҡар тип атай (Наҡҡар - ҡыҫҡа тынлы торба).

Ҡол Ғәли ун алты йәшенә тиклем урындағы мәҙрәсәлә белем ала. Уның һабаҡташы Башҡорт хандың ейәне Мирғази була. Балалар бергә уйнап үҫә. Үҫеп еткәс, береһе сәйәсмән, дәүләт эшмәкәре, икенсеһе дини мөғәллим, сәит булып китә.

**▸ Ҡол Ғәлиҙең сәйәхәтнамәләре бер географик карта-һүрәтләмә булып тора. Беҙ уны бары шағир булараҡ ҡына беләбеҙ, ә һеҙ уны сәйәхәтсе һәм ер-һыу өйрәнеүсе итеп тә бирәһегеҙ...**

- Бүләр ҡалаһындағы төрлө ваҡиғалар, ихтилалдарҙан һуң, Ҡол Ғәли үҙенә бирелгән хакимлыҡтан тулыһынса баш тартып, сәйәхәткә сығып китә. Был юлда уны әллә күпме ваҡиғалар, осрашыуҙар, мажаралар көтә. Ҡыпсаҡтарға әсирлеккә эләгеп, бер нисә йыл далала ла йөрөй. Унан ҡотолоп, оҙаҡ йылдар мосолман Көнсығышының мәҙәни үҙәктәре буйлап йөрөй. Хорезм, Сирия, Иерусалим, Мәккә илдәре буйлап сәйәхәт итеүен һәм унда шағирҙар, ғалимдар, суфый-шәйехтәр менән осрашыуын, аралашыуын бик ентекле итеп яҙа. Палестинанан Мысырға юлланған каруандың Иерусалим һәм башҡа ҡалаларҙа, Нил йылғаһы ҡултығында туҡтап киткәнен иң беренселәрҙән булып ҡағыҙға төшөрә.

Ҡол Ғәли Төньяҡ-Көнбайыш илдәре менән дә тығыҙ бәйләнеш тота. Ул Норвегияла, Финляндияла, Карелияла һәм Кольский ярымутрауында була. Ун өсөнсө быуат башында шул яҡтарҙа булып ҡайтҡас, шағир Бөйөк Башҡортостандың төньяҡ-көнбайыш сиген өйрәнә башлай. Был ваҡытта Көнсығыш Европала уғыр-башҡорттар Волга юлын - иң төньяҡ диңгеҙ юлын үҙләштерә башлай. Ҡол Ғәли мәғлүмәттәре буйынса Таўышбыраның (Фин ҡултығы) төньяҡ ярының көнсығыш ҡырынан үткән сик Галиджийск (Ладога) күленә алып бара, унан Унжа-Ҡалаға (Петрозаводск), ары Унжай (Онежское озеро) күленең көнсығыш яры буйлап Бат-Уғыраға (Вытегра) тиклем, унан Лянча күленә (Лача), унан Кочкаға (Няндома), ары Мосха йылғаһы буйына... Был юл буйлап урынлашҡан ауылдарҙа, ҡалаларҙа төрлө телле, төрлө йөҙлө һәм динле халыҡ йәшәй. Улар менән нисек аралашырға һәм ниндәй мөғәмәләлә булырға икәнде лә яҙа автор. Тимәк, әле бик боронғо замандарҙа уҡ финдар һәм башҡорттарҙың ата-бабалары араһында йылы мөнәсәбәттәр булған.

Ҡол Ғәли Чулман (Төньяҡ) диңгеҙе буйлап йөҙөп үтеүен дә һүрәтләй. Хаж ҡылғанда ул Иҙел (Волга), Шыр (Дон), Азак (Азов), Һаҡлан (Ҡара) йылғалары һәм диңгеҙҙәре һәм Уҙый (Оғуз) дәүләте аша йөҙөп үтә. Үҙенең "Хон китабы" тигән яҙмаларында "Минең менән булған 12 христиан һәм караим ошо сәйәхәттән һуң Ислам динен ҡабул итте", тип яҙа.

Артабанғы ғүмерендә Ҡол Ғәли тыуған яғына әйләнеп ҡайтып, унда сәит вазифаһын биләп, батша хөкүмәтенең яҡын кешеһе булып, илдәге сәйәси эштәрҙә ҡатнашып йәшәй. Ул баштан уҡ ябай халыҡ позицияһын алып, һуңғы көндәренә тиклем халыҡ яҡлаусыһы булып ҡала. Күрәһегеҙ, был бөйөк шәхесте беҙ ысынлап та белеп етмәгәнбеҙ, өйрәнмәгәнбеҙ.

**▸ Ҡол Ғәлиҙең шәжәрәһе буйынса нисә вариант бар? Һеҙ уларҙың ҡайһыныһын китапҡа индерҙегеҙ?**

- Бахши Имандың 2012 йылда Ҡаҙан ҡалаһында баҫылған тарихи мәғлүмәттәрендә бер аҙ тура килмәгән урындар ҙа бар. Бахши Иман шәйех Мөхәммәт Әминдең 1483 йылғы "Болғар шәйехтәренең изге юлы" китабынан өҙөктәр генә ҡалдырған. Бында Болғар илендә, Болғар ҡалаһында, Башҡорт иленең Һыуар, Биләр ҡалаларында барған мөһим ваҡиғалар һәм уларға ҡағылышлы булған шәйехтәр генә телгә алына. Шунлыҡтан Ҡол Ғәли шәжәрәһе лә тулы түгел. Шулай ҙа уның менән танышырға була. Ноғомандың улдары Дауыт менән ҡазый Яҡуп, шәйех Дауыттың улы Сөләймән сәит булып китә. Бүләрҙәге иң ҙур мәсет манараһы уның исемен йөрөтә. Сөләймәндең улы Сада, уның улы Ҡылыс. Ноғомандың икенсе улы Иҫәбел була, Иҫәбелдең улы шәйех Ҡолдауыт, Ҡолдауыттың улы Мирғужа, Мирғужаның улдары Ғүмәр, Бурташ, Хәҙриә, Мәсүт һәм Ҡол Ғәли (Мөхәммәтғәли). Ҡол Ғәлиҙең улы Мирғәли, Мирғәлиҙең улы Йәдкәр, Йәдкәрҙең улы Рәжәп, Рәжәптең улы Иҫбелхужа, уның улдары Хаммат һәм Хөсәйен.

Ғалим Ғәрифулла Кейеков Ҡол Ғәлиҙең шәжәрәһе Бикәтүн бабайҙан башлана тип һанай. Бикәтүндең Әйле, Юрмый, Байлар һәм Майҡыбей тигән улдары була. Уның хаҡында шәжәрәлә "Әйле атаһы Бикәтүн йортонда, Миәс даръяһында, атаһы урынында илле йыл шаһ булып, туҡһан йыл ғүмере булып, Миәс даръяһында дәфен булынмыш", тип яҙыла.

Тажетдин Ялсығол әл Башҡорди үҙенең "Тәуарихи Болғарийа" ҡулъяҙмаларында (XVIII быуаттың аҙағы - XIX быуаттың башы) Әйле ырыуының һәм Ҡол Ғәлиҙең шәжәрәһен ҡалдыра. Был турала 1897 йылда Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев үҙенең "Йәдкәр"ендә яҙып сыға. Унда шәжәрә Истәк хандан башлана. Истәк хан, уның улы Бикәтүн, уның улы Әйле. Әйленең улы Туҡый хан, уның улы Айҙар хан, уның улы Сәит хан, уның улы Әмир хан, уның улы Солтанморат хан, уның улы Сәлим хан, уның улы Илһам хан, уның улы Ҡабдулла хан. Ҡабдулла хандың улы Ғәлимбәк имам һәм мөҙәрис була. Уның улы Мирғужа һәм Мирғужанан Ҡол Ғәли...

***Тажетдин Ялсығол әл Башҡорди үҙенең "Тәуарихи Болғарийа" ҡулъяҙмаларында (XVIII быуаттың аҙағы - XIX быуаттың башы) Әйле ырыуының һәм Ҡол Ғәлиҙең шәжәрәһен ҡалдыра. Был турала 1897 йылда Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев үҙенең "Йәдкәр"ендә яҙып сыға. Унда шәжәрә Истәк хандан башлана. Ниндәйҙер айырмалыҡтар булған осраҡта ла, беҙ Ҡол Ғәли данлы Әйле ырыуынан булып, хандар һәм белемле муллалар затынан сығыуын аңлай алабыҙ.***

Күреүегеҙсә, ниндәйҙер айырмалыҡтар булған осраҡта ла, беҙ Ҡол Ғәли данлы Әйле ырыуынан булып, хандар һәм белемле муллалар затынан сығыуын аңлай алабыҙ.

**▸ Ҡол Ғәлиҙе беҙ, иң беренсе сиратта, уның "Йософ Ҡиссаһы" аша беләбеҙ. Ул әҫәрҙең идеяһын мөхәббәт, Ислам дине инеү, изгелек, тоғролоҡ, туғанлыҡ нигеҙендә күрәбеҙ. Ә һеҙ тикшергән инештәр ниндәй мәғлүмәт бирә?**

- Был поэма Волга алды-Урал буйында табылған яҙма әҙәбиәттең иң ҙур ҡомартҡыһы булып һанала. Ул Бөйөк

✓ ***Ҡол Ғәли кеше аңына яҡшы тәьҫир итә алған, ниндәйҙер арбау көсөнә эйә зат була. Уның ата-бабаһы илдә, төрки халыҡтары араһында Исламды таратыусы, халыҡты күпләп Исламға алып килеүселәр була.***

# ШАҒИРЫБЫҘ...

## ҡайтты

Башҡортостан дәүләте дәүеренә тура килә.

Ҡол Ғәли әҫәрен "Йософ Ҡиссаһы" тип атай, ә аҙаҡ уның архив варианттарында "Йософ Китабы", "Киссаһи Йософ ғәләйһи әссәләм", "Китабы ҡыйссан хәзрәти Йософ аннаби ғәләйһиәссәләм" кеүек атамалылары ла табыла. Ә күсереп яҙыусылар һәм телдән һөйләүселәр уны "Йософ менән Зөләйха" тип тә үҙгәртеп ебәрә. Йыйып әйткәндә, Йософ тураһындағы 360 төрлө поэма йәшәй.

Поэманы Йософ Биләр ҡалаһындағы бик буталышлы, ҡатмарлы мәлдәрҙә яҙа. Батша хөкүмәтенә ҡаршы ихтилалға күтәрелгән халыҡ яҡлы булып сыҡҡас, күтәрелеүселәрҙе баҫтырып, шағирҙы Алабуға ҡәлғәһенә бикләп, быҒаулап ултырталар. Унда ул Вятка йылғаһында йөҙгән караптарға юл күрһәтеү өсөн төндәрен маяҡ яндырып торорға тейеш була. Шул михнәтле көндәрендә ул "Йософ Ҡиссаһы"н яҙа ла инде.

һында Исламды таратыусы, халыҡты күпләп Исламға алып килеүселәр була. Уларҙың изгелеге, аҡылы, белеме, ғәҙеллеге айырым бер күренеш булып тора. Ҡол Ғәли ҙә уҡыусылары һәм башҡа ҡәләм тирбәтеүселәр тарафынан шулай итеп һүрәтләп ҡалдырыла.

Ҡиссалағы Зөләйха образы ла юҡтан алынмаған. Ҡол Ғәли Ҡоншаҡ хандың ҡыҙы Сәүлиәне яратып йөрөй. Был ҡыҙҙы ул атаһы менән Биләр ҡалаһына килгәнендә күрә лә, ғашиҡ була. Әммә Сәүлиәне икенсе кешегә кейәүгә бирәләр. Һуңынан инде, Сәүлиәнең ире вафат булғас, шағир уның менән күрешә. Был һөйөүҙең дауамы ла була.

1212 йылда Ҡол Ғәли поэмаһының төүге яҙылышын тамамлай, 1233 йылда уны эшкәртеп, бер аҙ өҫтәмәләр индерә. Был даталар уның ҡульяҙмаларына ҡуйылған. Әҫәр халыҡ-ара, милләт-ара, батшалыҡ-ара ғына түгел, донъя һәм йыһан кимәлендәге проблемаларҙы, кисерештәрҙе сағылдырған һәм күҙ алдына

Уларҙың икеһендә лә изгелек менән яуызлыҡ көрәше, кешенең тәбиғәт балаһы булыуы, зәхмәттәр менән параллель донъяла йәшәүе һәм башҡа икеһенә лә уртаҡ булған хәл-ваҡиғалар күп. Быларҙы һеҙ тәфсирләп әлеге тәҡдим ителгән китапта уҡый алаһығыҙ.

**Ҡол Ғәлиҙең тағы ла бер китабы бар, уның хаҡында беҙ юғары уҡыу йорттарында уҡыманыҡ, шунлыҡтан, халыҡ араһында белеүселәр ҙә аҙҙыр. Һеҙ был хазинаны өйрәнгәнһегеҙ, шулай бит?**

ата-бабалар һыуыҡтан ҡасып Уралға һыйына һәм уның мөмерйәләрендә йәшәй. Шул ерҙәрҙә улар Ура-Арья йәки туран тип йөрөтә.

40 мең йыллап боронғолоҡта боҙлоҡ сигенә башлай, 35 мең йыллап элек ете ырыу Иҙел тигән феодаль батшалыҡ барлыҡҡа килтерә. Унда һаҡлан (Ураның бер иле), һиндиецтар (боронғо төркиҙәр) ҙа инә. Ҡол Ғәли яҙыуынса, батшаның хакимлығы менән риза булмаған бейҙәр тарафынан йәшерен рәүештә саҡырылған Агарджа Дуло Иҙелдең батшаһы Иргәле менән осраша.



күрһәтмәһе менән йәшәй, йондоҙҙар буйлап күрәҙәләүҙәргә ышана. Артабан, Һамар дәүләте һыу аҫтында ҡалып, Ат-Алан ерҙәре диңгеҙ аҫтында ҡалғас, батша дружинаһы менән көнбайышҡа юллана ла, төркиҙәрҙе баҫып ала. Һамар яугирҙары төрки ҡыҙҙарға өйләнә һәм уларҙың балалары төрки телендә һөйләшә башлай. Ошо ҡушылманан хон халҡы барлыҡҡа килә. Күпмеләр ваҡыттан һуң хондарға ғәрәптәр һөжүм итеп, уларҙы уртаға бүлә. Көнбайыш өлөшө баҫып алыусыларҙың етәксеһе исеме менән атала башлай - Кимер - Ҡамыр (Ҡамыр батыр). Барлыҡ хондарҙы, ғәрәптәрҙе һәм башҡаларҙы Ҡамыр халҡы тип атанылар, тип яҙа Ҡол Ғәли.

Ары ҡульяҙмаларға күҙ йөрөткәндә, Агиҙелгә беренсе булып килгән хон башлығы Ҡамыр батыр Бүләр (Биләр) дәүләте төҙөгәс, халыҡ уны хаким итеп ҡабул итә. Хондарҙы "бүләрҙәр" тип атай башлайҙар, ә уларға килеп һыйынған болғарҙарҙы уларҙың башлығы Бесер-би исеменән "бесермәндәр" тип йөрөтәләр. Һуңғараҡ болғарҙарҙы урыҫтар менән төркиҙәр ҙә шулай атай башлай. Һуңынан, яңы хон батшаһы Бүлүмәр Бүләрҙә үҙ династияһы хакимлығын урынлаштыра башлағас, бүләр болғарҙары үҙҙәренең хон ырыуҙарына хеҙмәт итеүе хөрмәтенә "бүләрҙәр" тип атата. Бүлүмәр илендә хон ырыуҙары бик күп була әле, халыҡ, шул иҫәптән болғарҙар ҙа, хон телендә һөйләшә.

"Хон китабы"ның артабанғы ниндәйҙер өлөштәре Баҡши Имандың "Джагфар тарихы" китабында телгә алына. Унда "Хин Керман" (Аҡ Вежа), "Джалда" (Ҡырым), "Тамьян һәм Дуртсу" (Кавказ алдының Төньяҡ өлөшө), Дяу-Хонджак" (Урта Волга губернаһының Төньяҡ өлөшө, һабан халҡы ерҙәре), "Маджара Суба" (Буржан бейлеге баш ҡалаһы) һәм болғар-ҡыпсаҡ мөнәсәбәтен һүрәтләүҙәр бар. Үкенескә ҡаршы, был өлөштәр, тулы рәүештә, төп нөсхәһендә һаҡланмаған. Әммә ошо билдәле булғандары ла беҙгә баһалап бөткөһөҙ зиннәттәге мәғлүмәт - белем бирә. Тарихсыларыбыҙға быларҙы ҡулланырға ла ҡулланырға. Ошоларҙан сығып та әллә күпме төйөндәрҙе сисеп ебәрергә, әллә ниндәй буталсыҡтарҙы юлға һалырға була. Күрәһегеҙ, бөйөк шағир беҙгә тарихта ла яҡтылыҡ ҡалдырған.

XII быуатта яҙылған поэмалағы уйлап сығарылған донъя ысынбарлыҡтың сағылышы булып сыға. Автор Алланың дөрөҫлөктө өҫкә сығарырына ышана һәм һәр кешелә ғәҙелһеҙлеккә ҡаршы ҡараш тыуҙырырға тырыша. Әҫәрҙә уның үҙ тормошо элементтары ла сағылыш таба. Донъяуи ҡиммәттәре, фекерҙәре, ниндәйҙер күңел төшөнкөлөктәре лә таныла. Бигерәк тә шул осор батшалыҡ итеүсе ғаилә хәлдәрен яҡшы һүрәтләй. Батшалыҡта ултырғандың халыҡты иҙеүе, яҙалауы, ҡоллоҡҡа оҙатыуы, үҙ туғаның ситкә тибеүен күрһәтә. Бигерәк тә ихтилалда енелгәндән һуң күргән ыҙалар, был иҙеүҙәрҙе еңелгәндәрҙең ҡапыл ғына онота алмаҫын, йән һәм тән яралары оҙаҡ һыҙларын бәйән итә.

Ҡол Ғәлиҙең "Йософ Ҡиссаһы"н уҡыған батша (Ғабдулла Челбир) ҡаты асыулана, бигерәк тә батшалыҡтың ағаһынан ҡустыһына күсеүен күтәрә алмай. Ҡульяҙманы тапап ташлап, шағирҙы фетнәсе булараҡ ҡулға алырға ҡуша. Тик уны алып килеү өсөн батша кешеләренә йылға аша йөҙөп сығырға кәрәк була. Көслө дин кешеһе, күрәҙәсе булып дан алған Ҡол Ғәли "был бойороҡто үтәргә теләүселәр йылғаны сыға алмаясаҡ" тип кенә ҡуя һәм, ысынлап та, был талапты үтәүсе табылмай. Ысынлап та, Ҡол Ғәли кеше аңына яҡшы тәьҫир итә алған, ниндәйҙер арбау көсөнә эйә зат була. Уның ата-бабаһы илдә, төрки халыҡтары ара-

килтермәслек киң даирәлә таралған әҫәргә әйләнә. Уны хәреф таныған уҡып, уҡый белмәгәндәр яттан һөйләүселәрҙән отоп алып тарата. Төркиәлә төрөк теленә тәржемә итеп алып, Төньяҡ Иран, Әзербайжан, Бәләкәй Азия, Сирия илдәрендә лә һөйләйҙәр. Мысыр солтаны Мансурға ҡиссаның ҡыпсаҡ телендәге ҡульяҙмаһын алып киләләр, ул әҫәр

***Ҡол Ғәлиҙең "Йософ Ҡиссаһы"н уҡыған батша (Ғабдулла Челбир) ҡаты асыулана, бигерәк тә батшалыҡтың ағаһынан ҡустыһына күсеүен күтәрә алмай. Ҡульяҙманы тапап ташлап, шағирҙы фетнәсе булараҡ ҡулға алырға ҡуша. Тик уны алып килеү өсөн батша кешеләренә йылға аша йөҙөп сығырға кәрәк була. Көслө дин кешеһе, күрәҙәсе булып дан алған Ҡол Ғәли "был бойороҡто үтәргә теләүселәр йылғаны сыға алмаясаҡ" тип кенә ҡуя һәм, ысынлап та, был талапты үтәүсе табылмай.***

менән туған телендә таныша. Бөгөн "Йософ Ҡиссаһы" буйынса йөҙләп поэма һәм проза әҫәрҙәре ижад ителгән. Күп авторҙар әлеге поэманы үҙ әҫәрҙәренең нигеҙе итеп, этәргесе, илһам сығанағы итеп алған.

"Йософ Ҡиссаһы"н халҡыбыҙҙың бөйөк эпосы "Урал батыр"ҙың дауамы итеп ҡарарға кәрәк. Сөнки ул ысынлап та шулай. "Урал Батыр"ҙа боронғо халҡыбыҙҙың йәмғиәт булып формалашыуы, уның Тәңрегә - Күк Аллаһына килеүе, йәғни Аллалыҡты ҡабул итеүе һүрәтләнә. "Йософ Ҡиссаһы"нда ошо уҡ халыҡтың Ислам диненә күсеүе, йәғни, рухи үҫеш дауамы һүрәтләнә.

- 1242 йылда шағир "Хон китабы" тигән ҡульяҙмаларын башлай. Был баҫмаһын ул тамамлай алмай, яҙмалары конспект формаһында ғына тороп ҡала.

"Хон китабы" - ул беҙ ҡабул итергә теләгәнсә "хан китабы" түгел. Хон ул боронғо халыҡ, бер ҡәбилә, ырыу атамаһы. Китапта автор ата-бабаларының тарихын иң боронғо быуаттарҙан, беҙҙең эраға тиклемге дәүерҙән алып һүрәтләй башлай. Унда Шамса Тебирҙең мәғлүмәттәре бар. Уның буйынса, Иҙел ярҙарында үҙҙәрен "Ура" тип атаусы һиндиец халҡы йәшәй. Бик әүәле Европаның төньяғын боҙ ҡаплай. Боҙлоҡ дәүере башлана. Боронғо

Улар алыша. Бәрелештә Агарджа еңеп сыға һәм тәхеткә ултыра. Ҡол Ғәли ҡульъяҙмаһында был бәрелеште шиғри формаға һалып һүрәтләй.

Илгә төньяҡтан нуҡрат атамалы уғыр ҡәбиләләре, көнсығыш Себер тарафынан уғыр-аскалдар инә (Себерҙе ҡайһы халыҡтар бөгөн дә "Аскал" тип атай.) Был ҡушылма Волга-Уралда "Иҙел" тигән ил төҙөй (туран да тиҙәр).

Был күсеш осоро бынан ун бер мең йыл элек була, тип яҙа автор. Ары һиндиецтарҙан һамарҙар айырыла ла, Һамар дәүләтен яһай. Беренсе хакимдары Май йәки Мардукан була. Һамар халҡы йондоҙҙарҙы, күкте күҙәтә. Улар йондоҙҙар

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йәдкәр Әхәт улы был китабы менән беҙгә ысын мәғәнәһендә Ҡол Ғәлиҙе - әйле ырыуы башҡортон - бөйөк шәхесебеҙҙе ҡайтарҙы. Ошо китап буйынса үткән конференцияла ҡайһы бер ил-тарих-тел нигеҙен өйрәнеүсе ғалимдарыбыҙ "Беҙ уның кем икәнлеген белдек ул, әммә атап ҡына әйтерлек дәлилдәребеҙ булманы", тип тә үкенес белдерҙе. Һәм, бына, авторҙың дәлилдәре бер китап! Рәхәтләнеп уҡығыҙ, өйрәнегеҙ.**

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмәләште.**

***✓ Башҡорттар һуңғы сиккә тиклем көрәшкә тоғро булып ҡала. Яу башынан алып егерме ете башҡорт старшинаһы ғына алыштан ситләшә. Ҡалған старшиналар һәм ябай халыҡ үлемдән дә ҡурҡмай көрәште тағы ла нығыраҡ көсәйтә.***




* * *

1768 йылдан алып барған Польшалағы Барск конфедерацияһы баш күтәреүселәре һуғышына 1771 йылда Екатерина II өс меңләп башҡорт ғәскәрен ярҙамға ебәрә. Мәскәүҙән атлы гвардия рәтендә сыҡҡан Ҡазыхандар ғәскәре лә, Кутузов етәкселегендәге рус армияһы составында Варшава, Вильнюс һәм башҡа ҡалалар өсөн айҡаша. Һыбайлы ғәскәр ҙур юғалтыу кисерә. Әллә күпме башҡорт баштары ете ят ерҙәрҙә ятып ҡала. Ахырҙа, ете йылға яҡын поляк ерендә яулашып йөрөп, бары тик 1778 йылдар аҙағында ғына һуғыш баҫылып, шунда, сик һағында ҡалдырылалар. Башҡорт иле генә түгел, Рәсәй эсендәге хәл-тороштан да айырылған, Ватандары хаҡында бер ниндәй мәғлүмәт белмәгән яугирҙар барыһы тарафынан да онотолоп ҡалғандай була. Шул ваҡытта тынысһыҙлыҡты һаҡлау өсөн Рәсәйҙән өҫтәмә көстәр килтерелеп, араларында башҡорт-татар-мишәрҙәр ҙә булып, улар бындағыларға илдәге хәлдәрҙе һөйләй.

Оло яу үткән икән Башҡорт ерендә. Ҡазыхан унда саҡта уҡ ҡуба башлаған бола көсәйгәндән-көсәйә барып, 1773 йылдың ҡышына, Башҡорт ерендә бер нисә яу үҙәге барлыҡҡа килә. Яуҙың үҙ батырҙары, дошмандары һәм һатлыҡтары була. Тиҙ арала йыйналған башҡорт ғәскәрҙәре пыран-зыран килтереп алпауыттарҙы, урыҫ заводтарын туҙҙыра, тартып алынған ерҙәрен кире ҡайтара башлай. Артабан хәлдәр тағы ла ҙурҙанараҡ ҡуба. Ҡаҫҡын Һамаров менән Ҡаранай Моратовтың берләшкән отряды һөжүм итеп Стәрлетамаҡты ала, Өфөнө ҡамай. Уларға Губанов етәкселегендәге рус отряды ҡушыла. Шулай итеп халыҡ яуының үҙәге булып Өфө тәңгәлендәге Чесноковка тигән урын билдәләнә. Унан старшина Турай Ишғәлин Ҡаҙан даруғаһы башҡорттарынан ҙур отряд ойоштора. Тораҡ Өфө янынан килгән Ҡаранай Моратов бындағы отрядтарҙың бөтәһен дә үҙ етәкселегенә алып берләштерә. Шул йылдың ҡыш айҙарында Юса менән Көнгәр тирәһендә Батырҡай Иткининдың дөйөм етәкселегендәге башҡорт отрядтары хәрәкәт итә. Декабрь урталарында улар Юсаны ала һәм Көнгәрҙе ҡамай. Себер даруғаһының башҡорт отрядтары Эсем, Ҡатаутамаҡ, Йүрүҙән, Архангельск заводтарын һуғышып ала, Һатҡы һәм Златоуст заводтары янына килеп етә. Себер даруғаһындағы баш күтәреүселәрҙең хәрәкәтен берләштереп ойоштороуҙа Юлай старшина айырыуса көс һала. Уның улы Салауат Бүгәстең яҡын янаралы, халыҡ батыры булып дан ала.

Салауат Ырымбур янында ҙур отрядтар ойоштора һәм Көнгәргә табан йүнәлә. Юл ыңғайында ул Красноуфимскиҙы ала.

Әммә Әбей батша хөкүмәте лә ҡуҙ йомоп ултырмай. Бығаса артыҡ уңышҡа ирешә алмаған каратель ғәскәрҙәре 1774 йылдың ҡышы һәм яҙына табан көслө һөжүм башлай. Силәбе яғында бик күп көслө һуғыштар була. Ҡала ҡулдан-ҡулға күсеп тора. Яҙға ҡарай подполковник Михельсондың ҙур ғәскәре баш күтәреүселәрҙең Өфөнө ҡамап торҙан ғәскәрен ҡыйрата. Бында башлыса уҡ-һаҙаҡ һәм һөңгө менән генә ҡоралланған башҡорттар һуғыша. Улар иҫ киткес ныҡ алыша, тәүлек ярым мылтыҡтарға һәм пушкаларға ҡаршы тороп, ҡырылып бөтә яҙа.

Пугачевтың Баш ғәскәренә килгән урыҫтар яйлап ҡурҡышып ҡасыша, тарала башлай. Кенәз Голицындың каратель ғәскәре Татищев ҡәлғәһе янында Бүгәстең ҙур отрядын тар-мар итә. Кинйә Баш ғәскәрҙе тулыландырыу өсөн бер аҙна эсендә тағы ике мең башҡортто йыйып килтерә. Һаҡмар ҡалаһы эргәһендә йәнә һуғыш була. Был юлы ла ихтилалсылар ҡаты ҡыйратыла. Шул арала казактар көрәш сафынан сыға, улай ғына ла түгел, отряд башлыҡтарын карательдәргә тотоп бирә башлай. Пугачевтың үҙен дә ахыр сиктә казактар һата. Урыҫ крәҫтиәндәре лә, крепостнойҙары ла, заводсылар ҙа хөкүмәт ғәскәрҙәре яғына сыға. Татар һәм бөтән килмешәк халыҡтарға рус алпауыттары һәм заводсыларының былар билән алған башҡорт ерҙәренән ҡыҫырыҡлауы яуҙа ҡатнашыр өсөн сәбәп була. Үҙ талаптарының тормошҡа ашмаҫын аңлап һәм яуҙа башҡорттарҙың еңеп ҡуйыуынан ҡурҡып, улар ҙа каратель отрядтарына ҡушылып китә.

Башҡорттар һуңғы сиккә тиклем көрәшкә тоғро булып ҡала. Яу башынан алып егерме ете башҡорт старшинаһы ғына алыштан ситләшә. Ҡалған старшиналар һәм бөтә ябай халыҡ үлемдән дә ҡурҡмай көрәште тағы ла нығыраҡ көсәйтә.

Салауат Себер даруғаһының урта тирәһендә хәрәкәт итә һәм был отряд ҡалаларҙың бөтәһенә лә ҡурҡыу һалып тора. Шуға күрә, Михельсон иң элек уның бараһы юлында һуғыш алып барған Салауат отрядын ҡыйратырға уйлай. Карателдәрҙең хәрәкәтен күҙәтеп торған Салауат Михельсон ғәскәре менән әллә нисә тапҡыр бәрелешә. Был аҫыл ир Башҡорт ерҙәренең төньяҡ һәм төньяҡ-көнсығышындағы бөтә хәрәкәттә етәкселек итә, шул яҡтағы һәр отряд Салауат ғәскәренең бер берәмеге була. Унан урыҫ хәрби начальниктары ҡан ҡурҡып тора.

Илдә яу көсәйгәндән-көсәйә. Исәт провинцияһында башҡорт отрядтары Баҙаргол, Юламан етәкселегендә һуғыша, урындағы рус командалары бер ни ҡыла алмай. Нуғай даруғаһында Ҡаҫҡын, Ҡаранай, Ханбулат отрядтары карателдәргә ҡаты ҡаршылыҡ күрһәтә. Юса даруғаһында Батырҡай менән Илсеғол бик таҫыл көрәш алып бара. Себер даруғаһында Эсем, Ҡатау-Иван һәм башҡа заводтар ултырған ер һуғыш ҡырына әйләнә, унда Юлай отрядтары эш итә. Шунан тыш, башҡа ерҙәрҙә эре йәки ваҡыраҡ етәкселәрҙең отрядтары ҡурҡыу белмәй батыр алыша. Салауат үҙе төньяҡ һәм төньяҡ-көнсығыш ерҙәрҙе тотош айҡап йөрөй. Уның хәрби оҫталығына хатта тәжрибәле регуляр ғәскәр командирҙары ғәжәпләнә.

Дошмандың һан һәм ҡорал яғынан күп тапҡырға көслө булыуына ҡарамаҫтан, башҡорттар иҫ киткес батыр һәм ҡаты һуғыша, әммә батша хөкүмәте ғәскәре үҫкәндән-үҫә бара. Башта баш күтәреүселәр яғында йөрөгән крепостнойҙар, мишәр-татарҙар, казактар хөкүмәт ғәскәренә барып һарыға. Башҡорт ерендә заводтар төҙөгән помещиктар ихтилалды баҫтырыуға бөтөн тырышлығын һала. Аҙаҡҡа ҡарай ҡайһы бер старшиналар баш һала башлай. Рус администрацияһы башҡорттарҙы баш һалырға өгөтләп хаттар ебәрә. Каратель ғәскәрҙәренең баш командующийы генерал-аншеф Панин, яуҙы дауам иткән хәлдә "ирҙәр заты бәләкәй балаларға ҡәҙәр иң ғазаплы язалар менән өҙөләп үлтерелер, ҡатындары, балалары һәм ерҙәре императрица ғали йәнәптәренә тоғро булған кешеләр ҡулына бирелер", тип ҡурҡыта. Ул халыҡты Салауат менән уның атаһын тотоп бирергә өндәй. Һәм шундайҙар табыла ла. Халыҡ араһында гел шымсылап йөрөгән мишәр старшинаһы Мөҡсин Әбдеселәмов Салауаттың йәшенгән ерен белеп, ғәскәр килтерә һәм карателдәр уны тотоп ала.

Салауат менән Юлайҙы Мәскәүҙән Ырымбурға, ә унан, губернатор ҡарары буйынса, Өфөгә оҙаталар. Өс ай буйы яҙалағандан һуң, танауҙарын ҡырҡып, тамғалар баҫып, ил буйлап сыбыртҡы менән ярҙырып йөрөтөп ғүмерлеккә ситкә һөргөнгә оҙаталар.

Ҡаты һуғыштар йөҙәрләгән, меңәрләгән кешене бер юлы юҡ итә. Яуҙа ҡырылғандан тыш, иҫәпһеҙ күп башҡорт карателдәр ҡулынан һәләк була. Губернаторҙар, воеводалар, командирҙар башҡортҡа ни теләһә шуны ҡыла. Улар унарлаған, йөҙәрләгән кешене бер ыңғай атып, сыбыртҡы менән һуҡтырып, язалап үлтерә. Каратель ғәскәрҙәренең командующийы итеп ҡуйылған генерал Панин халыҡты тотош һыпырып ҡыра башлай. Болала ҡатнашыусыларҙы шунда уҡ дүрт һанын сабып өҙөргә, ә шуларҙы йөшерғән кешеләрҙе йәрәбә буйынса язаларға бойороҡ бирә. Халыҡтың ҡотон алыр өсөн ҡолаҡтары, танауҙары, ҡул бармаҡтары ҡырҡылған башҡорттарҙы ауылдан-ауылға йөрөтөп күрһәтәләр. Панинды алыштырған Суворов та шул уҡ ҡанлы эште дауам итә. Мең-меңләгән башҡорт каторгаға, һөргөнгә ебәрелә, ғүмерлек һалдатҡа бирелә. Үлтерелгән, ғәрипләнгән башҡорттоң иҫәбе-һаны булмай. Шуның өҫтәүенә, Екатерина II-нең 1775 йыл 19 февралдә сығарған указы буйынса, "ҡылған енәйәттәре өсөн" башҡорттар дүрт мең штраф аты, ә аттары етмәгән хәлдә, һәр ат егерме бишәр һум иҫәбенән аҡса түләргә тейеш булып ҡала. Бөлгөнлөктән сигенә еткән халыҡты тотош астан үлеүгә дусар итеү өсөн бөтә сара күрелә. Ә Ҡазыхандың һәм эргә-тирәләге Тәкәй, Аҙналы, Морат, Юлай, Ыҫмайыл, Бикбулат, Яҡуп, Ҡасай ауылдары яндырып юҡҡа сығарыла. Ирҙәре ҡырылып, тере ҡалған ҡатын-ҡыҙы, бала-сағаһы урыҫ байҙарына, хәрбиҙәренә таратып бирелә...

Был тарихтан нисә йылдар илдәре менән бәйләнеше булмаған яугирҙар шаҡ ҡата. Ҡан эсендә йөрөп йөрәктәре ҡатып бөткән ирҙәр ҙә, сыҙай алмай, тәгәрәп ятып илай. Аҙаҡ күпмелер тынысланып, фекерләшеп, илдәренә ҡайтарыуҙы һорап, батшаға хат яҙалар. Екатерина II уларға рөхсәт биреүен бирә лә, әммә ҡайтып барғышлай, 1790 йылда, тағы ла Прибалтикаға ҡыуа. Унда биш йөҙләк дүрт рус ғәскәре фин армияһы составында һуғыша. Илдән килгән мишәр, ырымбур казактары араһындағы ике меңләгән башҡортҡа барып ҡушыла Ҡазыхандар. Һәм, Хоҙай ҡушҡандар, был ут эсенән дә тере сығып, 1794-1795 йылдарҙа Рәсәйгә ҡайтып етәләр. Шул бәхетлеләр араһында гвардия хорунжийы Ҡазыхан Баҙамша улы Янғәлин да була.

* * *

Әбыл ваҡытта, гөрләп үҫеп килгән Өйәш Петербург ҡалаһының иң затлы йорттарының береһендә байрамға әҙерләнәләр. Христостың тыуыуын ҙурлап билдәләй шулай дворянин Готов Дмитрий Ярославовичтың ғаиләһе. Йорт экономкаһы Екатерина ҡара таңдан тороп ашнаҡсыларҙы ҡыуалай. Унан яҡтыра башлау менән ат ектереп баҙарға юлана ла, бер ни ваҡыттан һуң сана тултырып аҙыҡ-түлек һәм башҡа тауарҙар алып ҡайта. Уларын хеҙмәтселәр бушатҡансы, тағы бер ҡат ризыҡтар бешерелеүен тикшереп сыҡҡас, ҡаттарҙы үтеп бүлмәләр әҙерлеген байҡай ҙа, хужабикәһе янына инә. Анна Дмитриевна уянһа ла иркәләнеп ята бирә торған. Екатерина ингәс тә, енелсә генә реверанс яһап, алсаҡ сәләмләй:

- Хәйерле иртә, сударыня. Нисек йоҡланығыҙ? - Ары үтеп, ауыр ҡорғандарҙы аса, бүлмә эсе бермә-бер яҡтырып ҡала.

- Хәйерле иртә, Катенька. Һинең киләге үләндәреңдән һуң бер уянмай, үлек кеүек йоҡлағанмын. Ысынлап та баҡшы икән һин, Гришка дөрөҫ әйтә, - тип көлә биреп, ятҡан килеш рәхәтләнеп кирелә лә, тороп ултыра барыня.

Екатерина барып, өс оло шкафтың ишектәрен бер-бер артлы асып ебәрә:

- Ниндәй күлдәк кейергә теләйһегеҙ, сударыня? Хәтерегеҙгә төшөрәм: бөгөн байрам.

- Эйе шул... - Барыня - урта йәштәрҙәге, йомороҡ ҡупшы кәүҙәле, һөттәй аҡ тәнле, шундай уҡ салт аҡ йөҙлө, аҡһыл-һары сәсле ҡурсаҡ кеүек ҡатынҡай, оҙон керфекле ҙур зәңгәр күҙҙәрен бүлмәнең ярты стенаһын тигәндәй биләп торған кейемдәр буйлап йүгертә лә, берәһенә бармаҡ төртөп күрһәтә: Анааа-ауы зәңгәр күлдәкте әҙерләгеҙ, Катенька һәм... сәсемде лә үҙең өй әле бөгөн. Яңы служанкаңыҡы килеп сығыңҡырамай, бигерәк оҙа хитлата, арып китәм.

- Әлбиттә, сударыня.

Йомшаҡ тәнле, тумалағыраҡ хужабикәһе эргәһендә саҡ ҡына ҡалҡыуыраҡ һәм бөтөнләй икенсе йөҙлө һәм төҫлө булған хеҙмәтсе ҡатын етеҙ ҡыбырлап эшкә тотондо. Уның өҫтөндәге иҙәнгә тейеп торған ҡара күлдәк, яурын аша кейелгән шундай уҡ оҙон аҡ алъяпҡыс, башына бөтә муйынын, маңлайын һәм хатта сикәләрен дә ҡаплап тығыҙ итеп уралған ҡара яулыҡ экономканы артыҡ етди итә. Аҡһыл-һарыраҡ йөҙөндәге ҡап-ҡара ҡаштары һәм ҡыҫығыраҡ моңһоу күҙҙәре лә, бәләкәс кенә ҡырлас танауы менән йоморо ауыҙы ла был ҡатындың һөйкөмлө генәлеген күрһәтә лә, ҡарашының һалҡын һәм фигеленең хисеҙ булыуы дөйөм төҫөнә ҡырыҫлыҡ бирә.

Хужабикәһен кейендереп, сәсен үреп ҡупшылап өйөп ҡуйғас, экономка ҡыңғырау шылтыратып ашнаҡсыны саҡыртты ла, алып килеңгән йылы һөт, бутҡа һәм башҡа ризыҡтарҙы кескәй өҫтәлгә теҙҙе. Барыня иртәнге сәйҙе бүлмәһендә эсә, шул арала көнлөк бойороҡтарын да бирә, эштәр буйынса ла кәңәшләшәләр.

- Әҙерлек нисек әле беҙҙең, Катенька?

- Бара, сударыня, борсолмағыҙ. Баҙарға барып килдем, төшкә табынға бешереләнеү башланды. Баринды алып килә торған каретаны таңдан ебәрҙем. Йәш бариндарҙы төшкә ҡарай барып алаҫаҡтар, Кадет корпусына балаларҙы байрамға алабыҙ тип хәбәр ебәрҙем, рөхсәт алдым.

- Яҡшы булған, Катенька, мин һинең барыһын да тейешенсә эшләреңә ышанам.

Барыняһы янынан сыҡҡас та дүрт ҡатлы замок буйлап йөрөп, әллә күпме мәшәҡәттәрен башҡарҙы, бойороҡтар бирҙе, тикшерҙе әле Екатерина. Уның һомғол һынын тәҙ, башын юғары тотоп килгән уҫал төҫөнән үк шикләнгән ялсылар тағы ла йылдамыраҡ йүгерешә башлай. Ҡыҫҡырмай, мыҡмай, игәмәй ул, бары үлтергес һалҡын ҡарашы менән генә лә ҡурҡыта ала. Эш буйынса күрһәтмә биреүҙән артыҡ һөйләшмәй ҙә, хужабикәнән башҡа аралашҡан, яҡынлашҡан кешеһе лә юҡ. Көләүен түгел, йылмайыуын да бик һирәк күрәләр. Эсендә ниндәйҙер бер ауыр зары таш булып ҡатып ҡалған да, был ҡатын шул арҡала һәйкәл шикелле өнһеҙ-тынһыҙ, хис-тойоуһыҙ, әллә йәнһеҙ хәрәкәт итеп йөрөй кеүек. Әммә йортта уның ҡарамағында хеҙмәт иткән утыҙлап ялсы, экономканы бер һүҙһеҙ тыңлата һәм буйһондора...

**(Дауамы. Башы 52, 1-2-се һандарҙа).**

✓ *Ҡорбан салғанда йәки малды берәйһенә һатыр алдынан бер тотам йөнөн алып ҡалабыҙ һәм мал һарайының ишеге башына ҡыҫтырабыҙ. Быны эшләргә бер ҡасан да онотмағыҙ, яҡындарығыҙға ла өйрәтегеҙ.*



ЙОЛА СЦЕНАРИЙЫ

# ЙОЛОҠ ТУЙЫ

**Ҡатнашалар:**
**Өләсәйҙәр һәм бер нисә бала.**

*Сәхнәгә бер төркөм балаларҙы эйәртҡән Өләсәйҙәр сыға. Ҡулдарында әлморон, миләш, муйыл емештәре бәйләнгән сыбыҡ. Улар шул ботаҡ менән тирә-яҡты һуҡҡыслайҙар.*

**Беренсе бала:** Нишләйһең һин, өләсәй?

**1-се өләсәй:** Бәй, белмәйһегеҙме ни? Ҡыш буйына йыйылған сырхауҙарҙы йолоп алабыҙ. Күрәһегеҙме, ошо үләндәр - аҡ әрем, күк әрем, селек ботағы эшкинә бында. *(Һуҡҡыслауын дауам итә)* Әгүҙү билләһи...

**Икенсе бала:** Сырхауҙы йолоп алыумы?

**1-се өләсәй:** Йолоп алыу. Кешене ауырыуҙан, сирҙән, сырхауҙан таҙартыу. Былай булғас, Йолоҡ туйы тураһында һөйләргә кәрәк һеҙгә, белергә ваҡыт еткән.

**Беренсе бала:** Ваҡыт, өләсәй, бик ваҡыт! Тыңлайбыҙ.

**2-се өләсәй:** Тыңлайһығыҙ ҙа, ҡатнашаһығыҙ ҙа! Отоп алырға йәтеш булыр. Бик борондан уҡ, яҙ етеү менән, май айының аҙағында кешеләр йорт-ҡураларын таҙартҡан. Бөгөнгөсә әйткәндә, йорт-еренә генераль уборка, субботник үткәргән. Бер һорауға яуап бирегеҙ. Йыйыштырыу-йыуыу өсөн нимә кәрәк? Ҡул кәрәк! Таҙа һыу! Сепрәк, һепертке, көрәк кәрәк. Тимәк, Йолоҡ туйы - ул Таҙалыҡ, Сафлыҡ туйы, тигәнде лә аңлата. Ауырыу - бактериянан, бысраҡ-сүптән ҡотолоу, йолоноу, тигәнде лә аңлата.

**3-сө өләсәй:** Хәҙер беҙ һеҙгә Йолоҡ туйының тәүге өлөшөн күрһәтәбеҙ. Беренсенән. Ҡулындың көсө китмәһен өсөн тәүҙә былай тип әйтегеҙ: "Минең ҡулым түгел, Ғәйшә-Фатима ҡулы". Ҡабатлағыҙ әле.

*(Балалар ҡабатлай).*

**3-сө өләсәй:** Тәүҙә өй эсен шифалы үләндәр һалып бешекләгән һыу менән йыуғандар. Уны былай әҙерләйҙәр: ҡышҡылыҡҡа тип йыйған үләндәр артып ҡала. Бер биҙрә ҡайнар һыуҙа мәтрүшкә йәки башҡа үләнде бешекләйҙәр, һыуынғас, шуның менән өй эсен йыуалар. Әлеге дарыу үләндәренән бәйләнгән сыбыҡ менән өй стенаһына һуҡҡыслап та сығалар.

**2-се өләсәй:** Ҡасан уҙғаралар һуң Йолоҡ туйын? Иң яҡшыһы: 22 июнь көнө. Был көндөң иртә таңы - йылдың мөғжизәле мәле, тиҙәр. Иртүк торорға кәрәк. Кем менәндер һөйләшерҙән алда, ауыҙға бер ҡалаҡ бал ҡабырға кәрәк. Шунан кипкән үлән бәйләмен тототеп, йорт эсенән мөйөштәрҙе ыҫларға. Быының өсөн, үлән бәйләмен тимер батмуска йәки тимер тасҡа һалаһың. Иплә кенә уны яндыраһың. Ялпылдап ялҡынланып янмаһын, төтәнләп-быҫҡып ҡына янһын. Төтөнө менән мөйөштәрҙе таҙартаһың.

**1-се өләсәй:** Был йоланы башҡарғанда доғалы һүҙ әйтергә кәрәк. Һүҙ көсө бында ла алдан бара! Был ваҡытта әйтә торған теләк һүҙҙәре бар, уларҙы белергә кәрәк: "Сөбханаллаһ, машаллаһ, яман күҙҙән һаҡла, Аллаһым", - тиһен. "Яман сирҙәр тупраҡҡа булһын, һибелеп китһен, елгә осоп китһен", - тип ихласлап теләргә кәрәк.

**2-се өләсәй:** Йолоҡ туйының йәнә бик кәрәкле өлөшө бар. "Әмәлләү" тип атала ул, йәғни кешене дауалау, таҙартыу әмәле. Иғтибар менән ҡарағыҙ, күңелегеҙгә һалып ҡуйығыҙ: былар - беҙҙең башҡорт халҡын меңәр йылдар буйы һау-сәләмәт итеп йәшәткән боронғо һәм көслө әмәлдәр.

**Икенсе бала:** Исләнек. Өй эсен үлән һыуы менән йыуырға. Теләк теләргә.

**Беренсе бала:** Әмәлләүҙе өйрәнергә!

**1-се өләсәй:** Ҡана, һеҙҙе әмәлләп алайым әле. Балаҡайҙарым, ярым түңәрәк яһап торорғоҙ. Кемдең ҡайны урыны ауырта, шул ерегеҙгә күңелдән ҡарағыҙ. Шундағы сирҙе сығарыуҙы һәм йылғаға ташлағыҙ.

Тағы ла бик мөһим, кәрәкле нимә бар? Эйе, дөрөҫ, кәрәкле һүҙ бар! "Һамаҡлау" тип әйтәбеҙ. Был һамаҡты бик белеү кәрәк. Шуға мин әйткәнде дөрөҫ кенә итеп ҡабатлағыҙ. Элек кейемдән өҙөп алған һүрентене ташлағандар, хәҙерге кейем ныҡ, шуға мин һеҙгә бәрәр ҡарыштай иҫке еп таратам, шуны ташларһығыҙ, әлегә епте усығыҙға йомоп торо-ғоҙ.

Һыу инәһе - Ерән һаҡал,
тәнебеҙгә сихәт бир!
Ауырыуҙарҙы алып кит,
йәә Вәкил, йәә Вәкил,
Һыу ингәндә беҙҙе тотма...
ана, ауырыуҙы тот.

*(Балалар өләсәйҙәр менән бергә һамаҡлай. Устарындағы епте, кейем һүрентеһен ситкә ташлайҙар).*

**Беренсе бала:** Һүренте епте һыуға һалайыҡмы?

**Икенсе бала:** Һыу инәһе ерән һаҡалға бирергә, тине бит.

**Беренсе бала:** Һыу инәһе - Ерән һаҡал, тәнебеҙгә сихәт бир!
Ауырыуҙарҙы алып кит,
йәә Вәкил, йәә Вәкил,
Һыу ингәндә беҙҙе тотма...
ана, ауырыуҙы тот.

**Икенсе бала:** Һинә рәхәт, отҡор булғас!

**Беренсе бала:** Отҡор булғың килһә, еләк аша, ти минең нәнәйем.

**1-се өләсәй:** Бик дөрөҫ әйткән. Йолоҡ туйын дөрөҫ үткәреү өсөн дә отҡорлоҡ кәрәк. Йолоҡ туйында кешене, уның йортон ғына түгел, мал-тыуарын, ҡошҡортон да таҙарталар, ауырыуҙарҙан йолоп-ҡотҡарып алалар.

**2-се өләсәй:** Хәҙер ҡоштарҙан башлайыҡ. Ҡош-ҡорт ояһын да төтәсләп алайыҡ. Уларҙы әрем, артыш төтөнө менән төтәсләйбеҙ. *(Ҡаҙ ояһын алып, уның эсен-тышын үлән менән төтәсләйҙәр).* Йәнә һүҙҙәрен дә әйтеү кәрәк. Ҡабатлағыҙ һәм аңлап, хәтерҙә ҡалдырығыҙ.

Ҡош-ҡорт ырыҫынан, ҡарғалар ырыҫынан, етем-еһерҙәр ырыҫынан эшебеҙ уң булһын: сәскән картуфтар, ултыртҡан йәшелсәләр уңып китһен.

*(Балалар менән бергә ҡабатлай).*

**Беренсе бала:** Ҡош-ҡорт ырыҫы нимә була, өләсәй?

**3-сө өләсәй:** Ырыҫ - ул муллыҡ, өлөшлө булыу, бәхетле-даланлы булыу, килгән малдың бәрәкәтле булыуы. Шуға гел үҙ донъяңды байҡап, хәстәрләп, эстән генә уның именлеген уйлап-ҡайғыртып тороу кәрәк. Мал-тыуарыбыҙ имен булһын! Ошо теләк тә көн һайын кәрәк.

**Икенсе бала:** Мал торған урынды ла төтәсләп сығайыҡмы?

**2-се өләсәй:** Эйе, мал һарайын да көслө әрем һыуы, ҡыҙыл борос, көл һыуы менән эшкәртеп торғандар. Таң һыуы һибеп йәки һөрҡөп, мал өҫтөнә бөркөп әмәлләү ҙә бар. Һәр бер әмәл яҡшы теләк менән бергә эшләнә.

**1-се өләсәй:** Ауыл халҡы өсөн мал аҫрау, уны һаҡлау ҙур мәшәҡәтҡә әйләнде. Дүрт аяҡлы йыртҡыстан да, ике аяҡлы енәйәтсе әҙәмдән дә һаҡларға тура килә малыңды. Беҙ атай-олатайҙарҙың малды нисек һаҡлауҙарын күреп үҫтек. Мал бик ҡәҙерле булды - ашы ла, кейеме лә, йорто ла шул малдан килде.

**Беренсе бала:** Малды һаҡлай торған әмәлдәрҙе өйрәт беҙгә, өләсәй.

**3-сө өләсәй:** Мал һаҡлау йолаһын йорт тирәһен, ғаиләнде, ҡош-ҡорт именлеген һаҡлау өсөн дә ҡулланырға мөмкин. Беҙ ниндәйҙер әмәлде башҡарғанда, уны Аллаһ Тәғәлә ихтыярына тапшырып, Уның исемдәрен ҡулланабыҙ. Мәҫәлән, "Йәә, Аллаһу-Раҡыйб" (йәғни: Аллаһым, һин Күҙәтеүсе, һаҡлаусы, тигән мәғәнәлә әйтелә). Әле мал кәртәлә саҡта, уның арҡы-алғы яғына, өҫтө-аҫтына, ике яҡ ҡабырға яҡтан әлеге исемде әйтеп, уға "өф" тип өрәбеҙ. Күҙ ҡарашы менән йөрөтөп, мал өҫтөнә иңләп, "йәә-Раҡыйб" тип әйтә-әйтә махсус "һаҡлағыс-ай" ҡуябыҙ. Әлеге тылсымлы һүҙҙе "йәә-Раҡыйб" тип, ҡабатлай-ҡабатлай, малды ҡапҡанан ихатаға - ҡояшҡа сығарабыҙ. Доға менән һаҡланыу бик ныҡ була.

**2-се өләсәй:** Һарыҡтың йөнөн ҡырҡып алғанда гел генә бер шәлкем йөнөн тәнендә ҡалдырабыҙ. Шул йөнгә "Фәтихә" сүрәһен уҡып, махсус суҡ-сепрәк бәйләйбеҙ.

**1-се өләсәй:** Бәғзе ваҡытта мал көтөүҙән айырыла. "Әд-Духа" сүрәһе ярҙамға килә. Яңы ай тыуғанда, боронғо әйтемде иҫкә төшөрәбеҙ: "Ай күрҙем аман менән, кәртәм тулы мал менән".

Ҡорбан салғанда йәки малды берәйһенә һатыр алдынан бер нисә бөртөк йөнөн алып ҡалабыҙ һәм мал һарайының ишеге башына ҡыҫтырабыҙ. Быны эшләргә бер ҡасан да онотмағыҙ, яҡындарығыҙға ла өйрәтегеҙ.

**2-се өләсәй:** Тулы айҙа, тулғанай ваҡытында уҡыла торған сүрәләр бар: "фәтә-бәрәкәллаһу әхсәнил халиҡин" ("Аллаһ барлыҡҡа килтергәндең яҡшыһына бәрәкәт"). Көҙөн, мал ҡурағa кергәс, "Аятәл Көрси", "Әмәнәррәсүли"не ҡомға уҡып, уны болғайбыҙ. Аҙаҡ мал йөрөй торған ергә, юлдарға әҙләп һибеп сығабыҙ.

**1-се өләсәй:** Шуны ла иғтибарға алығыҙ: һәр йыл һайын, егерме өсөнсө ғинуар - йорт малдарын һаҡлау көнө. Нәҡ шул көндө аяттар уҡырға кәрәк, һөт ашы бешереү мөһим. Иң оҙон көн - 22 июнь дә бөтә йән эйәләре өсөн һаҡлау-яҡлау һорап Йолоҡ туйы үткәрергә бик яҡшы көн. Ә йәй уртаһы - 27 июль - малды, үҫемлекте аяу көнө. Малды салыу, үләнде сабыу килешмәй ул көндө. Кейәһе тейә, тиҙәр. Йәғни, мал да, орлоғон өлгөртмәгән үлән дә рәнйеүе бар. Кешелек борон-борондан бары тик яҡшы уй-ниәттәр менән мал үрсеткән, иген сәскән, урман үҫтергән бит. Ошо яҡшы ниәттәр һәр заманда ла кәрәк.

**Беренсе бала:** Тимәк, 23 ғинуар - бөтә малдарҙы һаҡлау көнө.

**Икенсе бала:** Ә 27 июль - малдарҙы, үҫемлектәрҙе аяу көнө.

**2-се өләсәй:** Бына рәхмәт отҡор балаларға. Онотмайбыҙ: Һамаҡлау бар.

"Малдарыбыҙ күп булһын, малдарыбыҙ ныҡ үҫһен,
Беҙ ашаған ерҙәрҙә, һеҙ ашаған ерҙәрҙә,
Хоҙай Тәғәлә ишетһен, малыбыҙҙы ишәйтһен!"

**Икенсе бала:** Бына көҙ көндө ҡорбан салғайныҡ. Ҡото китмәһен өсөн инәйем уның йөнөн йолҡоп, һарайҙың бер мөйөшөнә ҡыҫтырып ҡуйҙы. "Кот китмәһен, ҡотоң ҡалһын, үҙең кит, алдың-артың уң булһын", тип әйтте.

**1-се өләсәй:** Былай булғас, халыҡ борондан килгән йолаларҙы тота, белә, аңлай икән. Бәрәкәт менән йәшәрбеҙ, иншаллаһ.

**Беренсе бала:** Йолоҡ туйы йәй көнө лә буламы?

**2-се өләсәй:** Йәй көнө Йолоҡто ашлыҡ-иген, ер-һыу өсөн теләк менән үткәрәләр. Бынау нәмәләрҙе тотоп, минә ярҙам итерһегеҙ *(Илаҡ, биҙрәгә күрһәтә)* Һамаҡлау бар, уныҙ булмай.

"Бер бөртөктән - ун бөртөк, ун бөртөктән - йөҙ бөртөк, йөҙ бөртөктән - мең бөртөк. Иләк менән иләп тор, *(иләк менән иләү хәрәкәте)* биҙрәләп ямғыры ҡойоп торһон *(биҙрә менән ҡойоу хәрәкәте).* Биҙрәңде сиртеп тор! Таҡмаҡ әйтәм, бейеп тор!

*(Биҙрә сиртәләр, ҡыҙҙар бейеп китә).*

**3-сө өләсәй:** Хәҙер Йолоҡ туйын тамамлап, бер мөнәжәт әйтәбеҙ. Бик хикмәтле мөнәжәт булыр ул, беҙ исемләп әйткән һәр нәмәне асыҡ итеп күҙ алдына килтереп, үҙегеҙҙе шул нәмә эсендә тип хис итеп тыңлағыҙ. Шифаһы бик ҙур булыр, һеҙ ҙә йолоҡ үтерһегеҙ. Онотмағыҙ, төп шарт - һәр бер әйткән һүҙҙе күҙ алдына килтереп тыңлайһың.



**"Ил-йортҡа именлек теләү" мөнәжәте**

Йәә Аллаһу, әр-Рәхим, именлек тә үҙеңдән.
Һиллеген дә насип ит, йылға, күлдә, диңгеҙҙә,
Илдең аяҙ күгендә, ерҙең аҫты-өҫтөндә:
Ҡуйы урман, тауҙарҙа, йәнә, иркен ҡырҙарҙа,
Йәйрәп ятҡан далала, бар ауылда, ҡалала.
Донъялар имен торһон, ил-йорттар тыныс булһын,
Йәшәгән еребеҙҙә ҡот-бәрәкәт һаҡланһын.
Берүк үҙең арала, зарар-зыян зәхмәттән,
Ут-һыуҙың афәтенән, дауыл ғәрәсәтенән.
Йәә Аллаһу әр-Рәхим, именлек тә бер һиңдә.
Хызыр Ильяс юлдаш булһын, юл-сәфәргә сыҡҡанда.
Хәүеф-хәтәрҙән арала барыһын юл йөрөгәндә.
Йәә Аллаһу йә Сабур, яҡшыларға олғаштыр,
Көс-ҡеүәт, ғәйрәт биреп, ямандарҙан яҙлыҡтыр.
Йәә Аллаһу әр-Рәхмән, мәрхәмәтле, шәфҡәтле,
Миһырбанлы яҙмыш менән һәммәбеҙҙе бүләклә:
Һөйөп-һөйөләп кенә парлылар йәшәп ятһын,
Ишен көтөп зарыҡҡан яңғыҙҙар ишен тапһын!
Тулы ғаиләләр артһын, сабыйҙар күпләп тыуһын,
Ислам динен ҡеүәтләп, яңы быуын ҡалҡынһын.
Эшләгәндең уңын бир, эшһеҙенде лә йүнлә.
Һәҙәмтәле көсеп менән һәр икеһен бүләклә.
Хәсрәтленең хәсрәттәре, ҡайғылары таралһын,
Сирҙәр булһын үтеүсән, сырхауҙар - ваҡытлыса.
Хәйерле уй-ниәт менән оло быуын йәшәһен,
Үҙ йорттары нигеҙендә тигеҙ ғүмер кисерһен.
Көткән генә үҙ донъяһы мәнфәғәтенә яҙһын,
Бөртөкләп йыйған донъяһы ят бауырға ҡалмаһын.

**1-се өләсәй:** Шулайтып, Йолоҡ туйы нимә ул, ни өсөн кәрәк, аңланығыҙ?

**Беренсе бала:** Донъяла имен-һау йәшәр өсөн.

**Икенсе бала:** Бәхетле булыр өсөн.

**2-се өләсәй:** Йылдың ниндәй көндәрендә үткәрелә Йолоҡ туйы? Онотмағыҙ: 23 ғинуар, 22 июнь, 27 июль. Хоҙайҙың һәр көнө изге, иҫән кешегә һәр яҡты көн - ғәзиз бүләк. Шуға күрә үҙегеҙҙә ҡулайлы ниндәй көндә үткәрһәң дә була, тик Аллаһынан рөхсәт һорау кәрәк.

**3-сө өләсәй:** Ниндәй мөһим кәрәкле шарттар бар? Һамаҡлау һүҙҙәре, сүрәләр, теләктәр һәм күҙ алдына килтереү кәрәк. Былары һис онотолмаһын, үтәлһен.

**Зөбәйҙә ҠӘЛӘМОВА.**
**Учалы районы Сораман ауылы.**

ИНТЕРНЕТТАН



# НАСАР ҒӘҘӘТТӘР НИҘӘН?

■ Американың Йәмғәт сәләмәтлеге ассоциацияһы мәғлүмәттәренә ярашлы, мәктәп йәшендәге балаларҙың яҡынса 11,5 проценты көнөнә өс сәғәт тирәһе ваҡытын социаль селтәрҙә аралашып үткәрә. Ғалимдар туплаған статистик мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, был үсмерҙәр насар ғәҙәттәргә тиҙерәк бирелә. Улар араһында стресс, депрессия, йоҡоһоҙлоҡ менән яфаланыусылар, суицид осраҡтары йышыраҡ осрай. Ғәҙәттә, улар насарыраҡ өлгәшә һәм шуға ла ата-әсәләре менән конфликтҡа инә. Бынан тыш, был үсмерҙәрҙең 62 проценты тәмәке тарта һәм 79 проценты алкоголле эсемлек ҡуллана. Белгестәр әйтеүенсә, социаль селтәрҙәрҙә әүҙем аралашыусы үсмерҙәр иртә енси тормош башлай һәм улар араһында наркомандар күберәк була.

■ Автомобиль газы менән бысранған һауа ғүмерҙе ҡыҫҡарта ала. Британия ғалимдары һанап сығарыуынса, ҡала халҡы уртаса 6 ай ғүмерен юғалта. Британияла бысраҡ һауа һәҙәмтәһендә барлыҡҡа килгән йөрәк һәм үпкә сирҙәренән яҡынса 50 000 кеше үлә. Экологик комитет ағзаһы Джоан Валей был мәсьәләне тиҙ арала хәл итергә кәрәк, тип иҫәпләй. Билдәле булыуынса, машиналар PM10 тип аталған матдә йәки ҡаты өлөшсәләр бүлеп сығара. Британияның ҡайһы бер өлкәләрендә был өлөшсәләр күләме Евросоюз билдәләгән норманан күпкә юғары. Был өлөшсәләр респиратор системаһына һәм туҡымаларға үтеп инә һәм үпкә, йөрәк сирҙәре, астма барлыҡҡа килтерә. Ғалимдар бысраҡ һауаны хәҙер тәмәке төтөнөнә тиңләй. Тәмәке тартмаһа ла, даими рәүештә тәмәке төтөнө килтергән зыяндан үлеүселәр һаны бөтә донъяла 600 мең булһа, бысраҡ һауаның сәләмәтлеккә зыянын иҫәпләп бөтөп тә булмай, ти белгестәр. Шул уҡ ваҡытта Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы белдереүенсә, төтөн тәьсиренән йөрәк сире кисҡенләшеп - 379 мең кеше, респиратор инфекцияларынан - 165 мең, астманан - 36 мең 900, үпкә яман сиренән 21 мең 400 кеше үлгән.

■ Австралияның тыуланыу өлкәһендәге тикшеренеүҙәр үҙәге мәғлүмәттәренә ярашлы, күптәр иртәнге ашты ашамай. Тасманиялағы Мензис ғилми-тикшеренеү институты үткәргән тикшеренеүҙәр раҫлауынса, оҙайлы ваҡытта иртәнге аштан баш тартыу йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы сирҙәренә һәм диабетҡа килтереүе ихтимал. Тикшеренеүҙәр авторы Кайли Смит әйтеүенсә, иртәнге аш артыҡ ауырлыҡты кәметергә ярҙам итеп кенә ҡалмай, ҡандағы инсулин һәм холестеринды бер кимәлдә тота һәм шуға ла йөрәк сирҙәре һәм диабеттың үсешенә юл ҡуймай. Был тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, сәләмәт булыу өсөн иртәнге аштың әһәмиәте бик ҙур. Ғалимдар фекеренсә, ата-әсәләр балаларына яҡшы өлгө күрһәтергә һәм көндө файҙалы аҙыҡтан башларға тейеш.

■ Мурманскиҙа урынлашҡан океанариум тренерҙары "тюленетерапия" тип аталған үҙенсәлекле программа уйлап тапҡан. Океанариумдың өлкән тренеры Лариса Мусинова әйтеүенсә, был программа ете йыл элек уйлап табылған һәм ошо осор эсендә унда онкологик һәм неврологик профилле сирлеләр тюлендәр менән аралашып, сәләмәтлеген нығытҡан.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

# ҮҘЕБЕҘ ҺАҠЛАЙЫҠ!

**Башҡорт теленең рус теле менән бер рәттән тәү башлап юридик статусы Башревкомдың 1920 йылдың 24 мартындағы ҡарары менән билдәләнһә лә, тора-бара был документ үҙ көсөн юғалта. Икенсе тапҡыр был статус 1993 йылда ҡабул ителгән ҡанун һәм Башҡортостан Республикаһы Конституцияһы менән нығытыла.**

Ләкин донъяла миллион ярымдан ашыу кеше башҡорт телендә һөйләшеүгә ҡарамаҫтан, 2009 йылда ул ЮНЕСКО тарафынан сығарылған "Донъяның хәүеф аҫтында булған телдәре атласы"на индерелә ("балаларҙың күпселеге үҙ телендә һөйләшә, әммә уны ҡулланыу даирәһе сикләнеүе ихтимал, мәсәлән, бары тик көнкүрештә генә"), йәғни телебеҙ һаҡлауға һәм яҡлауға мохтаж. Рәсәйҙә үҙҙәренең телдәрен популярлаштырыу, шул уҡ ваҡытта яҡлау һәм һаҡлау маҡсатынан алтай (20 октябрь), адыгей (14 март), бүрәт (6 октябрь), коми-пермяк (17 февраль), муҡшы һәм эрзя (16 апрель), сыуаш (25 апрель), татар (26 апрель), урыҫ (6 июнь), черкес (14 март), чечен (25 апрель) телдәре көнө, башлыса күренекле милли яҙыусының тыуған көнөнә тура килтерелп, рәсмиләштерелһә лә, быға тиклем башҡорт теле көнөнөң рәсми датаһы булманы. 2014 йылдан Башҡорт теле көнө йәмәғәтселек тарафынан ғына үткәрелеп килде. Быйыл, ниһайәт, Башҡортостан Республикаһы Башлыҡы Радий Хәбировтың 29 октябрҙәге ҡарарына ярашлы, 14 декабрь - Башҡорт теле көнө тип раҫланды. Ул ғына ла түгел, 2020 йыл Башҡортостанда Башҡорт теле йылы буласаҡ.

Был - БМО-ның юғалып барыусы телдәргә иғтибар йүнәлтеү, уларҙы тергеҙеү, һаҡлау, популярлаштырыу йүнәлешендә милләттәр һәм халыҡ-ара кимәлдә тиҙ арала һөҙөмтәле аҙымдар эшләү маҡсатында 2022-2032 йылдарҙы ерле халыҡтар телдәренең халыҡ-ара 10 йыллығы осороп иғлан итеүенең беренсе йылы. БМО-ның Генераль Ассамблеяһы ағзаилдәргә ун йыллыҡты уңышлы үткәреү өсөн финанс йәһәтенән нығытылған милли механизмдар булдырыуҙы, ә ерле халыҡтарға, үҙ телдәрен һаҡлаусылар булараҡ, ошо осорҙо үткәреү буйынса саралар әҙерләүҙә һәм инициатива менән сығыуҙы тәҡдим итә. Ошо мөмкинлектән файҙаланып, беҙгә, башҡорттарға ла, бик күп эштәр башҡарып ҡалырға һәм Башҡорт теле йылы менән генә сикләнмәйенсә, хатта улар Хөкүмәт кимәлендә рәсми иғлан ителмәгәндә лә, ун йыл дауамында төрлө саралар үткәрергә була. Быының өсөн шарттар бар: республикала төрлө башҡорт йәмәғәт ойошмалары, Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды эшләй. Шул уҡ ваҡытта, Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәрен һаҡлау һәм өйрәнеү фонды ла рәсми теркәлде. Тимәк, был Фонд аша ла төрлө саралар үткәреүҙе, бигерәк тә федераль кимәлдә һәм башҡорттар күпләп йәшәгән төбәктәрҙә, планға индерергә мөмкин.

**Башҡорт теле өйрәнеү өсөн ауыр, тигән фекерҙәр ишетергә тура килә. Әммә донъялағы 6 мең самаһы тел араһында иң ҡатмарлыһы - 10-ау. Әйҙәгеҙ, уларҙы барлап алайыҡ.**

**1. Туюка теле.** "Ауыҙыңды асырҙан алда уйла", тиҙәр ине бәләкәй саҡта, шулаймы? Ә бына Амазонка бассейнында йәшәүсе индеецтарҙың туюка телендә һөйләшеүселәр нимә һөйләгәндәрен уйламай, сөнки был телдә ҡылымдарҙың махсус ялғауҙары бар һәм улар аша тыңлаусы һөйләүсенең нимә һөйләгәнен аңлай ала. Әммә тел ҡағиҙәләренә ярашлы, был ялғауҙарҙан бер нисек тә ҡотолоп булмай. Һәм "ҡатын-ҡыҙ кер йыуа" тип әйтер өсөн һеҙ: "мин быны беләм, сөнки үҙем күрҙем", тип өҫтәргә тейешһегеҙ. Бынан тыш, телдә исемдәрҙең 50-140 класы бар. Туюка теле - агглютинатив тел, тимәк, ундағы бер һүҙ тотош һөйләмде аңлатырға мөмкин. Шулай уҡ "беҙ" алмашын белдереүсе ике һүҙ булғанды һәм инҡар итеүҙе белдерә.

**2. Абхаз теле.** Был телдә өс кенә һуҙынҡы - а, ы һәм аа. Яҙғанда е, о, и, у-ны белдергән ҡалған хәрефтәр башҡа һуҙынҡыларҙы һәм тартынҡыларҙы ҡушҡандан килеп сыға. Ваҡал ярлылығын абхаз теле тартынҡыларҙың күплеге менән компенсациялай: әҙәби телдә улар 58, ә бзыбск диалектында - 67. Әйткәндәй, абхаз алфавитын 1862 йылда кириллица нигеҙендә төҙөйҙәр, тағы ла өс йылдан һуң абхаз әлифбаһын нәшер итәләр. Абхаздарҙың һүҙҙә а хәрефенән башлауы күп тапҡырҙар көлкөгә лә дусар итәлә. Ә ул - билдәле бер артикль булып тора. Уны барлыҡ исемдәр алдынан ҡуялар һәм абхаз теле ҡағиҙәләре буйынса сит телдәрҙән индерелгән һүҙҙәргә лә өҫтәйҙәр. Тимәк, "агибель аэскадры" - көләмәс кенә түгел.

**3. Койсан теле.** Был телдең бер өлөшө юҡҡа сығыу алдында тора, күпселеге инде онотолған. Шулай ҙа был ғәҙәти булмаған һөйләштә яҡынса 370 мең кеше аралаша. Африканың көньяғында, Калахари сүллегендә һөйләшкән телдә кликстар йәки шартлаусы тартынҡылар бар. "Койсан" термины үҙе нама койсан теленән алынған: унда "кой" - кеше, "сан" - бошман тигәнде аңлата. Башта был термин ошо халыҡтарҙың физик-раса төрөн билдәләү өсөн ҡулланылһа, һуңынан Америка лингвисы Джозеф Гринберг шартлаусы өндәрҙе файҙаланған телдәр макроғаиләһенә ҡарата ҡуллана. Күптән түгел генетиктар койсан халҡының борон кешелектең башҡа халыҡтарынан изоляцияла йәшәүен раҫлай һәм Калахариҙан көньяҡҡа һәм төньяҡҡа табан йәшәгән ҡәбиләләрҙең бер-береһенән 30 мең йыл дауамында изоляцияла булыуын асыҡлай.

ШУЛАЙ ҘА БУЛА

# АЙЫУМЫ?

## Ул Госстрах инструкцияһын белмәгән бит



**"Киске Өфө" гәзитендә Миләүшә Ҡаһармановаҥың айыуҙар менән бәйле төрлө ваҡиғалар тураһындағы яҙмалары бер районда прокурор булып эшләп йөрөгәндә булған хәлде иҫкә төшөрҙө.**

Прокурорҙың эше күпселек осраҡта әҙәм балаһының төрлө ҡайғы-хәсрәттәре менән бәйле булһа ла, ҡайһы ваҡыт әллә көлөргә, әллә иларға белмәгән ваҡиғаларға ла тарыҡтыра. Шундай ваҡиғаларҙың береһе айыу менән бәйле ине.

Йәйге бесән мәле булғандыр. Бер көндө минең кабинетҡа бер зәғиф кеше килеп инде. Был кешегә ҡарау мәнән, был әҙәм күптән түгел генә ниндәйҙер ҡазаға юлыҡҡандыр, тигән уй тыуҙы. Сөнки йөҙө кеше ҡурҡытырлыҡ имгәнгәйне. "Ниндәй йомош, ҡайғы-хәсрәттәр килтерҙе прокурорға, һеҙҙе тыңлайым", - тип төпсөшә башланым. Бәҡтиһән, бесән сабып йөрөгәнендә көтмәгәндә айыу килеп сығып, нишләптер ныҡ асыуланып, был кешене туҡмап ташлаған. Күрше аҡланда бесән сабып йөрөгән кешеләр уның ҡысҡырған тауышын ишетеп ҡалып, йүгерешеп килеп быны айыуҙан аралап алып ҡалғандар. Күршеләр килеп өлгөрмәһә, эш нимә менән бөтөр ине, әйтеүе лә ҡыйын. Бальниҫҡа эләгеп, унда дауаланып сыҡҡандан һуң, был кеше Госстрахҡа страховҡа аҡсаһы алырға килә. Күрәсәк ҡазаһын һиҙгәндәй, был кеше үҙенең ғүмерен страховкалаған була. Страховҡа документтарын, айыуҙан туҡмалып, бальниста ятып сығыуын раҫлаған дөкәмиттәрен тотоп, район Госстрахына килә. Бахырҙың тышҡы ҡиәфәте бер ниндәй ҡағыҙһыҙ ҙа ҡазаға юлыҡҡанына ишара була, әлбиттә. Тик Госстрах хеҙмәткәре ҡазаланған кешенең ҡайғыһын аңлаһа ла, тәғәйен аҡсаны биреүҙән баш тарта. Сөнки был кешенең алған йәрәхәттәре Госстрах инструкцияһында яҙылған осраҡтарға тап килмәй булып сыға. Ҡазаланған кеше бындай ғәҙелһеҙлектән ярһып, иреше-талашып Госстрахтан ҡыуылып сыҡҡандан һуң танышталырының кәңәше буйынса ярҙам һорап прокурорға килгән икән.

Быының ҡайғылы хәбәрен тыңлап бөткәс, ышанырғамы-юҡмы тип тегегә ҡарап ултырғандан һуң Госстрахҡа

**✓ Был ергә һин тәҡдиреңә яҙылғанды үтәргә тыуғанһың. Ошо яҙмышыңды тойоп, ғүмереңдең өҫкө мәғәнәһенә күҙ һалып ал һәм йәшәлгән ғүмереңдәге шәүләләрҙе тотоп ала бел.**





**4. Фин теле.** Фин телен өйрәнергә теләүселәр уның, ысынлап та, ҡатмарлы булыуы менән килешер: был телдә 15 килеш, ҡылымдың йөҙҙәрсә заман, зат, ваҡыт үҙгәреше формаһы бар. Тағы ла һүҙынһыҡларҙың сиратлашыуын, суффикстар күплеген һ.б. иҫәпкә алһаң, ҡул һелтәп кенә ҡуйырға кәрәк, тип уйлайһың. Әммә төшөнкөлөккә бирелергә ашыҡмағыҙ: тыңлаусан уҡыусы өсөн фин телендә күп ыңғай яҡтар ҙа бар. Һүҙҙәр нисек ишетелә - шулай яҙыла һәм уҡыла. Баҫым һәр саҡ беренсе ижеккә төшә, зат төшөнсәһе юҡ. Бер нисә үткән заман булһа ла, киләсәк заман бөтөнләй юҡ. Милли характерҙы өйрәнеүсе белгестәр быны финдарҙың һүҙендә тора белеүсәнлеге менән аңлата - әгәр фин вәғәҙә биргән икән, ул уны мотлаҡ үтәйәсәк.

**5. Ҡытай теле.** 1994 йылда төҙөлгән яңы "Чжунхуа цзыхай" алфавитында 85568 иероглиф бар. Бында, әлбиттә, ҡытай теле түгел, ә бик күп диалекттарҙы берләштергән ҡытай телдәре тармағы турала һүҙ йөрөтөү дөрөҫ булыр. Хәйер, улар араһында ла еңелдәре юҡ. Тынысландырыу өсөн шуны әйтергә кәрәк: был 85 меңдән ашыу иероглиф һәр ваҡытта ла ҡулланылмай, уларҙың күпселеге бары тик Ҡытай династиялары тураһында яҙылған иҫтәлекле әҙәбиәттә генә һаҡлана. Мәҫәлән, "се" иероглифы "күп һөйләүсе" тигәнде аңлата һәм 64 һыҙыҡтан тора. Шуға ҡарамаҫтан, хәҙерге иероглифтар ҙа ябай түгел. Мәҫәлән, "нан" ("тонған танау") иероглифын 36 һыҙыҡ менән күрһәтәләр. Иҫәпле генә тиҫтә хәреф өйрәнгән бәхетле европалыларҙан айырмалы, ҡытай балалары саҡ ҡына уҡырға өйрәнеү өсөн кәм тигәндә 1500 иероглиф ятларға тейеш. Етмәһә, уларҙы һүрәтләргә лә өйрәнергә кәрәк бит әле! Бына ошонда күренә лә инде ни өсөн уҡыуҙы энә менән ҡойо ҡаҙыуға тиңләүҙәре!

**6. Чиппева теле.** Ҡылым формалары буйынса, һис шикһеҙ, Американың чиппева, икенсе төрлө оджибве ла тиҙәр, теле чемпион булып тора. Унда 6 мең ҡылым формаһы бар! Телдең ҡатмарлылығына ҡарамаҫтан, ундағы ҡайһы бер һүҙҙәрҙе һәр кем белә: мәҫәлән, "вигвам" йәки "тотем".

**7. Эскимос теле.** Эскимостарҙың ҡар йәки боҙ блоктарынан эшләнгән ҡышҡы торлағын аңлатҡан "иглу" һүҙе таныштыр? Таныш булһа, ҡотлайбыҙ: һеҙ был телдәге бер һүҙҙе беләһегеҙ ҙә инде. Ә эскимос теле донъялағы иң ҡатмарлы телдәр иҫәбенә инә: "Гиннестың рекордтар китабы" раҫлауынса, унда хәҙерге замандың 63 формаһы бар, ә ябай исемдәр 252 флексияға (ялғауға) эйә. Әммә замана лингвистары эскимос телен айырмай, күрәһең, улар тотош эскимос-алеут телдәренең бер тармағы тип кенә ҡарай. Әммә донъя рекордтарын теркәүселәр бер нәмәлә яңылышмай: барлыҡ эскимос телдәре лә бик ҡатмарлы. Әйтәйек, бер ҡылым формаһында суффикстар ярҙамында 12 грамматик категорияны билдәргә мөмкин. Был телдә һөйләшеүселәр образлы фекер йөрөтә: "интернет" һүҙе унда "ikiaqqivik" термины менән аңлатыла, йәғни "ҡатламдар аша сәйәхәт итеү".

**8. Табасаран теле.** Дағстандың ерле халыҡтары һөйләшкән телдәрҙең аныҡ иҫәбе юҡ. Бары тик уларҙың 14-ененә генә үҙ яҙмаһы бар. Уларҙың иң ҡатмарлыһы, "Гиннестың рекордтар китабы" раҫлауынса - табасаран теле. Нах-дағстан телдәре ғаиләһенең лезгин тармағы килештәр буйынса донъя рекордына эйә - уларҙың һаны 44-тән алып 52-гә тиклем! Унда 54 хәреф һәм 10 һүҙ төркөмө бар. Табасаран телен өйрәнеүсегә тормош матур булып күренмәй, сөнки телдә өс диалект бар. Уларҙың һүҙлегендә ситтән ингән һүҙҙәр бик күп. Фарсы теленән тау халҡы боронғо көнкүреш, хәрби һәм һөнәрселек терминологияһын, ғәрәп теленән дини һәм фәнни терминдарҙы, рус теленән заманса ижтимағи-сәйәси һәм фәнни-техник лексиканы үҙләштергән. Был һүҙҙәр бары тик 50-нән ашыу килеш менән үҙгәрә икәнен генә онотмағыҙ!

**9. Навахо теле.** Американдар Беренсе донъя һуғышы ваҡытында уҡ йәшерен хәбәрҙәрҙе ҡатмарлы телдәр аша тапшырған: ул ваҡытта АҠШ армияһында чокто ҡәбиләһе индеецтары йәшәгән. Был тәжрибә Икенсе донъя һуғышы осоронда ла ярап ҡалған. Ауыр баск теленән тыш, хәбәрҙәрҙе навахо теле аша ла тапшырғандар. Инглиз теле менән был телде белеүселәр етерлек булған, әммә яҙмаһы ла, һүҙлектәре лә булмаған. Үҙҙәрен "Windtalkers", йәғни "ел менән һөйләшеүселәр" тип атаған шифровкалаусы навахолар хатта быға тиклем телдәрендә булмаған яңы һүҙҙәр уйлап табырға мәжбүр булған. Мәҫәлән, самолетты "не-ахс-я" - "өкө", һыу аҫты кәмәһен - "беш-ло" ("тимер балыҡ") тип атайҙар. Гитлерҙы иһә навахолар "поса-таи-во" - "аҡылдан яҙған аҡ кеше" ти. Һүҙынҡы һәм тартынҡыларҙан тыш, был телдә дүрт тон - юғары, түбән, күтәрелеүсе һәм кәмеүсе - бар. Бигерәк тә нигеҙ һүҙҙән торған һәм уларға һүҙ яһаусы һәм һүҙ үҙгәртеүсе приставка өҫтәлгән ҡылымдар ҡатмарлы. Фашист үҙе башын ватырлыҡ!

**10. Баск теле.** Был үҙенсәлекле, европа теленә оҡшамаған телдә бик боронғо атамалар һаҡланып ҡалған. Мәҫәлән, бысаҡ - киҫеүсе таш, түбә - мәмерйә ҡыйығы. Был айырым ғына йәшәгән, бер ниндәй ҙә билдәле тел ғаиләләренә ҡарамаған тел. Бөгөн был телдә Испанияның Бильбао ҡалаһынан Францияның Байонна ҡалаһына тиклем 50 километр киңлектәге яр буйы һыҙатында йәшәгән 700 мең самаһы кеше һөйләшә һәм яҙыша. Ул агглютинатив телдәргә ҡарай. Баск теле һүҙлегендә ярты миллион самаһы һүҙ бар. Был синонимдарҙың һәм диалект варианттарының күп булыуы менән аңлатыла. Уның ҡатмарлы һәм аҙ билдәле булыуы Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында ыңғай роль уйнай: уны АҠШ армияһының радистары файҙалана.

**Земфира ХӘБИРОВА**
**әҙерләне.**

шылтыраттым. Госстрахтың хужаһын яҡшы ғына белә инем. Унда-бында урамда осрашҡанда һаулыҡ һорашып үтә торғайныҡ. Ыңғай кешегә оҡшата торғайным үҙен. Шуға ныҡ ҡына аптыраным. Телефонды ағай үҙе алды. Баяғы килгән кешенең ҡайғыһын һөйләп бирҙем һәм ни өсөн аҡса түләргә теләмәүҙәрен аңлатыуҙы һораным. Бәҡтиһәң, ысынлап та, был кешенең айыуҙан алған йәрәхәттәре страховка түләү осрағына тап килмәй икән. Был мине бөтөнләй аптыратты.

Госстрах хужаһына: "Һуң, ағай, айыу ҡайҙан ғына белһен инде донъяла һеҙҙең ул инструкцияғыҙ барлығын һәм ундағы талаптарҙы. Айыу, ғөмүмән, донъяла Госстрах тигән нәмә барлығын белмәйҙер, урманда ул үҙе баш, үҙе түш, тигәндәй йәшәй. Әйҙә, ағай, һин ҡаршылашма, кеше ҡазаланған бит, тәғәйен аҡсаһын түлә", - тип, нисек булһа ла килеп тыуған мәсьәләне ыңғай хәл итергә тырыштым. Тик ағай ныҡ тора, бирешергә уйламай ҙа: "Әгәр мин инструкцияны боҙоп, аҡсаны түләһәм, аҙаҡ, ҡустым, һин үҙең мине яуапҡа тарттыраса́ҡһың", - тип минең ауыҙҙы ябып ҡуйҙы.

Госстрах инструкцияһына һылтанып, теге кешене буш сығарып та ебәрергә була ине. Тик минә өмөтләнеп, күҙен мөлдөрәтеп ҡарап ултырыусы кеше бигерәк йәл ине. Больнисҡа шылтыратып, дауалаусы доктор менән һөйләшеүҙән дә файҙа сыҡманы. Ул да ҡазаланған кешене янынан ҡарап сығып, берәй сараһын табыуҙан баш тартты.

Әҙерәк аптырап ултырғас, Госстрахҡа янынан шылтыратып: "Әгәр был кеше йәрәхәттәре Госстрах инструкцияһына тап килә тигән яңы ҡағыҙҙар килтерһә, түләйһегеҙме?" - тип һораштым. "Ҡағыҙҙары Госстрах инструкцияһына тап килһә, бер һүҙһеҙ түләйбеҙ", тигәстәр, баяғы кешене ҡалаға экспертизаға алып киттем. Ундағы эксперт башҡалар ҡайғыһын яҡшы тойған, аңлаған, бик тә кешелекле кеше ине. Уның менән һөйләшеп, килеп тыуған хәлде аңлаттым. Эксперт ҡазаланыусының ҡайғыһын аңлап, уның йәрәхәттәрен яңынан тикшереп, һәр берәһен үлсәп, Госстрах инструкцияһы талаптарына тап килгән ҡағыҙҙар яҙып бирҙе. Ошо яңы ҡағыҙҙарға таянып, Госстрах теге кешегә тәғәйен аҡсаһын түләне. Мәсьәлә ыңғай хәл ителгәс, ҡазаланыусы минә килеп, ҡабат-ҡабат рәхмәттәрен уҡып сығып китте. Уға айыу менән бөтән бер ҡасан осрашмаҫҡа, ә инде мәжбүри осрашырға тура килһә, уға был донъяла Госстрах тигән нәмә барлығын аңғартып, тик уның инструкцияһы буйынса ғына эш итергә кәрәклеген аңлатырһың, тип көлдөрөп, шаяртып, күңелен күтәреп ҡайтарып ебәрҙем. Бахырҙың бәләкәй генә ярҙам алғанына ҡыуанғанын күрһәгеҙ икән! Ғәҙәттә, беҙҙә халыҡ прокурорҙан яҡшылыҡ өмөт итеп бармай. Прокурорҙың вазифаһы шундай, ул күпселек осраҡта яуапҡа тарттыра, шуға уны бигүк яратып та бармайҙар. Мохтажлыҡ килеп төртөлмәһә, кешеләр прокурорҙы, полицияны урап үтергә тырыша. Шуға күрә, исмаһам, ошондай ваҡ-төйәк мәсьәләләрҙә булһа ла әҙәм балаһына ярҙам итә алғанына ҡыуанып ҡуяһың...

**Зәкирйән ӘМИНЕВ,**
**отставкалағы прокурор.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

## 4-се идея: Тормош китабы

Һин ултырған урында йәнәшәңдә ниндәй ҙә булһа китаптар бармы? Әгәр булһа, уны ҡулыңа ал әле. Ниндәй китап булыуы мөһим түгел, ҡулыңа ал да ҡара. Хәҙер уны башҡа күҙлектән күрергә тырыш. Был китапты ниндәйҙер утрау яры буйында ятҡан икән тип күҙ алдына килтер. Был утрауҙа йәшәүселәр аҡыллы, юғары культуралы, ләкин алфавитты бөтөнләй белмәйҙәр икән, ти.

Нимә буласаҡ? Улар китапты ҡулдарына алғас, ҡағыҙҙың матур итеп биҙәлеүен күрәсәк. Баҫмаһына күҙ һалып, хәрефтәрҙең һәм тыныш билдәләренең хикмәтле һыҙыҡтарын ҡараясаҡ. Улар, ҡалай ҡыҙыҡлы сәнғәт өлгөһө, тип уйлаясаҡ һәм, һис шикһеҙ, китапты ошо күҙлектән баһалаясаҡ.

Китапты аңлармы улар? Был китаптан ниндәй ҙә булһа файҙа алырмы? Юҡтыр, тип уйлайым. Әлбиттә, ҡағыҙ һәм баҫылған билдәләр уның ысын йөкмәткеһенең ни бары күләгәһе генә булып тора. Китап үҙе күпкә юғары үлсәмдәрҙә, ИДЕЯлар өлкәһендә йәшәй.

Беҙҙең тормошта ла шулай килеп сыға түгелме? Беҙ тормоштоң ғәҙәти күренештәренә ҡарайбыҙ ҙа: "Был тормош", - тибеҙ. Был, ҡағыҙға һәм баҫма билдәләргә ҡарап: "Был китап", - тип әйтеү менән бер. Ләкин барыбыҙ ҙа ғүмеребеҙҙең китап кеүек уҡ мәғәнәгә эйә булыуын һәм, әлбиттә, йәшәү маҡсаты уның ҡағыҙына һәм яҙыуҙарына түгел, ә мәғәнәһенә ҡайтып ҡалыуын беләбеҙ. Тормошобоҙ, беренсе сиратта, мәғәнәгә эйә булырға тейеш. Тағы ла бер тапҡыр тормошоңдоң яҙыуҙарына һәм ҡағыҙына күҙ һал әле. Бөгөн бына балаларыңды мәктәпкә оҙатаһың һәм эшкә барырға йыйынаһың, был бик яҡшы. Ҡағыҙыҙ һәм яҙыуҙарһыҙ китапты идеяһын сағылдыра алмаҫ инек, ләкин тормошоңдағы көндәлек ваҡ-төйәктәрҙең асыҡ, өҫкө мәғәнәһенә күҙ һал да уның реаль йөкмәткеһен аңла. Башҡарған эштәреңдең айышын той.

Был ергә һин тәҡдиреңә яҙылғанды үтәргә тыуғанһың. Ошо яҙмышыңды тойоп, ғүмереңдең өҫкө мәғәнәһенә күҙ һалып ал һәм йәшәлгән ғүмереңдәге шәүләләрҙе тотоп ала бел. Ошо бер ИДЕЯ менән бөтә ғүмер китабыңды аңлауға бер аҙым яһарһың. Тормошоң мәғәнәһендәге бәләкәй генә бер шәүлә мотлаҡ тәрән мәғәнәне эҙләүгә килтерәсәк. Был эҙләнеү бер ваҡытта ла буш, уңышһыҙ булмай: ул һине тағы ла тулыраҡ яуаптарға, тағы ла тәрәнерәк һәм йөкмәткелерәк тормошҡа алып бара.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**



**20 ЯНВАРЯ**
**ПОНЕДЕЛЬНИК**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00, 0.40, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 23.30 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30, 22.30 Т/с Премьера. "Ученица Мессинга". [16+]
4.10 Наедине со всеми. [16+]

**РОССИЯ 1**

5.00 Профилактика на канале с 5.00 до 13.00.
13.00, 17.25 "60 минут". [12+]
14.00, 20.00 Вести.
14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 Т/с "Тайны следствия-4". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00, 22.00 Т/с "Крепостная". [12+]
23.05 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
02.00 Т/с "Сваты-2012". [12+]

**БСТ**

**7.00 Профилактика на канале с 7.00 до 14.00.**
**14.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**14.45 "Специальный репортаж". [12+]**
**15.00, 20.30 "Интервью". [12+]**
**15.15 Әлләсе... [6+]**
**16.00, 17.30, 18.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Т/с "Берия. Проигрыш". [16+]**
**17.45 Интервью.**
**18.00 "Ради добра". [6+]**
**18.15, 20.45 "Инцидент-репортаж". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**21.00 Благотворительная акция "Аксаковская елка-2020". [6+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**22.30 Новости (на баш. яз.).**
**23.00 "Теге өсәү!" [12+]**
**23.30 "Күстәнәс". [12+]**
**0.00 Х/ф "Ворчун". Новости (на баш. яз.). [12+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Близнецы". [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**
**5.30 Наука 102. [12+]**
**6.00 "Историческая среда". [12+]**

**21 ЯНВАРЯ**
**ВТОРНИК**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00, 1.40, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 0.30 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30, 22.30 Т/с Премьера. "Ученица Мессинга". [16+]
23.30 Право на справедливость. [16+]
4.10 Наедине со всеми. [16+]

**РОССИЯ 1**

05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия-4". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00, 22.00 Т/с "Крепостная". [12+]
23.05 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
02.00 Т/с "Сваты-2012". [12+]

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Берия. Проигрыш". [16+]**
**11.15 "Республика Live. #Дома". [12+]**
**11.45 Дорожный патруль. [16+]**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә (на баш. яз.).**
**14.30 "Дорога к храму". [0+]**
**15.00, 17.45 "Интервью". [12+]**
**15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**18.00 "Тайм-аут. [12+]**
**18.45 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Адмирал" (Владивосток).**
**22.00 "Детей много не бывает". [0+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "Мадам Нобель". Новости (на баш. яз.). [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Убей меня, голубчик!" [12+]**
**4.45 "Күстәнәс". [12+]**
**5.15 "Орнамент". [6+]**
**5.30 Наука 102. [12+]**
**6.00 "Историческая среда". [12+]**

**22 ЯНВАРЯ**
**СРЕДА**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00, 0.40, 2.15, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 23.30 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30, 22.30 Т/с Премьера. "Ученица Мессинга". [16+]
1.30 "Горячий лед". Фигурное катание. Чемпионат Европы-2020. Пары. Короткая программа. Прямой эфир из Австрии.
4.00 Наедине со всеми. [16+]

**РОССИЯ 1**

05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия-4". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00, 22.00 Т/с "Крепостная". [12+]
23.05 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
02.00 Т/с "Сваты-2012". [12+]

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Берия. Проигрыш". [16+]**
**11.15, 18.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә (на баш. яз.).**
**14.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**15.00, 17.45, 20.30 "Интервью". [12+]**
**15.15 Бала-саға. [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 "Полезные новости". [12+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00, 6.00 "Историческая среда". [12+]**
**23.00 Автограф. [12+]**
**23.30 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**23.45 "Земляки". [12+]**
**0.00 Х/ф "Синг-Синг". Новости (на баш. яз.). [12+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Резной трон". [12+]**
**5.15 "Орнамент". [6+]**
**5.30 Наука 102. [12+]**

**23 ЯНВАРЯ**
**ЧЕТВЕРГ**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.00, 0.40, 2.25, 3.05 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.30, 23.30 На самом деле. [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30, 22.30 Т/с Премьера. "Ученица Мессинга". [16+]
1.30 "Горячий лед". Фигурное катание. Чемпионат Европы-2020. Мужчины. Произвольная программа. Прямой эфир из Австрии.
4.05 Наедине со всеми. [16+]

**РОССИЯ 1**

05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25, 14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.45 Т/с "Тайны следствия-4". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00, 22.00 Т/с "Крепостная". [12+]
23.05 "Вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
02.00 Т/с "Сваты-2012". [12+]

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.15, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00, 16.30 Т/с "Берия. Проигрыш". [16+]**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00, 18.30, 0.00 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Бәхетнамә (на баш. яз.).**
**14.30 "Земляки". [12+]**
**14.45 "Ради добра". [6+]**
**15.00, 17.45 "Интервью". [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**18.00 "Республика Live. #Дома". [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.00 Криминальный спектр. [16+]**
**21.00 Хоккей. КХЛ. "Ак барс" (Казань) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**0.30 Х/ф "Призрак Мон-Сен Мишель". [16+]**
**2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Любовь под вязами". [12+]**
**5.30 Наука 102. [12+]**
**6.00 "Историческая среда". [12+]**

**24 ЯНВАРЯ**
**ПЯТНИЦА**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.00, 9.15 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 17.10, 18.25 Время покажет. [16+]
15.00 Новости (с субтитрами).
15.20 Давай поженимся! [16+]
16.10 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40, 3.15 На самом деле. [16+]
19.40 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 Премьера. "Своя колея". [16+]
23.00 "Горячий лед". Фигурное катание. Чемпионат Европы-2020. Женщины. Короткая программа. Трансляция из Австрии. [0+]
0.20 Х/ф "Шпионы по соседству". [16+]
2.15 "Горячий лед". Фигурное катание. Чемпионат Европы-2020. Пары. Произвольная программа. Трансляция из Австрии. [0+]
4.20 Про любовь. [16+]
5.05 Наедине со всеми. [16+]

**РОССИЯ 1**

05.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35, 9.00 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.25 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 20.00 Вести.
11.25 Местное время. Вести-Приволжского федерального округа.
11.45 "Судьба человека с Борисом Корчевниковым". [12+]
12.50, 17.25 "60 минут". [12+]
14.25, 17.00, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
14.45 Т/с "Тайны следствия-4". [12+]
18.30 "Андрей Малахов. Прямой эфир". [16+]
21.00 Юбилейный выпуск "Аншлага" - нам 30 лет! [16+]
00.45 XVIII Торжественная церемонии вручения Национальной кинематографической премии "Золотой Орёл". Прямая трансляция.
03.35 Х/ф "Искушение". [12+]

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**9.00, 11.00, 16.00, 17.30, 20.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.15 Сәләм. [12+]**
**10.00 Т/с "Берия. Проигрыш". [16+]**
**11.15, 18.00 "Йома". [0+]**
**11.45 Криминальный спектр. [16+]**
**12.00, 22.00 Точка Z. [12+]**
**12.30, 21.00, 6.00 Башкорттар. [6+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**13.30 Үткән гүмер. [12+]**
**14.00, 4.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**14.15 "Красная кнопка". [16+]**
**15.00 Интервью.**
**15.15 Алтын тирмә. [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 "Детей много не бывает". [0+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.45, 20.30 "Интервью". [12+]**
**19.00 "Башкорт йыры" представляет... [12+]**
**19.45 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 Дорожный патруль. [16+]**
**20.45 "Инцидент-репортаж". [12+]**
**23.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.30 "Уфа. Живое". [12+]**
**0.15 Т/с "Цыганки". Новости (на баш. яз.). [16+]**
**2.15 Спектакль "Бесприданница". [12+]**
**5.00 Д/ф "Млечный путь". [12+]**

**25 ЯНВАРЯ**
**СУББОТА**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.15 Д/ф Премьера. "Дмитрий Харатьян. "Я ни в чем не знаю меры". К 60-летию актера. [12+]
11.15, 12.20 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.00 Х/ф "Стряпуха". [0+]
15.25 Д/ф "И, улыбаясь, мне ломали крылья". К дню рождения Владимира Высоцкого. [16+]
17.55 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым. [12+]
19.45, 21.20 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
23.00 Х/ф "Красиво жить не запретишь". [16+]
1.00 "Горячий лед". Фигурное катание. Чемпионат Европы-2020. Женщины. Произвольная программа. Прямой эфир из Австрии.
2.25 "Горячий лед". Фигурное катание. Чемпионат Европы-2020. Танцы. Произвольная программа. Трансляция из Австрии. [0+]
3.20 На самом деле. [16+]
4.30 Про любовь. [16+]

**РОССИЯ 1**

05.00 "Утро России. Суббота".
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота. [12+]
8.35 "По секрету всему свету".
09.30 "Пятеро на одного".
10.20 Сто к одному.
11.10 "Измайловский парк". Большой юмористический концерт. [16+]
13.40 Х/ф "Держи меня за руку". [16+]
18.00 "Привет, Андрей!" [12+]
20.00 Вести в субботу.
21.00 Х/ф "Токсичная любовь". [12+]
00.50 Х/ф "Слабая женщина". [12+]

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 19.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.15 Посмотрим... [6+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград.net. [6+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 Сыйырсык. [0+]**
**11.00 "Апчхи". [0+]**
**11.15 Байтус. [6+]**
**11.30 Благотворительная акция "Аксаковская елка-2020". [6+]**
**12.00 "Кустәнәс". [12+]**
**12.30 Автограф. [12+]**
**13.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**13.15 "Земляки". [12+]**
**13.30 Хазина о Хазине. [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.15 Хоккей. КХЛ. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Барыс" (Нур-Султан).**
**19.30 "Гүзәлкәй". [6+]**
**20.00 "Сәнгелдәк". [0+]**
**20.15 "Ради добра". [6+]**
**20.30 "Мой регион". [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30, 3.15 Итоги недели (на баш. яз.).**
**23.15 "Байык-2019". Гала-концерт. [12+]**
**1.45 Т/с "Цыганки". [16+]**
**4.00 Спектакль "Среда, среда". [12+]**
**6.00 Үткән гүмер. [12+]**

**26 ЯНВАРЯ**
**ВОСКРЕСЕНЬЕ**
**ПЕРВЫЙ КАНАЛ**

5.15, 6.10 Х/ф "Хозяин тайги". [12+]
6.00, 10.00 Новости.
7.00 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.45 Часовой. [12+]
8.15 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.55 Х/ф "Зигзаг удачи". [6+]
15.35 Д/ф "Валентина Талызина. Время не лечит". [12+]
16.45 Точь-в-точь. [16+]
19.25 "Лучше всех!" Новый сезон. [0+]
21.00 Время.
22.00 Премьера. "Эксклюзив". [16+]
23.40 Х/ф "Про любовь. Только для взрослых". [18+]
1.45 На самом деле. [16+]
2.55 Про любовь. [16+]
3.40 Наедине со всеми. [16+]
4.20 Д/с "Россия от края до края". [12+]

**РОССИЯ 1**

04.35 Х/ф "Диван для одинокого мужчины". [12+]
8.00 Местное время. Воскресенье.
08.35 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
09.30 "Устами младенца".
10.20 Сто к одному.
11.05 Т/с "Дом фарфора". [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым". [12+]
01.30 Х/ф "Любовь и немного перца". [12+]

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 Моя вершина. [12+]**
**9.30 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 АйТекә! [6+]**
**10.30 "Детей много не бывает". [0+]**
**11.00 "Сулпылар". [0+]**
**11.30 Гора новостей. [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [12+]**
**12.30 Итоги недели (на баш. яз.).**
**13.15 Алтын тирмә. [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 Башкорттар. [6+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30 "Историческая среда". [12+]**
**17.00 Лига кубков КВН. [12+]**
**18.45 Лидеры региона. [12+]**
**19.15 Тайм-аут. [12+]**
**19.45 Әлләсе... [6+]**
**20.30 "Теге өсәү!" [12+]**
**21.00, 22.30 "Республика Live. #Дома". [12+]**
**21.30, 6.00 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.15, 6.45 "Специальный репортаж". [12+]**
**22.45 "Красная кнопка". [16+]**
**23.30 30-летие федерации каратэ РБ. Торжественная церемония. [12+]**
**1.00 Т/с "Цыганки". [16+]**
**2.30 Спектакль "Мона". [12+]**
**5.15 Д/ф "Млечный путь". [12+]**

*✓ Ялған һүҙ һөйләгән кеше үҙен шул тиклем ауыр хәлгә ҡуя: ошо ялғаны асылмаһын өсөн уға бит аҙаҡ тағы ҡырҡ тапҡыр ялған уйлап сығарырға тура киләсәк. (Александр Поп).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

## 1773-1775 йылдарҙағы КРӘҪТИӘНДӘР ҺУҒЫШЫ ЕТӘКСЕЛӘРЕ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**2-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ихата. Уйламай. Дипломат. Балдаҡ. Һуш. Ишәк. Ҡарама. Һоло. Аҙнабаев. Ураҡ. Азат. Сейә. Олатай. Йөрәк. Лотос. Атыш. Айға. Йүгән. Ағас. Әрме.

**Вертикаль буйынса:** Һималай. "Дошмандар". Арабеска. Уйыл. Тупраҡ. Офис. Халҡым. Әлшәй. Үксә. Токио. Торг. Аҫаба. Әләм. "Башҡортостан". Ураҙа. Дуға. "Ҡурайҡайға".

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Ғинуар (Йомадиәл әүүәл - Йомадиәл ахыр) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 20 (25) дүшәмбе | 7:58 | 9:28 | 13:30 | 15:56 | 17:26 | 18:56 |
| 21 (26) шишәмбе | 7:56 | 9:26 | 13:30 | 15:58 | 17:28 | 18:58 |
| 22 (27) шаршамбы | 7:55 | 9:25 | 13:30 | 16:00 | 17:30 | 19:00 |
| 23 (28) кесе йома | 7:54 | 9:24 | 13:30 | 16:02 | 17:32 | 19:02 |
| 24 (29) йома | 7:52 | 9:22 | 13:30 | 16:04 | 17:34 | 18:04 |
| 25 (30) шәмбе | 7:51 | 9:21 | 13:30 | 16:06 | 17:36 | 18:06 |
| 26 (1) йәкшәмбе | 7:49 | 9:19 | 13:30 | 16:08 | 17:38 | 18:08 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Хөрмәтле әсәйебеҙ, ҡәйнәм, **өләсәйебеҙ Хубъямал Ғәлимйән ҡыҙы Вәлиеваны** ысын күңелдән тыуған көнө менән ҡотлайбыҙ. Ҡәҙерлебеҙ, киләсәк көндәрең өмөт менән тулы булып, ғүмер йомғағың шатлыҡ-һөйөнөстәргә генә тулып тәгәрәһен. Тормош ауырлыҡтарына бирешмәй, сабыр булып, һәр атҡан таңға, яуған ҡарҙарға, килгән яҙҙарға, аҡҡан һыуҙарға һоҡланып, үткән ғүмергә үкенмәй, балаларыңдың изгелеген күреп, әлегеләй изге күңелле, алсаҡ йөҙлө булып, оҙон-оҙаҡ бәхетле ғүмер кисерергә яҙһын. Һин булғанға донъябыҙ йәмле, йәнле, һинең фатихаң менән аҙымдарыбыҙ ышаныслы, бәхетебеҙ тулы, уйҙарыбыҙ яҡты. Хоҙай үҙеңде сәләмәтлектән, бәхеттән, күңел тыныслығынан айырмаһын!



*Юбилейың, әсәй, гөрләп үтһен,*
*Шатлыҡ менән тулһын күңелең.*
*Һиңә ҡарап һәр саҡ һоҡланабыҙ,*
*Һин йәмләйһең, әсәй, өй түрен.*
*Рәхмәт әйтеп һиңә баш эйәбеҙ,*
*Һис бирешмәй йәшә, мең йәшә.*
*Һәр көнөңдә һине яратыусы*
*Балаларың булһын йәнәшә!*

**Ҡотлау менән бөтә балаларың исеменән Вәлиевтар ғаиләһе.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**22 ғинуар "Эскәмйә"** (А. Гельман), драма. 12+
**23 ғинуар "Бомба"** (С. Әбүзәр), комедия-фарс 16+
**24 ғинуар "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+
**25 ғинуар "Әбейүшкә@түшкә.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия. 18.00 12+
**26 ғинуар "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия. 18.00 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**25 ғинуар "Петрушка и витязь"** (О. Проклов), әкиәт. 12.00 0+
**26 ғинуар "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. 12.00, 14.00 0+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**25 ғинуар "Дюймовочка"** (Г.-Х. Андерсен), әкиәт. 12.00, 14.00 0+
**"Что такое Новый Год?"** (В. Щербакова), иң кескәйҙәр өсөн Яңы йыл ыршыһы. 16.00 0+
**26 ғинуар "Лесная ярмарка"** (А. Рахманкулова) 12.00, 14.00 0+
**"Что такое Новый Год?"** (В. Щербакова), иң кескәйҙәр өсөн Яңы йыл ыршыһы. 16.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**25 ғинуар "Музыку слушаем вместе"** 11.00, 13.00 0+
**26 ғинуар "Диалог с оркестром. Портрет НОНИ"** БР Халыҡ инструменттары милли оркестры һәм "Тамыр" телеканалының интерактив проекты. 15.00 0+

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

## БОҘЛАУЫҠТАН...



**Өфө халҡы ҡыш етһә - ҡар күплеккә һәм юлдарҙағы боҙлауыҡҡа ҡаршы химик реагенттар ҡулланыуға, йәйгеһен - туҙанға ҡаршы көрәшә. Ҡыш башланыу менән граждандарҙың бер өлөшө бионорд реагентын ҡулланыуға ҡаршы петиция яҙып, әлеге ваҡытта уға 4 меңдән ашыу кеше ҡул ҡуйған.**

Петиция авторҙары белдереүенсә, реагенттарҙы эшкәрткәндән һуң юлдарҙа "ҡар ҡаракөрән төҫтәге шыйыҡ һәм ҡаты массаға әүерелә. Һуңынан ул машина тәгәрмәстәренә, аяҡ кейеме табанына йәбешеп, ҡаланың төрлө өлөшөнә тарала, бөтөн ерҙе бысрата. Бынан тыш, был автомобилдәрҙең тимер деталдәренә лә зыян килтерә..."

Өфө хакимиәтенең мәғлүмәт үҙәге белдереүенсә, баш ҡаланың Киров районы коммуналь хеҙмәттәре боҙлауыҡҡа ҡаршы башҡа материал ҡуллана башлаған. Унан һуң ҡарҙа ла, ерҙә лә бысраҡ ҡалмай, ул ҡаты һәм шыйыҡ рәүештә ҡулланыла. Ҡаты килеш урамдарҙы эшкәртеүҙә файҙаланылһа, шыйыҡ фазала химик реакцияға инә һәм боҙҙоң иреү процесын тиҙләтә. Шул сәбәпле реагенттың һөҙөмтәлелеге 1,5 тапҡырға арта, бер квадрат метр юлды тотоуға сығымдар ҙа экономиялана. Шыйыҡ ваҡытта уны ел осороп алып китмәй. Реагент 99,98 процент һыуҙа ирей, бысраҡ та ҡалдырмай, автомобилдәргә зыян да килтермәй. Шыйыҡса махсус станцияла һаҡлана.

ӘЙҘӘ, ФЕКЕРЛӘШӘЙЕК!

# УҠЫЙ, УЙЛАЙ БЕЛМӘГӘНДЕҢ...

## киләсәге лә юҡ



**Яҙыусы, журналист һәм дәүләт эшмәкәре Алмас Рауил улы Шаммасовтың интернет селтәрҙәрендәге "Һүҙҙе һаҡлайыҡ!" тип өндәгән йәмғиәт фонды ойоштороласағы тураһындағы мәғлүмәттәрен күргәс, авторҙың үҙе менән бәйләнешкә индек. Был әңгәмә һүҙ менән идара иткән һәм ысын һүҙҙе уҡырға, ишетергә яратҡандар өсөн дә ҡыҙыҡлы булыр, тип уйлайбыҙ.**

**Алмас Рауил улы, был фонд кемдәр тарафынан ойоштороласаҡ һәм уның маҡсаттары ниндәй буласаҡ?**

- Бынан бер йыл элек уҡ яҙыусыларҙы, журналистарҙы, китапханаларҙы, матбуғат баҫмаларын һәм ошо өлкәләге башҡаларҙы ла ҡайғыртыу, хәстәрләү тураһында һүҙ ҡуҙғатҡайным. "Һүҙ ҡуҙғатыу" ул ҡоро хәбәр һөйләү генә түгел, ә ошо проектҡа аҡсаларын һалырға, башланғысты бергә һөйрәшергә теләктәре булған эшҡыуарҙарҙы, фирмаларҙы, бер һүҙ менән әйткәндә, теләктәштәрҙе табыу ине. Бына быйыл шундай теләктәштәр, фекерҙәштәр йыйылғас, әлеге фондты хәрәкәткә килтереү тураһында ла ауыҙ асып әйтә алабыҙ. Ә был эштәрҙең маҡсаты - һүҙ кәҙерен һәм бәсен белгәндәрҙең сифатлы хеҙмәтен баһалау. Мәҫәләнән, халыҡ араһында танылыу тапҡан, уҡымлы, үҙ һүҙе булған журналистарҙы танытыу. Шулай уҡ әҫәрҙәре күтәп алынған яҙыусыларҙың, бигерәк тә йәштәрҙең китаптарын нәшер итеү. Баһалы матбуғат баҫмаларына подписка ойошторорға ярҙам итеү. Халыҡты китап уҡыуға әйҙәгән, үҙ хеҙмәтен яратҡан китапханасыларҙы күтәрмәләү. Бында һүҙгә мөнәсәбәте булған төрлө өлкәләр ҙә инәсәк.

**"Сифатлы" тигән һүҙегеҙ ҡолағыма салынып ҡалды. Ошо тәңгәлдә асыҡлаңҡырап китәйек әле?**

- Бөгөн беҙ инстаграмдағы, социаль селтәрҙәрҙәге фотоларға һүрәтләмәне генә уҡыуға ҡайтып ҡала барабыҙ. Тик был уҡыу түгел, ә тәҡдим ителгән продукцияны ҡулланыу ғына. Беҙ сифатлы һүҙ, мәҡәлә, әҫәр уҡыуҙан ситләшә барабыҙ. Йәғни, уҡыу мәҙәниәтен юғалтабыҙ. **Уҡыу мәҙәниәтен юғалтҡан һайын, уйлау, логикалы фекер йөртөү ҡеүәһенән дә ҡолаҡ ҡағабыҙ. Ә уҡый, уйлай һәм фекерләй белмәгән халыҡтың киләсәге лә юҡ. Бындай халыҡ мәҙәни һәм фәнни үҫеш кисерә алмай. Бындай халыҡ йыһанды үҙләштерә алмай. Бындай халыҡ ижад итә, тоя, күрә, ҡабул итә лә белмәй булып сыға. Бындай халыҡ бары уҡығандарының ҡоло ғына була ала.**

Беҙ тәҡдим иткән фонд һәләтле ижадсыларға юл асасаҡ. Халыҡ тарафынан ҡабул ителгән, яратылған яҙыусыларҙың әҫәрҙәре донъя күрәсәк. Юғиһә, бөгөнгө башҡорт әҙәбиәте ике-өс яҙыусының йондоҙло күгенә әүерелде. Һәм, үрҙә әйткәнсә, махсус комиссия тарафынан ысынлап сифатлы булған эштәр генә ҡабул ителәсәк.

**Матбуғат баҫмаларына реаль ярҙам итеп буласаҡмы?**

- Был проблеманы ла хәл итеү юлдары юҡ түгел. Шул уҡ эшҡыуарҙарҙы, ярҙам итергә теләүселәрҙе йәлеп итергә мөмкин. Был эште хөкүмәткә йәки редакцияның елкәһенә генә һалып түгел, ә әлеге фонд аша башҡарырға була. Бәлә нимәлә? Башҡорт баҫмалары хәләнә ысынлап төшөнгән һәм иғтибар биргән өлкә юҡ. Журналистарҙың йәшәйеше үтә мөшкөлләнеп, хатта ки байғош хәләнә төшөп китте. Үҙебеҙҙең һүҙ оҫталарын шулай кәмһетһәк, милли баҫмаларыбыҙҙы япһаҡ, ниндәй мәшһүр эштәр һәм хәбәрҙәр һөйләргә була? Былар барыһы ла буш буласаҡ. Шунлыҡтан, әлеге фондҡа күберәк булышлыҡ итеүселәрҙе тупларға тейеш булабыҙ.

**Фонд һүҙ оҫталарының ижади эшмәкәрлеген генә түгел, матди яғын күтәрешеүҙе лә күҙ уңында тота, шулай бит?**

- Эйе. Беҙ күпме яҙыусыларҙың, журналистарҙың, ғалимдарҙың хәйерселектә көн итеп, ятаҡ бүлмәләрендә йәшәп, бурыстарға батып, шул төшөнкөлөктә эскелеккә бирелеп донъянан китеүен беләбеҙ. Ә ниндәй һәләтле кешеләр китте шулай! Исемдәрен иҫләгәндә, ижадтарын ҡулланғанда ла, аҙмыштарын хәтерләмәҫкә тырышабыҙ. Яҡшыраҡ шарттарҙа йәшәгәндә улар, моғайын, оҙағыраҡ йәшәй һәм ижад итә лә алыр ине. Бөгөн шул хәл үҙгәргән икән тиһегеҙме? Юҡ. Бөгөн дә был өлкә айырым кешеләр өсөн генә иреклә һәм иркен донъя, ә уларҙың етмеш проценты ижадын икенсе, бишенсе планға күсереп тороп, ашау-йәшәү өсөн көрәшә. Әйткәнемсә, әлеге фонд һүҙ оҫталарының матди торошон яҡшыртыуҙы ла үҙ эсенә ала.

Йомғаҡлап әйткәндә, нәфис һүҙгә һәм сифатлы уҡыуға битараф булмағандарҙы ошо хәрәкәткә ҡушылырға, бергә атларға саҡырабыҙ. Быға тиклем һүҙ беҙҙе яҡланы, ҡурсаланы, беҙҙең өсөн әйтте. Әйҙәгеҙ, беҙ ҙә уны яҡлайыҡ. Был тормошта бөтә нәмә лә һүҙҙән башлана. Иң беренсе Һүҙ булған...

**Әлиә САЙҒӘФӘРОВА яҙып алды.**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ*

# КҮП БЕЛГӘН...

## күп бәләнән ҡотолған

- Мал тота белмәгән - ауыҙын сөйгә элгән.
- Ялҡау тороп һөрәйеп, уңған эшләр ирәйеп.
- Һары йөҙҙә нур булмаҫ, һары ергә кер ҡунмаҫ.
- Теләнә һалынған - әлмәккә алынған.
- Ел сыҡмай дауыл ҡупмаҫ, ир туламай яу сыҡмаҫ.
- Ерҙең нуры - ҡояш, кеше нуры - хеҙмәт.
- Бүләк ҙур булмаҫ, ғилемле хур булмаҫ.
- Белгән белһә лә һорай, наҙан белмәй ҙә, һорамай ҙа.
- Күп көләүҙән күңел үлә, йөҙҙән нуры кибә, алйотлоҡка тиңләштерә.
- Алмандайҙың һүҙенә әүрәмә, төп башына ултыртыр.
- Меҫкенләнгән йәлләткесте йәлләмә - һуңғы тинеңде һурыр.
- Гөрбиәнгә һүҙ ҡаттың ни, тас төбөнә ҡаҡтың ни.
- Иһәнәскә һүҙ ҡуштың ни, этте һөсләттең ни: икеһе бер туған.
- Иманһыҙ йөҙгә нур ҡунмаҫ, таш иҙәндә саң бөтмәҫ.
- Ил ауыҙы ҙур иләк - бөтә ондо ла, ҡомдо ла иләр.
- Һаран ҡулы асылмаҫ, йомарт ҡулында мал тормаҫ.
- Ярлыға яҫтанма - ялыҡ һорар, асты йәлләмә - һуңғы ризығың алыр, ҡомһоҙға яҡынайма - бөтә донъяңды утар, һыҡмырға барма - йөрәк ҡаныңды һығыр.
- Изгелекһеҙ әҙәм - серек түмәр, барынан юғы яҡшы.
- Һәр нәмәнең үҙ мөҙҙәте - агас ҡорой, сәс агара, йәнлеләр үлә бара.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ДАН - НАСАР ТАУАР,

## үҙе ҡиммәт, үҙе боҙолоп бара...

Ҡатын-ҡыҙҙың матур булыу өсөн бары тик бер генә мөмкинлеге, ә һөйкөмлө булыу өсөн йөҙ меңләп ысулы бар.

**(Шарль Монтескье).**

Ялған һүҙ һөйләгән кеше үҙен шул тиклем ауыр хәлгә ҡуя: ошо ялғаны асылмаһын өсөн уға бит аҙаҡ тағы ҡырҡ тапҡыр ялған уйлап сығарырға тура киләсәк.

**(Александр Поп).**

Һәр кем оҙаҡ йәшәргә теләй, ләкин бөрәү ҙә ҡартайырға теләмәй.

**(Джонатан Свифт).**

Кем дә кем, аҡса барыһын да эшләй, тип раҫлай, шул, моғайын, аҡса өсөн барыһын да эшләй торғандыр.

**(Бенджамин Франклин).**

Туйға саҡлы ҡыҙҙәренде - киң асып, туйҙан һуң ҡыҫыбыраҡ ҡара.

**(Томас Фуллер).**

Башҡаларҙан аҡыллыраҡ бул, әммә быны бераүгә лә белдермә.

**(Филип Честерфилд).**

Йәмғиәт нисек фекерләй, уның менән шулай идара итәләр. Йәмғәтселектең хоҡуғы - ахмаҡ һүҙ һөйләү, министрҙың хоҡуғы - ахмаҡлыҡ эшләү.

**(Никола Шамфор).**

Дан - бик уҡ шәп тауар түгел, үҙе ҡиммәт тора, ләкин насар һаҡлана.

**(Оноре де Бальзак).**

Өмөт менән әллә нимә ҡыйратып булмай, ләкин өмөтһөҙ ҙә бер ни ҙә эшләп булмай.

**(Сэмюэл Батлер).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Бер батша бар кешелектең тарихын өйрәнергә теләгән. Аҡһаҡал уға биш йөҙ томдан торған тарихи китаптар алып килгән. Дәүләт эштәре менән мәшғүл батша ваҡыт юҡлыҡҡа һылтанып, аҡһаҡалға ошо биш йөҙ томлыҡ тарихты ҡыҫҡараҡ итеп яҙып килтерергә бойорған.**

**Егерме йылдан аҡһаҡал батшаға тағы килгән: кешелек тарихын ул был юлы илле томға һыйҙырған. Ләкин батша хәҙер инде ҡартайыуына һылтанып, томдарҙы тағы ла ҡыҫҡараҡ итергә ҡушҡан. Тағы егерме йыл үткән. Бик нык ҡартайған аҡһаҡал был юлы бер генә китап тотоп килгән. Ләкин батша үлем түшәгендә ятҡан, уның инде ошо бер генә китапты уҡырға ла ваҡыты ҡалмаған. Шунда аҡһаҡал батшаға бар кешелектең тарихын бер генә һөйләм менән шулай тип әйтеп биргән: "Кеше тыуа, яфалана һәм үлә ..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идараһында теркәлде.
Теркәү танығлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирәт:**
Сәриә ГАРИПОВА,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24
Матбуғат таратыу 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
17 ғинуар 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 4007
Заказ - 29/01